ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

9-15 июль (майай) 2016

№28 (706)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үәт, исмаһам, урлайҙар!**

Йәки диңгеҙ аръяғындағы хәлдәр тураһында



3

**"Урал батыр" эпосын аңлап уҡы!**



8-11

**Әсә роле...**

яҙмыш бүләгеме?



11

**Һары мәтрүшкә - бәхет үләне**



15

**ТВ-программа** 14

**МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**

*Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Ун беренсе сәбәп. Заман елдәренә бирешмәҫ, уға ҡаршы торор көс, ысул табыр өсөн. Ун икенсе сәбәп. Хоҙайға яҡынлау ысулына төшөнөү, йәғни динебеҙ тураһындағы хәҡиҡәткә күңелебеҙҙе асыу өсөн. Ун өсөнсө сәбәп. Бөтөн һорауҙарыңа яуап табыу өсөн.* *(Дауамы 2-се биттә)*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бесән мәле етте, баҡсала емеш-еләк, йәшелсә өлгөрҙө; картуф утап, уны күмергә лә, емеш-еләкте эш итергә лә кәрәк. Бөгөн ауылдарҙа элекке кеүек хеҙмәт шауы ҡайнаймы, халыҡ бөтәһе бер булып өмәләргә сығамы - ғөмүмән, йәнлелек һиҙеләме һеҙҙә?



***Фәриҙә СИТДИҠОВА, Учалы районы Ураҙ ауылы:*** Ҙурҙан ҡубып өмә үткәргән кеше һиҙелмәһә лә, беҙҙә халыҡ бер ҙә эшһеҙ ултырғаны юҡ. Айырыуса йәш ғаиләләрҙең йорт һалып инеүҙәре матур күренеш. Ситтә эшләһәләр ҙә, ауылға ҡайтып йорт төҙөүсе йәштәребеҙ күбәйә. Күп халыҡ Учалыға, Магнитҡа йөрөп эшләй, хатта Арктикала эшләүселәр ҙә бар. Үҙ өйөң - үҙ көйөң, тигәнде яҡшы аңлай кеше, ҡалала фатир өсөн ипотека йәки коммуналь хеҙмәттәр өсөн бик күп аҡса түләп торорға кәрәклеген беләләр, шуға ауылда үҙҙәре өй һалып инә. Ауыл да, тимәк, йәшәй, ҙурая, ә был ҡыуаныс ҡына беҙгә. Бура күтәрәме, бесән сабамы, кәбән һаламы - ағай-энелеһе бер-беренә ярҙамлашып, дәррәү генә башҡарып ҡуя эштәрен. Яңғыҙ-яртыға ҡыйыныраҡ: ниҙер эшләтергә кәрәк булһа, кешеһен табырға, уға түләргә тура килә, шунһыҙ булмай ҙа. Ялланыусы эшенән алда хаҡы менән ҡыҙыҡһына бит инде. Әҙерәк түләгәнде тыңлап та тормай боролоп китә ул. Эскерһеҙ ярҙам, тигәнде, шулай итеп, ауылда ла онотолар хәҙер. Ә былай Ураҙ халҡы бик уңған: мал аҫрайҙар, баҡса тултырып картуф, йәшелсә-емеш үҫтерәләр. Мал көткәс, бесәне кәрәк. Ул да моң түгел уңған әҙәмгә: өй һайын тиерлек техника, ул саба ла, тырмата ла, өйә лә... Шулай еңел генә эшләп алалар хәҙер бесәнде лә. Дөрөҫөн әйткәндә, һәр кем тырышып ята. Үҙе өсөн булһа ла. Унының ла бик һәйбәт, сөнки уртаҡ эшләп, уртаҡ трудодень ала торған колхоз замандары онотолдо инде күптән.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ЙӘШТӘРҘЕ ТӘРБИӘЛӘҮҘЕН...

## бер ысулы ул был бәйге

**Рухи ҡомартҡыларыбыҙҙың милли үҙаңыбыҙҙа йылдан-йыл ҙурыраҡ урын ала, тәрәнерәк төшөнөлә һәм хөрмәтлерәк була барыуы һөйөнөслө күренеш. Бөгөн иһә "Урал батыр" кеүек иң бөйөк рухи мираҫыбыҙ хаҡында ла белмәгәндән - белгән, уҡымағандан уҡыған күп. Әле күптән түгел генә Бөрйәндә уҙған сираттағы "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың XVIII Республика бәйгеһендә был хәҡиҡәт тағы ла бер ҡат раҫланды.**

Тәү ҡарауға, бәлки, "Урал батыр" эпосы хаҡында күп тә яҙылған һымаҡтыр. Әммә уны тикшергән һайын шул билдәләнә: әлегә бер нәмә лә әйтелмәгән икән шул. Әлегәсә донъя күргән махсус китаптар, айырым мәҡәләләр, фәнни конференцияларҙағы сығыштар - быларҙың барыһы ла дөйөм бер система барлыҡҡа килтерерҙәй, тулы картина тыуҙырырҙай оло мозаиканың айырым өлөштәре генә. Мәҫәлән, рустарҙың шул уҡ донъяуи кимәлдә танылыу яулаған "Слово о полку Игореве" хаҡындағы бихисап хеҙмәттең һәм "Урал батыр" тураһында әйтелгәндәрҙең нисбәтен күҙаллап ҡарағыҙ. Идея-тематик йәһәттән, күләм күҙлегенән, фәлсәфә тәрәнлеге һәм поэтик үҙенсәлеге буйынса өҫтөнлөк беҙҙең эпосыбыҙ яғында булһа ла, әлеге нисбәт бер ҙә генә һуңғыһы файҙаһына түгел шул. Иң мөһиме, боҙ ҡуҙғалды. Бөгөн башҡорт фольклористикаһында "Урал батыр" эпосын өйрәнеү мәктәбе барлыҡҡа килгән тип әйтергә ерлек бар. Һәр хәлдә, данлыҡлы эпостың 1910 йылда Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән яҙып алыныуына йөҙҙән ашыу йыл үтеүгә билдәле уңыштар, лайыҡлы ҡаҙаныштар барлыҡҡа килеүен күҙәтәбеҙ. Ошо тәңгәлдә эпостың бығаса фольклор әҫәре булараҡ ҡына өйрәнелеүен дә һыҙыҡ өҫтөнә алып үтке килә. Унын йөкмәткеһендә ҡеүәтле һәм төплө төшөнсә-йомаҡ ята икәнен аңлап, унда һүрәтләнгән Донъя серен асыуға тотонорға ваҡыттыр беҙгә.

**(Дауамы 5-се биттә).**




*Еңеүсе - Гөлфруз Хисмәтуллина.*

12+

✓ *Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм юҡҡа ғына" Белемде тыуғандан алып, ләхеткә ҡәҙәре ал", тип әйтмәгән. Китап уҡыған һайын кешенең фекерләү ҡеүәһе арта, донъяға ҡарашы үҙгәрә, күп нәмәләрҙе танып-белергә, аңларға өйрәнә.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КИЛӘСӘГЕБЕҘ...

## дини белемгә лә бәйле

***Илшат ХАФИЗОВ, Ишембай районының имам-мөхтәсибе, "Дәғүәт" нәшриәте етәксеһе:*** Башҡорт халҡы һәр ваҡыт дингә яҡын булған, дин ҡушҡанса йәшәгән. Егерменсе быуат хәл-ваҡиғалары, үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда ошо бәйләнеш юғала төшкән. Әммә халҡыбыҙға иман кире ҡайта башланы, һуңғы йылдарҙа ололар һәм йәштәр Аллаһы Тәғәлә күрһәткән хаҡ юлға килә. Улар намаҙ уҡый, ураҙа тота, әхлаҡи йәһәттән дә үҙҙәрен тәрбиәләй. Имам Ғазали "Нәсихәт-әл-Мөлөк" тигән китапта шулай тип яҙып ҡалдырған: "Һәр батша динде ҡарарға тейеш, динде ҡараһа - халыҡ динле була, динле халыҡ яҡшы эшләй, яҡшы эшләһә - ҡаҙнаға һалым йыйыла, ил бай була. Ил бай булһа, батшаның ярандары, ҡуштандары яҡшы эшләй, сөнки уларға түләргә аҡса буласаҡ. Батшаның да тәхете ныҡ була". Был һүҙҙәр етәкселәр, түрәләр, батшалар эшенә генә ҡағылмай, милләт тә үҙенең тамырҙары ныҡ булһын өсөн дини белем алыу тураһында хәстәрлек күрергә тейеш.

Мине халыҡтың дини наҙанлығы борсой, әлбиттә. Дин тураһындағы белем ата-әсәнән балаһына күсеп, йәштәр һәр һорауға яуап белеп үҫергә тейеш. Был йәһәттән беҙҙең быуындар араһындағы бәйләнеш ныҡ булмауы билдәле. Шуға күрә, балаларыбыҙға иман орлоғо һалып, уларҙы тәртипле, аҡыллы итеп үҫтереү ниәтендә үҙаллы белем алырға кәрәк. Кешелә дини белем булһа, ул башҡа өлкәләр буйынса ла ғилем туплаясаҡ. Сөнки Ислам дине һәр ваҡыт фән менән йәнәшә бара, бер-береһен нигеҙләп, нығытып килә. Динле кеше эсмәгән, тартмаған өсөн генә түгел, белем даирәһе киң булған өсөн дә айыҡ аҡыллы, алдынғы ҡарашлы була. Тарих биттәренән дә билдәле - Хоҙайға яҡын кешеләр зыялы, халҡының киләсәген хәстәрләгән шәхестәр.

Бөгөнгө заманда дини наҙанлыҡтан арыныу ниәтендә күп итеп китаптар баҫтырыу мөһим. Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм юҡҡа ғына" Белемде тыуғандан алып, ләхеткә ҡәҙәре ал", тип әйтмәгән. Китап уҡыған һайын кешенең фекерләү ҡеүәһе арта, донъяға ҡарашы үҙгәрә, күп нәмәләрҙе танып-белергә, аңларға өйрәнә. Шуның өсөн, дин тураһында бер китапты уҡып сығып, "Ҡөрьән"де һәм доғаларҙы өйрәнеп кенә туҡтап ҡалырға ярамай. Йылдар дауамында белемде камиллаштырғанда ғына диндең асылына төшөнөргә һәм милләттең тамырҙарын нығытырға мөмкин.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бесән мәле етте, баҡсала емеш-еләк, йәшелсә өлгөрҙө; картуф утап, уны күмергә лә, емеш-еләкте эш итергә лә кәрәк. Бөгөн ауылдарҙа элекке кеүек хеҙмәт шауы ҡайнаймы, халыҡ бөтәһе бер булып өмәләргә сығамы - ғөмумән, йәнлелек һиҙеләме һеҙҙә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Исмәғил АҠЪЮЛОВ, хеҙмәт ветераны, Күмертау ҡала округының Маячный ауылы:*** Ҡыҙғаныс, ләкин беҙҙең ауыл элекке кеүек гөрләп тормай шул... Халыҡ машиналарға тейәлеп, йырлашып эшкә китер, эштән ҡайтыр ине, хәҙер - тып-тын. Ҡуралар ҙа бушап ҡалған. Элек ауылда һыйыр малдарының ғына ла һәр береһе 200-ләп баштан торған өс туплау була торғайны, бөттө хәҙер көтөү. Мин йәшәгән биләмәлә 5-6 йыл инде бына ни бары 20-ләп кенә баш малды көтөүгә ҡыуалар. Көтөүсеһе лә юҡ әле уның. Элек мал тотҡан быуын ҡартайып, күбеһе теге донъяға китеп бөттө, ә йәштәр эш яратып бармай. Ауылда йәшәһәләр ҙә мал аҫрамай, картуф сәсмәй генә донъя көтәләр, сөнки ауылда магазиндан күп нәмә юҡ - баралар ҙа һатып алалар: икмәген дә, һөтөн-майын да... Аҡсаһы булғаны. Ә ауылда, бөгөнгө көнөбөҙгә хас булғанса, эш урындары менән маҡтанырлыҡ түгел бер ҙә. Күмер сығармайбыҙ хәҙер, забойҙар ябылып бөттө күптән. Күмер көслө саҡта брикет фабрикаһы ла эшләп тора ине. Бөгөн был яғыулыҡҡа ихтыяж булмағас, етештереү шулай уҡ күптән ябылды. Газ яғабыҙ хәҙер. Ә әлеге бәләкәй генә завод газ баллондары һәм ҡаҙандары эшләп сығарҙы, улары ла кәрәкмәй башлағас, әле нефть эшкәртеү сәнәғәте өсөн ҙур һыйҙырышлы мискәләр етештерә. Ул заводтағы эш шарттары бик насар, шуға күнеп, түҙгәндәре эшләй, түҙмәгәне китә. Бесән мәле, өмәләр хаҡында һүҙ барыуы ла мөмкин түгел, хәҙер шәхси хужалыҡтарҙа хатта салғылар ҙа ҡалмаған. Мал аҫрағандар үҙҙәренә үҙҙәре бесән эшләп ала, күптәренең техникаһы бар. Элекке һымаҡ ҡул салғыһына ҡарап тормайҙар. О-о, элек саба ғына инек бесәнде!..

***Руфина ДИМОВА, Салауат районы Арҡауыл ауылы:*** Әлеге мәлдәрҙә ямғырҙар сәбәпле бесән эштәре тоткарланып тора, ләкин уңған кеше һауа торошон көтөп ултырмаҫ, саба башларҙар инде. Ғәҙәттә, бесәндә шау-шыуһыҙ ҡапыл ғына эшләп алалар хәҙер, сөнки һәр кемдә техника, ҡул көсө әллә ни һалынмай, шуға ла өмә итеп бесән эшләү тигән нәмә онотолдо. Был, бер яҡтан, яҡшылыр ҙа, тик шунһыһы: элекке өмәләр - ул бергә-бергә, уйнап-көлөп тигәндәй, күңелле итеп аралашыу сараһы ла ине бит әле. Ана шул юҡ хәҙер. Ауыл ерендә халыҡ эшһеҙ ултырмай барыбер. Быйыл ҡырҙа шул тиклем еләк-емеш унды. Күптәр ер еләге, көртмәле йыйып һата.Беҙҙең эргәләге Ташауыл, Урмантау яҡтарына Мәскәүҙән килеп яталар хатта: ял итәләр, еләк, бәшмәк, дарыу үләне йыялар. Иренмәгәнгә бик файҙалы, төшөмлө осор. Арҡауылға ла килтереп һаталар еләкте, юл буйҙарында ла тулып торалар. Унан бәшмәк йыя башлай халыҡ. Әйтеүемсә, дарыу үләндәре менән ҡыҙыҡһыныусылар күп. Йорт-хужалыҡ эштәре лә бара. Әле бына картуф утайбыҙ, күмәбеҙ, ҡортон ағыулай йә сүпләйбеҙ. Шулай итмәһәң, кафтуфһыҙ ҡалыуың да бар. Арҡауылда, дөрөҫөн әйткәндә, тормош ҡаланыҡына оҡшап бара ул. Йорттарға газ, һыу үткәрелгән. Ҡайһы берәүҙәр мал да аҫрамай, сөнки ойошмаларҙа эшләп йөрөүселәрҙең аҙыҡ-түлекте һатып алырға мөмкинлеге бар. Маллы кеше ит, һөт, май-ҡаймаҡҡа бер ҙә аптырамай. Мал-тыуар көтөүҙә йөрөй, сиратлап көтә халыҡ. Совет власы кешене ялҡауға әйләндереп, колхоздан әҙерҙе көтөп ултырырға өйрәтһә лә, хәҙер һәр кем үҙ йүнен күрергә тырышып ята. Пай ерҙәрен бүлеп алдылар, кемеһе унда бесән саба, кемеһе фермерға арендаға биреп, малына емен ала. Ҡыҫҡаһы, эшһеҙ, ас ултырған кеше юҡ. Дөрөҫ, балалары мәктәптә уҡыған бер нисә ауыр ғаилә бар барлыҡҡа, тик мәктәп коллективы ундайҙарҙы ҡарауһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырыша.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Йәнәшәгеҙҙә, таныштарығыҙ араһында 2016-ның икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр бармы? Улар 15 июлгә тиклем дә яҙыла ала, тик гәзитте августан ғына алдыра башлаясаҡ. Гәзиттең индексы - 50665, 5 айға яҙылыу хаҡы - 478 һум 60 тин.**

● **Тағы шундай хәбәр:** 1 июлдән 30 августа тиклем "Киске Өфө"гә 2017-нең тәүге ярты йыллығы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителде. Яҙылыу тәртибе һәм тарифтар 2016-ның икенсе ярты йыллығындағыса ҡала, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ.

● **Һәр ваҡыттағыса, дәртләндереү сараһы ла ҡарала:** ошо арауыҡта "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.



● **"Киске Өфө"** гәзите атай-әсәйҙәрегеҙгә, яҡындарығыҙға, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарығыҙға **яҡшы бүләк** була ала икәнен дә онотмағыҙ. Булып үткән яҙылыу кампанияһы барышында, мәҫәлән, эшҡыуар **Фәниә Йәнбирҙина** Бөрйән районына, Өфө мәктәптәренә 60 дана, БДУ профессоры **Әхәт Мостафин** Өфө мәктәптәренә 10 дана "Киске Өфө" бүләк итте. Рәхмәт уларға!

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быйыл уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһе Өфө ҡалаһында үтә. 8-11 августа - түңәрәк өҫтәлдәр, оҫталыҡ дәрестәре һәм фекер алышыу майҙансыҡтары, 12-дә Конгресс-холда пленар ултырыш үткәреү ҡаралған. Сараларҙы баш ҡалалағы 11 белем биреү учреждениеһында: 39-сы һәм 3-сө гимназияларҙа, 5-се һәм 83-сө лицейҙарҙа, 7-се, 27-се, 45-се һәм 159-сы урта дөйөм белем биреү мәктәптәрендә, 102-се башҡорт гимназияһында, 48-се балалар баҡсаһында һәм В.М. Комаров исемендәге балалар ижады һарайында ойоштороруға ниәтләйҙәр

✓10-11 июлдә баш ҡала аша "Ебәк юлы" халыҡ-ара раллиһы үтәсәк. Ул Рәсәй, Ҡаҙағстан һәм Ҡытай территорияһы буйынса уҙа. Быйыл ярыштарҙа 35 илдән еңел һәм юлһыҙ ерҙән дә үтеүсе йөк автомобилдәре категорияһында 350 экипаждың ҡатнашыуы көтөлә. Старт 8 июлдә Мәскәүҙә - Ҡыҙыл майҙанда бирелде һәм экипаждар Ҡаҙан йүнәлешенә юл алды. Артабан спортсыларҙы Өфө ҡаршылаясаҡ. 11 июлдә улар Ҡаҙағстан сиген үтәсәк, 16 июлдә Ҡытайҙа буласаҡ. Финиш - 24 июлдә Пекин ҡалаһында.

✓Ҡыйғы районында - яңы хакимиәт башлығы. Район Советы Шамил Мөхәмәтдиновты контракт буйынса хакимиәт башлығы итеп тәғәйенләне. Белешмә. Шамил Радил улы Мөхәмәтдинов 1967 йылдың 17 майында Салауат районы Малаяҙ ауылында тыуған. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.

✓Чебоксарҙа еңел атлетика буйынса ил чемпионаты тамамланды. Башҡортостан спортсыларында - тағы ла бер көмөш награда. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында 5000 метр араға йүгереүҙә Гөлшат Фазлетдинова көмөш миҙал яуланы.

✓Бөгөн Башҡортостанда рәсми рәүештә теркәлгән 25,4 мең самаһы эшһеҙ иҫәпләнә. Сағыштырыу өсөн: йыл башында халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә 26 меңдән ашыу кеше иҫәптә торған. Әле республиканың вакансиялар банкында 36,4 мең буш эш урыны тураһында мәғлүмәт бар. Башҡортостанда теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,26 процент тәшкил итә.

ИШЕТМӘҺӘҢ - ИШЕТ!

# ҮӘТ, ИСМАҺАМ, УРЛАЙҘАР!



## Йәки диңгеҙ аръяғындағы хәлдәр тураһында

**Үәт, исмаһам, урлайҙар, муйындарынан коррупцияға батҡандар! Ҡайҙа, тиһегеҙме? Билдәле инде... Ҡытайҙа. Шул ҡырым-ҡытайҙағы, диңгеҙ аръяғындағы хәлдәрҙе яҙып уҙмаҡсымын.**

Рәсми мәғлүмәттәр нигеҙендә быйылғы йылдың ғинуар айында ғына ла бында 5459 дәүләт хеҙмәткәре уғрылыҡ юлында тотолоп, ғәҙел язаһын алған, ә инде былтыр ғәйепләнеүселәрҙең дөйөм һаны 50 меңдән ашып киткән. Аптырағандың көнөнән, сараһыҙлыҡтан, ирекһеҙҙән ғәйре яңы закон да ҡабул итеп ташлағандар тегеләр - кем дә кем инде лә килеп 3 миллион юаньде (465 мең доллар самаһы) рөхсәтһеҙ, һорауһыҙ-ниһеҙ кеҫәһенә тыҡшыра, уны шунда уҡ үлем язаһына хөкөм итәсәктәр. Ошо хаҡта уҡыйһың да сәстәрең үрә тора!

Ә беҙҙә, ышанаһығыҙмы быға, әллә юҡмы, шыпа ла урламайҙар! Берәй фермерға ялланып эшләп йөрөүсе белекһеҙ малсының, гонаһ шомлоғона ҡаршы, ярты тоҡ ярманы сәлдереп, арбаһы төбөнә һалып алып ҡайтыу ихтималлығы бар барлыҡҡа. Уныһы ла онотҡанда бер. Ул саҡта ла әле хоҡуҡ ҡанундарын теүәл һәм аныҡ башҡарыусы, атҡарыусы ойошма бурҙы эләктерә һалып, тотош мир алдында рисуай итә, башҡалар һабаҡ алһын, тип, төрмәгә тығып ҡуя. Ә түрәләребеҙгә килгәндә, үтә лә ғәҙелдәр, сафтар, һиңә әйтәйем, улар аҡтан аҡ, пактан пак. Оборона министрлығында "бил бөккән" Евгения Васильева тигән ҡатынды миллиардлап аҡса урлауҙа ғәйепләп, ике-өс йыл тирәһе өҙмәй ҙә ҡуймай башты ҡатырҙылар, ярай әле, күңелдәренә аҡлыҡ биреп, мәлендә туҡталып ҡала алдылар. Бөгөнгө көндә уға ҡаршы ҡуҙғатылған енәйәт эше башҡа асылмаҫлыҡ итеп ябылды, ил алдында йөҙө яҡты, һөйкөмлө ханым әлеге көндә ел-ямғырҙан ышыҡ йылы урында тыныс, баҫалҡы ғына эшләп йөрөй, "нахаҡҡа" рәнйетеүҙәрҙе онотҡан, улар ике ятып бер төшөнә инмәй, тиҙәр. Был ҡатынға яла яғырҙан алда уйлап, иҫәпләп, самалап ҡараһаларсы: миллиардлаған аҡсалар тыңҡысланған тоҡтарҙы сибек кенә ҡатын-ҡыҙ иңе ҡайһылайтып күтәреп йөрөтһөн, бил биртенә, эс төшә лә баһа!

Былтыр шулай юғары урынды биләүсе бер чиновниктың беләгендә 23 миллион долларлыҡ ҡул сәғәте күреп ҡалып, тәрбиәһеҙлек күрһәтеп, дау ҡуптарып маташтылар. Теге зиһенлеген раҫлап, тапҡыр яуап ҡайтара белгән бит һуңғы сиктә: "Миңә уны бүләк иттеләр!" Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, дөйә лә бүләк, төймә лә бүләк! Бына һеҙҙән, мәҫәлән, тыуған көнөгөҙгә бүләк ителгән Ишембай фабрикаһының ойоғон ҡайҙан алдың, кем бирҙе, ни хаҡ, тип берәү ҙә төпсөнмәй, таптырмай бит.

Йәнә, Мәскәүҙә йәшәгән берәүҙең фатиры аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, теүәл 500 миллион ғына тора икән. Ул да, теләһәгеҙ фатирымды арзан хаҡҡа, 450 миллионға һатам, тип ғәйбәтселәрҙең ауыҙын тиҙ япты. "Осһоҙ" торлаҡты һатып алырға теләүселәр бөгөнгө көндә лә табылмаған, йәнәһе лә. Яҙғанымды күҙ уңында тотоғоҙ, ағай-эне, белмәй-ишетмәй ятмағыҙ, уңайлы форсаттан файҙаланып ҡалырға теләүселәр табылыр, бәлки.

Сталинизм хаҡында күп һөйләйбеҙ, ул осорҙоң аяуһыҙлығы хаҡында хәбәрҙарбыҙ. И.В. Сталин баҡыйлыҡҡа күскәс, 1953 йылдың 5 мартында 22 сәғәт 30 минутта унын фатирында, эш кабинетында тикшереү үткәреп, бар мөлкәтте дәүләт иҫәбенә күсергәндәр. Генералиссимустың бер нисә пар эске кейеме, көндәлек һәм байрамдарҙа кейә торған китель-шинелдәре, ике пар хром итеге, төрөпкәһе, кисете, бер нисә ҡап тәмәкеһе, ҡыҙыл төҫтәге блокноты һәм һаҡлыҡ кенәгәһендә 900 һум аҡсаһы табылған. Барыбер, ни тиһәң дә, үҙенә күрә бол.

Ә беҙҙә юғары даирәләргә эшкә килгән, яҡындары өсөн өҙөлөп торған етәксе тапҡанын-таянғанын күҙ ҙә йоммай ҡатынына, балаларына, ҡайны-ҡәйнәһенә, ҡәйнеш-балдыҙҙарына яҙҙыра ла ҡуя. Уның байлығының ниндәй кимәлдә, күләмдә икәнлеген ошонан аҙаҡ юллап ҡара, хәлеңдән килһә! Эштә лә "Москвич", үтә ҡиммәт тигәндә "ВАЗ" маркалы автобомилдәрҙе генә файҙалана, юғарынан талап итһәләр, велосипедҡа атланырға ла әҙер...

Яңыраҡ тағы ла бер мөһим ҡарарҙы ҡабул итергә йыйыныуҙары хаҡында хәбәр иттеләр: киләсәктә етәксенең эш хаҡы уның ҡулы аҫтында эшләүселәрҙең айлыҡ килеменән саҡ ҡына юғары итеп билдәләнәсәк. Был мөһим документтың да тормошҡа ашырына иманым камил. Шулай булмай тағы, беҙҙең етәкселәр аҡса төҫөн күрмәйҙәр ҙә баһа! Уның килеменең кем кеҫәһенә, иҫәбенә күскәнлеген яҙҙым бит инде, ҡабатлап тормайым. Әгәр етәксе эш хаҡы алмай, буштан-бушҡа эшләй икән, ошонан аҙаҡ ябай халыҡ нимәгә өмөт итә ала? Тимәк, күп йыллыҡ хыялыбыҙ тормошҡа аша: тиҙҙән хөрриәт, аҡса-фәлән кәрәкмәгән яңы фармация, коммунизм килә...

**Ғәҙел ДӘҮЛӘТ.**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# БЫЛТЫР ҠЫҪҠАНҒА...

## ниңә быйыл ҡысҡырырға?

**Быйылғы Берҙәм дәүләт имтихандары ла һәүетемсә генә үтеп китте. Айыуҙы ла өйрәтәләр. Әйткәндәй, БДИ-ға тамам өйрәнде, ахыры, халыҡ, әллә ни ығы-зығы ишетелмәне. Яҡшымы, насармы БДИ - уныһы икенсе мәсьәлә, тик бына уға өйрәнеп киткәс кенә ҡабат ҡубып китмәһен берүк "дауыл", шуныһы борсоп тора.**

Был хаҡта һөйләп тә, яҙып та арытты бит инде, үҙгәреш булмаясағы аңлашылды ла һымаҡ. Юғиһә, эш юҡта - эш, һүҙ юҡта - һүҙ булһын, типме, ҡайһы бар депутаттар, хатта сәйәси партиялар һаман булһа бер үк нәмәне сәйнәүҙән бушай алмай йонсойҙар. Ун йыл буйы сүбәк сәйнәп тә бер эш тә ҡыра алманың икән, ниңә "пластинка"ны алмаштырмаҫҡа? Әле бына үҙәк гәзиттәрҙә бер сәйәси партия лидеры мәғариф министрының отставкаға китеүен талап итеүе хаҡында яҙҙылар. Хәҙер бит инде иң тәүгеләр булып БДИ-ның "сират күпереннән" үткән балалар ҙа вуздарға барып инеп, уны тамамлап сыҡты һәм әҙәм булып китте, шөкөр уныһына. Уҡытыусылар ҙа, балалар ҙа, хатта ата-әсәләр ҙә шуға төшөнөп алды: әгәр һуңғы ике йылдың уҡыу программаһын фәҡәт БДИ тестарына ғына әҙерләнеп, яуаптарҙы автоматлаштырһаң, БДИ әллә ни ҡурҡыныс та түгел икән ул. Урыҫ мәҡәлендәгесә, һәр ағыуға ла ҡаршы әмәле бар, тигәндәй.

Бәлки, баяғы сәйәси партия лидеры әйтмешләй, мәғариф министрын алыштырырға ла кәрәктер, ләкин беҙҙе хәҙер был мәсьәлә борсомай. Икенсенән, был ниндәйҙер бер партияның вәкәләтенә лә инмәй. Аңлашыла, бер яҡтан, алда - һайлауҙар. Ләкин халыҡ күптән инде БДИ хәсрәттәре менән түгел, ә нисек итеп эш хаҡын, пенсияһын айҙан-айға һуҙырға, еткерергә тигән хәстәрҙәр менән көн күрә. Исмаһам, һайлауҙар алдынан ғына булһа ла халыҡтың тормош кимәле, социаль хәле менән ҡыҙыҡһынһын ине ул депутат булырға йыйыныусы кандидаттар, сәйәси партиялар...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӨФӨ ӨСӨН ТАУЫШ БИРӘЙЕК!




**Әлеге ваҡытта 200 һәм 2000 һумлыҡ банкноталар өсөн символдар һайлау буйынса кампания бара. Уның беренсе этабы 28 июндә башланып, 28 июлгә тиклем дауам итә.**

Был этапта һүрәтләнеүгә дәғүә итеүсе территориялар һәм уларҙың символдарының киңәйтелгән исемлеге төҙөләсәк. Бының өсөн Твоя-Россия.рф сайты асылып, унда һәр кем бер ҡаланы һәм уны күҙ алдына баҫтырған дүрт символды тәҡдим итә ала. Тәҡдим ителгән символдар 5000-дән дә кәм булмаған тауыш йыйғанда ғына уларҙың һүрәтләнеше интерактив картала күренә.

Һайлап алыуҙың икенсе туры августа буласаҡ. "Йәмәғәтселек фекере" фонды халыҡтан һорау алыу үткәреп, уның һөҙөмтәләре буйынса 10 иң популяр территорияны һәм уларҙың 20 символын һайлап аласаҡ.

Сентябрҙә үтәсәк өсөнсө турҙа яңы банкноталарҙың дизайны һайланасаҡ. Был этапта 10 лидер араһынан ике еңеүсе һәм дүрт символ һайлап алынасаҡ (һәр территориянан икешәр). Йомғаҡлау 7 октябрҙә "Россия 1" телеканалы эфирында яһаласаҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Башнефть" йәмғиәтенең яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензиндың литры 20-30 тингә, йәғни уртаса 0,8 процентҡа артты. Хәҙер "Нормаль-80" бензинының литры, 30 тингә артып, 33,10 һум, "Регуляр-92" маркаһы - 34,10 (+30 тин), АТUМ-92 - 34,60 (+30 тин), "Премиум-95" - 37,30 (+20 тин), АТUМ-95 37,80 һум (+20 тин) тәшкил итә. Хаҡтарҙың үҙгәреүе биржала бензинға күмәртә хаҡтарының артыуына бәйле. Йыл башынан хаҡтар уртаса өстән бер өлөшкә һәм июндә 5,5 процентҡа артҡан.

✓Башҡортостанстат ағымдағы йылдың тәүге дүрт айында республикала халыҡтың йән башына аҡсалата килемен иҫәпләне. Мәҫәлән, ғинуар айында был күрһәткес 20 745,5 һумға тиң булһа, февралдә - 24 179,3, мартта - 22 729,5, апрелдә иһә 24 942,9 һумға еткән. Проценттарҙа ҡарағанда, реаль килем былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда бер аҙ кәмегән. Быйыл ғинуарҙа был күрһәткес 100,6 процент тәшкил иткән, апрелдә 91,7 процентҡа тиклем кәмегән, тип билдәләй статистиктар.

✓1 июлдән республикала Өфө - Ҡандра - Туймазы маршруты буйынса РА-2 маркалы рельс автобусы йөрөй башлай. Ул 300 самаһы пассажирҙы һыйҙыра ала. 2 июлдән Туймазы - Ҡандра - Өфө йүнәлешендәге рейстар башҡарыла. Ҡала яңы поезы расписаниеһы Октябрьский, Туймазы ҡалаларында һәм алты районда йәшәүселәрҙең теләктәрен иҫәпкә алып төҙөлгән. Хәҙер улар юл тығындарына осрамайынса эшләгән йәки уҡыған урындарына барып етәсәк.

✓Башҡортостанда фатир өсөн түләү уртаса 10 процентҡа арта. 1 июлдән төрлө ҡала һәм райондарҙа коммуналь хеҙмәттәр өсөн тарифтар 8-12 процентҡа күтәрелә. Һалҡын һыуҙың кубометры 22,21 һум буласаҡ. Һыу таратыу - 20,47 һум. Былтыр ошо ставкалар 21,16 һәм 18,44 һум тәшкил иткәйне. Электр плиталары булмаған өйҙәрҙә электр энергияһының бер киловаты 2,74 һум тәшкил итәсәк (былтыр - 2,55 һум). Электр плиталары булған өйҙәрҙә йәшәүселәр бер киловатт-сәғәт өсөн 1,92 һум түләйәсәк.

✓Өфөгә "Мәскәү - Пекин" велоуҙышында ҡатнашыусы 25 швейцар булып китте. Швейцарҙарға Өфөнөң йәшел һәм таҙа ҡала, заманса архитектура өлгөләре менән бер рәттән боронғо йорттар байтаҡ булыуы бик оҡшаған. Уларҙың фекеренсә, Өфөлә һәйбәт велосипед юлдары булһа ла, ошо транспорт сараһында йөрөгән кешеләр бик аҙ.

**"Башинформ"дан.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# БЕЛЕМ АЛЫРҒА - ҠЫТАЙҒА!

**М. Аҡмулла исемендәге БДПУ, БДУ Рәсәй һәм Ҡытай вуздары ассоциацияһы составына инде.**

Был ойошманы булдырыу тураһында декларацияға ике ил вуздары ректорҙары форумында Ҡытай-Рәсәй гуманитар өлкәләге хеҙмәттәшлек буйынса комиссия сиктәрендә ҡул ҡуйылғайны. Бынан тыш, төрлө эшмәкәрлек тармаҡтарына ҡағылған һәм ғилми-мәғариф өлкәһендә оҙайлы хеҙмәттәшлек стратегияһын билдәләүсе ике араларға һөнәри белем биреү учреждениелары араһында (медицина һәм техник фәндәр, тел өйрәнеү, дәүләт идаралығы, педагогик белем биреү, ауыл хужалығы һәм транспорт) килешеүҙәр ҙә төҙөлгән.

Форумда ҡатнашыусылар академик алмашыуҙарҙан алып берлектәге белем биреү үҙәктәре асыуға тиклем бихисап мәсьәлә тикшерҙе. Шулай уҡ вуздарҙың яңы глобаль рейтингын булдырыу тураһында идея күтәрелеп, хупланды. Ул белем биреү сифатын, үҙ илендә һәм төбәгендә университеттың ролен, эш биреүсенең унда уҡып сығыусыларҙы баһалауын үҙ эсенә аласаҡ. Рейтинг өс бүлектән торасаҡ: донъя, төбәк һәм милли.

Ҡытай ҡунаҡтары үҙ илдәрендә белем биреү һәм фәндең иҡтисадты үҫтереүҙең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе булыуын билдәләп, вуздарҙың дәүләт тарафынан киң һәм күп ҡырлы ярҙам алыуына иғтибар йәлеп итте. Бары тик Ҡытай мәғарифына һәм юғары мәктәбен үҫтереүгә генә средстволарҙың 18 проценты бүленә. Вуздарға сәнәғәт вәкилдәре лә әүҙем ярҙам итә. Профессор-уҡытыусылар составы донъяның алдынғы вуздарында стажировка үтә, берлектәге тикшеренеүҙәр үткәрә, академик алмашыуҙар ойоштора.

Ҡытай вәкилдәре Рәсәй коллегаларына Ҡытайҙың юғары мәктәбен ойоштороуҙағы ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе. Яҡтар араһында хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса килешеү төҙөлгән. 2020 йылға академик алмашыуҙар һаны һәр яҡтан 100 мең бакалавр, магистр һәм аспирантҡа етәсәк тип көҙаллана. Рус телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу артыуға бәйле, Ҡытай белгестәре Рәсәй вуздары вәкилдәренә педагогтар әҙерләүҙә ярҙам итеүҙәрен һораған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ТӨҘӨЛӨШ ГӨРЛӘЙ



**Быйыл баш ҡалала тағы ла өс ҙур объект сафҡа индереләсәк. Уларҙың береһе Галле ҡалаһы исемендәге урам киҫелешендә Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күпер.**

Уның ҙурлығы шунда - уның суднолар үтеү аралығы 130 метр. Күперҙән ҡала ягына өс һыҙат булһа, "Затон" микрорайонына табан бер һыҙатлы хәрәкәт буласаҡ. Объект составында шулай уҡ йәйәүлеләр өсөн 61 метрлыҡ ер өҫтө үткәүеле төҙөү планлаштырыла. Объект сафҡа инеү менән баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары М-7 "Волга" федераль трассаһынан ҡала үҙәгенә тоткарлыҡһыҙ инеү мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Шулай уҡ Интернациональ урамын Машина эшләүселәр урамынан Вологодская урамына тиклем һуҙыу эштәре тамамланыуы ҡаланың төньяҡ өлөшөндәге урам селтәрен бушатырға мөмкинлек бирәсәк һәм "Өфө - Шаҡша" автоюлына сығыу уңайлылығын тәьмин итәсәк.

Тағы бер ҙур объект - баш ҡаланың Ленин һәм Киров райондарында урынлашҡан Ағиҙел урамынан тимер юл күперенә тиклем арауыҡта Ағиҙел йылғаһы ярын нығытыусы инженер ҡоролмаларын төҙөү һәм реконструкциялау. Был төҙөлөштөң тәү сираттағы бурысы - Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярын һаҡлау.

# ЯМҒЫР ЯУА, ҺЫУ БАҪА...



**Өфө ҡала округы хакимиәте быға тиклем булған ямғыр һыуы канализацияһын модернизациялауҙы өс йыл элек башлағайны һәм уның яңы селтәрен төҙөүҙе дауам итә.**

Октябрҙән апрелгә тиклем Бессонов, Район, Николай Дмитриев урамдарында 500 мм диаметрлы 1200 метрлыҡ ямғыр һыуы канализацияһы селтәрен төҙөү эштәре башҡарылған. Шулай уҡ Рәсәй урамынан Һупайлы урамына тиклем Яңы таулы (Новогорная) урамында төҙөлөш эштәре бара. Бында диаметры 1000 мм булған 1200 метр оҙонлоғондағы инженер селтәре һалыу ҡаралған. Төҙөлөш өсөнсө кварталға тамамланырға тейеш. Әлеге ваҡытта Өфөлә өҫтәмә ямғыр һыуы коллекторҙары төҙөү һәм булғандарын ремонтлау ихтыяжы бар, сөнки тиҫтәләрсә йылдар элек төҙөлгәндәре хәҙерге юл майҙанына иҫәпләнмәгән. Өҫтәүенә, ямғыр һыуы канализацияһы юлға ташланған теләһә нindәй сүп-сар менән тығыла. Бөгөн ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре уларҙы ваҡытында таҙартып торорға тырышһа ла, миллиондан ашыу халҡы булған ҡала быны эшләүе бик еңелдән түгел. Бары тик махсус хеҙмәттәр һәм халыҡтың тәртибе менән генә ҡала инфраструктураһы элементтарын таҙалыкта тоторға, мегаполиста йәшәүҙе тағы ла уңайлыраҡ итергә мөмкин.

# АШАҒАН ТАБАҒЫНА ТӨКӨРМӘ



**Баш ҡала граждандар һәм ҡунаҡтар өсөн уңайлы мөхит булдырыу, территорияларҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эш башҡарылыуға ҡарамаҫтан, дөйөм йорт милегенә, ҡаланы биҙәүсе объекттарға зыян килтергән 2000 вандализм осрағы теркәлгән.**

Статистика күрһәтеүенсә, бындай ғәмәлдәр йәштәр һәм үҫмерҙәр тарафынан ҡылына. Зыян күргән объекттарҙы төҙөкләндереү, күрмәлекле итеү өсөн йорттар менән идара итеүсе ойошмаларға ағымдағы йылдағы планда ҡаралмаған сығымдар тоторорға тура килә. Йыл башынан алып ҡыйратылған, ватылған, емерелгән объекттарҙы төҙөкләндереүгә 1,5 миллион һум аҡса тотонолған. Анализ күрһәтеүенсә, йорттарҙы йылытыу миҙгеленә әҙерләү өсөн баҫҡыс майҙандарындағы тәҙрәләрҙең ватылған быялаларын алмаштырыуға ғына өҫтәмә рәүештә 1,2 миллион һум аҡса кәрәк.

Вандализм проблемаһы йәмғәтселектең дә иғтибары үҙәгендә булырға, һәр кем "минең ҡалам", "минең урамым", "минең йортом" тигән күҙлектән сығып фекер йөрөтөргә, дөйөм милеккә һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға тейеш тә бит...

# БДИ ҠУРҠЫНЫС ТҮГЕЛ...



**Башҡортостан Мәғариф министрлығында Берҙәм дәүләт имтиханына яҡынса йомғаҡ яһалды.**

Республика мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Айбулат Хажин билдәләүенсә, быйыл Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусылар эштәрҙе уҙған йылдарға ҡарағанда яҡшыраҡ башҡарған. Профилле математика буйынса һөҙөмтәләр былтырғынан ике тапҡырға тиерлек яҡшыраҡ. Быйыл 435 кеше юғары балл (80-дән күберәк) йыйған (былтыр - 294). Ун кеше 100 балл туплаған, 2015 йылда ундайҙар булманы. Уҡыусыларҙың 11,2 проценты минималь балды (27) йыя алманы - былтыр 25,1 процент. Һуңғы һандар үҙгәрергә мөмкин. Был - төп этаптың мәғлүмәттәре, тип аныҡланы министр урынбаҫары.

База кимәлендәге математикаға килгәндә, бында ла ыңғай динамика күҙәтелә. Имтихан тапшыра алмаған уҡыусыларҙың һаны 5,1 проценттан 2,1-гә тиклем кәмегән. Отличниктар һаны, киреһенсә, артҡан: былтыр 34,9 процент (4628) булһа, быйыл иһә 51,5 процент (9424).

Башҡортостан мәғариф министрының беренсе урынбаҫары тәбиғи-фәнни йүнәлештәге предметтар буйынса Берҙәм дәүләт имтиханының яҡшы һөҙөмтәләрен дә билдәләне.

Тағы ла бер мотлаҡ предмет - рус теле. Республикала уртаса балл - 66. Юғары балл йыйған (80-дән күберәк) эштәр һаны - 15,9 процент, 2015 йылда был һан 15 процент тәшкил иткән. 100 балға 21 кеше яҙған. Уҡыусыларҙың 0,4 проценты ғына минималь балды (24) йыя алмаған.

Башҡортостанда 39 кеше 100 балл туплаған. Шул иҫәптән географиянан - ике, әҙәбиәттән - бер, рус теленән - 21, профилле математиканан - 10, биологиянан - ике, информатиканан - өс.

Дөйөм алғанда, быйыл республикала Берҙәм дәүләт имтиханы объектив һәм тотҡарлыҡһыҙ үтте. Алты тәртип боҙоу осрағы теркәлде, уларҙың эштәре юҡҡа сығарылды.

# ЯҢЫ ҺЫНДАР БИҘӘЙӘСӘК




**Өфөнөң Ленин, Пушкин һәм Зәки Вәлиди урамдарында яңы скульптуралар барлыҡҡа киләсәк. Уларҙы Өфөгә "ArtTerria" халыҡ-ара симпозиумына алты илдән (Рәсәй, Франция, Япония, Болгария, Көньяҡ Корея, Грузия) килгән 13 оҫта эшләй. Сара 1 июлдән 3 августҡа тиклем дауам итә.**

"Мираҫ" галереяһының арт-директоры Ольга Рамазанова әйтеүенсә, эш майҙансыҡтары "Ҡаланы йәшелләндереү хужалығы" предприятиеһы биләмәһендә урынлашасаҡ (Р. Зорге урамы, 11/1, 2-се корпус). Бында рәсми асыу тантанаһы һәм ойоштороусылар менән матбуғат конференцияһы уҙҙы ла инде. "Эштәрҙең эскизы күптән раҫланған, бөтә скульптуралар ҙа Мансур яҡтылығындағы гранитһан эшләнәсәк, - тине Ольга Рамазанова. - 3 августа улар ҡала урамдарына ҡуйыла башлай".

Бер үк ваҡытта "Рәсәй. Евразия киңлеге: цивилизация һәм мәҙәниәт" тип аталған симпозиум ойошторола. Сара хәҙерге заман скульпторҙарының ижадын популярлаштырырға булышлыҡ итәсәк һәм ҡалала тағы ла бер туристик нөктә булдырырға мөмкинлек бирәсәк. Симпозиумдың кураторҙары - скульптор, Рәсәй Рәссамдар союзы ағзаһы, Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты Руслан Ниғмәтуллин, скульптор, Рәсәй Рәссамдар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Владимир Лобанов һәм Рәсәй Рәссамдар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Рәсих Әхмәтвәлиев.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Быйыл Күгәрсен районы Сәйетҡол ауылында йәшәп, 1958 йылда вафат булған танылған халыҡ бағыусыһы Шәмиғол хәлфәнең тыуыуына - 148, вафат булыуына 58 йыл була. 16 июлдә Сәйетҡол ауылында уның хәтер кисәһе уҙғарыла. Барлыҡ һорауҙар менән 8-927-639-1855 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһының иң яҡшы тапшырыуҙары Ҡытайҙа күрһәтеләсәк, республика тамашасылары иһә Ҡытай журналистары әҙерләгән программаларҙы ҡарай ала. Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм Ҡытайҙың "CCTV-Русский" телеканалы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө.

✓1 июлдән илдә минималь хеҙмәт хаҡы 7500 һумға тиклем артты. Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының ошо йылдың беренсе кварталында үткәргән мониторинг мәғлүмәттәре буйынса, республикала 242 меңдән ашыу бюджет өлкәһе хеҙмәткәре иҫәпләнә.1 майҙан Башҡортостанда иҡтисадтың бюджеттан тыш секторы ойошмалары хеҙмәткәрҙәре өсөн минималь хеҙмәт хаҡы 6900-ҙән 8900 һумға тиклем күтәрелде.

✓Рәсәй Хөкүмәте Башҡортостанға һәм күп профилле муниципаль берәмектәрҙә халыҡ мәшғүллегенә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән саралар буйынса һөҙөмтәлелектең юғары коэффициентына эйә булған тағы ла 11 төбәккә субсидияларҙы арттырҙы. Башҡортостан ошо маҡсатҡа 367,4 миллион һум аҡса аласаҡ.

✓Яңауыл районы халҡы үҙ көсө менән билдәле яҡташты, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ артисы Радик Гәрәевка һәйкәл ҡуйырға хәл иткән. Уны ҡуйоу өсөн аҡса йыйыу иғлан ителгән. Бағыусылар, йырсының ижадын үҙ итеүселәр үҙ өлөшөн индергән, шулай уҡ проект урындағы ҡаҙнанан финансланған. Һәйкәлдең хаҡы 500 мең һум самаһы тәшкил итә.

✓Берҙәм федераль реестрҙа иҫәптә торған 36 мең профессиональ кадастр инженерҙарының 1237-һе Башҡортостанда эшмәкәрлек алып бара. Республика ошо күрһәткес буйынса Татарстанды, Пермь крайын, шулай уҡ Ырымбур, Һарытау, Һамар һәм Нижегород өлкәләрен уҙып китеп, Волга буйы федераль округында алдынғы урынды биләй.

АФАРИН!

# ЙӘШТӘРҘЕ ТӘРБИӘЛӘҮҘЕҢ...

## бер ысулы ул был бәйге



(Башы 1-се биттә).

Ә инде бәйге темаһына ҡайтып, уны күҙәткәндә, хәлдәр түбәндәгесә. Республика Мәғариф министрлығы һәм Бөрйән район хакимиәте менән берлектә үткәрелгән был бәйгенең риүәйәттәр буйынса Урал батыр төйәге булған Бөрйән ерендә үткәрелеүе лә тәбиғи. Был йолаға инеп тә китер, моғайын. Эпосты башҡарыусылар бәйгеһендә ҡатнашҡан балалар ҙа бит республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән тап ошо хозурлыҡты, мөғжизәләр башы булған ер-һыуҙарҙы, уҡығандарын ысын итеп күҙ алдына баҫтырғандай күренештәрҙе күреп ҡайтырға хыяллана. Һәм Бөрйән уларҙы мәхрүм итмәй: Шүлгән мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан күле, Бабсаҡ бей ҡәберлеге, ҡырағай тәбиғәт, әкиәти урман-таүҙар, матур йолалар менән таныштыра.

Бәйгелә быйыл да йөҙҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Былтырғынан айырмалы рәүештә, бәйгеселәр араһында Силәбе өлкәһе ҡунаҡтары ла булды. Арғаяш районы һылыуы Ләйсән Истамғолова "Урал батыр" эпосының 1200 юлын ятлап, тәүге тапҡыр ҡатнашҡан. Ул Бөрйән ерҙенең хозур тәбиғәте, конкурсанттарҙың ижади маһирлығы менән һоҡланыуын белдерҙе.

Тәүге көн юлдан арып килгән балалар һәм уҡытыусылар урынлашыу, үҙ-ара танышыу, эргә-тирәгә сәйәхәт ҡылыу һәм киске байрам менән тамамланһа, икенсе көн тулыһынса эш көнө булды. Ике сәхнә лә бушаманы. Береһендә эпос уҡыусылар булһа, икенсеһендә эпос күренештәрен сәхнәләштереүсе командалар көс һынашты. Быларҙың барыһын да йылдан-йылға күҙәткәнлектән, сағыштырыу һәм үсеш барлығын аңғарыу тәжрибәһенән сығып, йәш сәсәндәр ҙә, командалар ҙа һәр йыл һайын ниндәйҙер үҙенсәлек, яңылыҡ алып килә, тип әйтеп була. Бында уҡыу стилен төрләләп: һамаҡлап, көйләп, әйтеш итеп, импровизациялап; думбыра, ҡурай, ҡумыҙ, һуҡма кеүек музыка ҡоралдарын ҡулланып, костюмдарҙы үҙгәртеп, әртислек һөләттәрен ҡулланып һ.б. башҡарылған алымдарҙы һанап китергә мөмкин. Тимәк, йәштәр йылдан-йыл оҫтара, шымара бара. Шулай булмай һуң, бәләкәй синыфтарҙан бәйгелә ҡатнашып, эпостың теләһә ҡайһы еренән дә дауам итеп алып китерҙәй һәләт кимәленә еткәндәр ҙә байтаҡ бында. Мәҫәлән, Учалы районы Яңы Байрамғол урта мәктәбенең икенсе синыф уҡыусыһы Ләйсән Золотарева "Урал батыр" эпосын тулыһынса яттан белә. "Тәүге тапҡыр 2014 йылда был конкурста ҡатнашырға килгәнемдә мин әле мәктәпкә лә бармағайным. Дүрт йыл дауамында эпосты тотош ятлап бөтә алдым, сығыш яһағанда думбыра, ҡумыҙға ҡушылып башҡарам. Бынан тыш, атайымдан ҡурайҙа уйнарға ла өйрәндем. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын ҡабат-ҡабат уҡып ҡына торғо килә. Сөнки ул бөтә йәнһүрәттәрҙән дә ҡыҙығыраҡ, кешегә аҡыл бирә, хатта тәрбиәләй. Бына мин уның яҙмамында яҡшылыҡтан яуызлыҡты айырырға өйрәнәм. Урал батыр диңгеҙ һыуын эскәс, ауырып китә - тимәк, төрлө бысраҡ һыуҙы эсергә ярамай. "Урал батыр" эпосы миңә Бөрйәнгә юл асты. Бында килеп, Шүлгәнташ мәмерйәһендә боронғо һүрәттәрҙе күреүемә, яңы дуҫтар табыуыма бик шатмын", - тине Ләйсән, тәьсораттары менән уртаҡлашып. Әйткәндәй, Учалы Башҡорт гимназияһы уҡыусылары командаһы ла бик маһир булып сыҡты. Уларҙың "Урал батыр дейеүҙәр илендә" тип аталған сәхнәләштереүҙәре иң яҡшыһы, тип табылды.



Республика бәйгеһенең еңеүсеһе исемен Ишембай ҡалаһы Ә.З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназияһының унынсы синыф уҡыусыһы Гөлфруз Хисмәтуллина яуланы. Думбыра, дөңгөр, ағас һәм тимер ҡумыҙҙа яҡшы уйнаған талантлы ҡыҙ бөтә жюри ағзаларын һүҙгә маһирлығы менән хайран итте. "Урал батыр" эпосын һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең конкурсында бишенсе тапҡыр ҡатнашам. Һуңғы ике йылда республика кимәлөнә иң яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеүсе конкурсанттар үтеүе бәйге кимәлен күпкә юғары итте. Быйыл миңә Учалы ҡалаһынан килгән конкурсанттарҙың сығышы оҡшаны, командалары ла, айырым һөйләүсәләре лә бик шәп сығыш яһаны, уларҙан өйрәнеп ҡалырға була. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын тулыһынса ятлап, белһәм дә, унда йәшерелгән серҙәрҙе тулыһынса аңлап бөтмәйем әле. Һәр уҡыған, ятлаған һайын үҙемә яңылыҡ асып, тәрән фәлсәфәүи мәғәнә һалынған юлдарҙан фәһем алам. Ата-әсәләр балаларына нимә эшләргә, нимә эшләмәҫкә өйрәткән кеүек, эпостан да тормош дәрестәре, фәһем алам", - тине Гөлфруз беҙҙең менән һөйләшкәндә.

- Бәйге йылдан-йыл байыраҡ, юғарыраҡ кимәлдә була бара, - тип һөйләне билдәле фольклорсы, конкурстың баһалама комиссияһы рәйесе Әхмәт ағай Сөләймәнов. - Мин бында ойоштороу кимәлен әйтәм. Ә балаларға килгәндә, тап ошо бәйгелә генә уларҙың асылы асыла, улар бар оҫталығын күрһәтә ала, тигән һүҙ түгел әле. Ни тиһәң дә, улар әле йәш, ҡаушап, башҡа сәбәптәр арҡаһында ҡайтышыраҡ сығыш яһап та ҡуялар. Тик был бәйгенең маҡсаты - йәш быуындың рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы белеүе һәм өйрәнеүе. Ә төп маҡсатҡа беҙ өлгәшкәнбеҙ. Быйыл мине Ләйсән Золотарева тигән бәләкәй генә ҡыҙыҡай хайран итте. Ул әҫәрҙе тулыһынса белә! Шундай импровизация оҫталығына эйә. Былғаса эпосты кемдәрҙән генә, ниндәй генә телдә һәм маһирлыҡта тыңлаһам да, ошо сабыйҙың уҡыуы күңелем кылдарын ҡуҙғытты. Әлбиттә, һәр береһе үҙенсә оҫта, һәр береһе маҡтауға лайыҡ, уларҙы әҙерләгән уҡытыусылар, ҡуша әйәреп килгән ата-әсәләр - улар барыһы ла бөгөн беҙҙең милләттең яҡшы күрһәткесе булып ултыра. Мин быйылғы конкурс менән бик ҡәнәғәт...

Баһалама комиссияһы ағзаһы профессор М. Иҙелбаев та үҙ фекерҙәрен белдерҙе:

- Йәш быуынды тәрбиәләүҙең бер ысулы итеп күрәм мин был конкурсты. Күреп торалһығыҙ, балалар баҡсалары тәнәйҙәре лә эпостың әллә күпме юлдарын ятлаған! Телдәре көрмәлеп, саҡ һөйләшеп торған кеүектәр, ә бит уҡыйҙар, хатта көйләп, һамаҡлап ебәрәләр. Тимәк, был әҫәр бәләкәй сабыйҙан оло аҡһаҡалға тиклем - телебеҙҙә, уның өсөн йәш айырмаһы ла, ҡабул итеүитмәү даирәһе лә юҡ. Ул һәр быуындың аңына үҙ фәлсәфәһе, үҙ кимәле менән һеңә ала. Йәғни, бала уны - әкиәт итеп, үсмерҙәр - фольклор, олораҡтар донъяуи фәлсәфә итеп ҡабул итә. Тағы шуны әйтер инем. Был эпос Ислам дине барлыҡҡа килгәнгә тиклем ижад ителгән, шуның өсөн ул башҡорттар өсөн Ҡөрьән кеүек үк изге ҡомартҡы. Ул Ҡөрьән кеүек үк үҙендә әллә күпме серҙәр һаҡлай. Беҙ шуға ла эпосҡа тартылабыҙ, уны йөрәгебеҙ, аңыбыҙ менән аңларға тырышабыҙ. Тимәк, юҡҡа ғына түгел. Уның серҙәрен киләсәктә бына ошо балалар асыр, тип өмөтләнәбеҙ...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,**
**Сәриә ҒАРИПОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Тоҙ ултырһа...

❖ Тоҙ ултырһа, ҡыр грушаһының 20-25 см оҙонлоҡтағы 5 ботағын ваҡларға, 1 литр һыу ҡойоп, 20-25 минут талғын утта ҡайнатырға һәм сәй урынына эсергә. Көнөнә 15 стакан тирәһе эсергә, һәр ваҡыт яңынан ҡайнатырға. Шул рәүешле 2-3 көн дауаланырға. Әгәр ҙә был сәйҙе 3-4 аҙна даими эсһәң, простата биҙе аденомаһын башланғыс стадияһында дауаларға була.

❖ Быуындарҙы шлактарҙан таҙартыу, матдәләр алышыныуын яйлау, артыҡ холестериндан ҡотолоу өсөн түбәндәге сара яҙҙам итер: 250 грамм һарымһаҡты ит турағыстан үткәрергә, быяла банкаға һалып, өҫтөнә 250 мл үсемлек майы ҡойорға, ҡара төҫтәге сепрәк менән урап, һыуыткыстың аҫҡы кәштәһендә 3 көн тоторға. Бынан һуң һарымһаҡлы майға тирмәндән үткәрелгән 250 грамм арпа ярмаһы һалығыҙ, болғатырға һәм тағы ла һыуытҡыста 3 көн тоторға. Көн һайын иртән ас ҡарынға 1-2 балғалаҡ ашарға.

## Күҙ шешкәндә...

❖ Ярты стакан ҡыяр ҡабығына 1 стакан ҡаты сәй, ярты балғалаҡ сода ҡушып, 2 сәғәт төнәтергә. Ауыртҡан күҙҙәргә сылатҡыс һалырға.

## Ҡоро йүтәл

❖ Ҡоро йүтәлде дауаларға банан ярҙам итер. 2 бешкән бананды сәнске менән иҙергә, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм һәр 2 сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ ашарға. Бал ҡушырға ла мөмкин. Бер көн дауаланғандан һуң йүтәлден эҙе лә ҡалмаҫ.

## Йөрәк сире

❖ Умрау һөйәге аҫтына баҡыр аҡса йәбештерергә (1961 йылға тиклем сыҡҡан) һәм 10 көн уға теймәҫкә.

## Ҡан тамырын таҙартыу

❖ 1 лимонды ҡабығы менән турарға, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 3 көн төнәтергә, һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 50-шәр мл эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

### ТЕЛ КИЛТЕРЕҮ

Бәләкәй балалар, ғәҙәттә, тиҙ генә һөйләшеп китә алмай. Теле асылмаған баланы шулай тип йыуатҡандар:

*- Бына тағы яҙ килер,*
*Балама тел әпкилер*
*Ҡоштар йылы яктарҙан,*
*Ер таҙарғас аҡ ҡарҙан.*

### СӨННӘТ

Ир баланы сөннәтләү - изге эш, бәйғәмбәрҙәрҙән ҡалған йола. Малайҙарҙы ике, дүрт, алты йәштә сөннәткә бирәләр. Йәшенең шулай йоп булыуы шарт. Сөннәткә алып барғанда:

- Бабай килә, бабасы килә. Күгәрсен, ҡуян алып килә!

- Баба килә, барҡылдаҡ ат килтерә, - тип баланы алдаштыралар.

Сөннәткә ултыртыусы 99-сы йәки 101-се малайҙың йән еренә ҡыл урып китә имеш, тиҙәр. Шуға ла һаҡлана торғайнылар. Быны өсөн сөннәтләнгән баланы тоноҡ һыуға ултырталар - ҡыл тарала.

Сөннәт баланың ысын ир затынан булыуын күрһәтә. Мыйыҡ, һаҡал йөрөтөүҙең дә мәғәнәһен шулай аңлаталар. Һаҡал, мыйыҡ үстермәгән ир теге донъяла ҡатын сифатында булыр, тигән ти. Тик шуныһы: ир-ат ҡырҡ йәшкә тиклем мыйыҡ ҡына ебәрә ала, ҡырҡтан һуң - һаҡал үстерергә лә ихтыяр.

Ҡатын-ҡыҙ сөннәте - ҡолаҡ тишеү. Сөннәтһеҙ ҡатын-ҡыҙ ҡолағынан теге донъяла йылан үтә, ти.

### ДАЛ-ДАЛ ИТЕҮ

Дим буйы башҡорттарында баланы "дал-дал" иттереү йолаһы бар. Ашап бөткәс тә, баланы һул ҡулының усына уң ҡулының һуҡ бармағы менән төртә-төртә:

*- Дал-дал-дал,*
*Дал-дал-дал,*
*Дал-дал-дал!* - тип әйтергә, шунан әпәр итергә өйрәтәләр.

"Дал-дал итеү" сабый өсөн үҙенә күрә доғаны алмаштырған.

Дал-дал иткәндә, баланың һул ҡулының усы менән уң һуҡ бармағы ғәрәптең "д" хәрефен - "дал"ды хәтерләтә. Дим буйы ҡыпсаҡтарының бер төркөмөнөң тамғаһы - "дал-тамға". Шулай итеп "дал-дал" итеүсе бала, һөйләшә белмәһә лә, исемата әйтә алмаһа ла, затын әйтеп ултырыр булған. Борон күсмә тормош менән көн иткәндә, бала юғала ҡалһа, "дал-дал" итеүенән уның ҡайһы ырыу, араныҡы булыуын белә алғандар. "Дал-дал" итеү аҙаҡ баланы әүрәтеү, мауыҡтырыу сараһы булып киткән.

### БАЛА БӘҮЕЛТЕҮ

Баланы аяҡ осона баҫтырып бәүеткәндә шулай тиҙәр:

*Ҡарға, сәүкә,*
*Һайыҫҡан, сыйырсыҡ,*
*Турғай, торна,*
*Тәҙ(е)рәнән осоп сыҡ!*

### МУНСАЛА САБЫНДЫРЫУ

*Һап-һап-һап,*
*Мунса ташы,*
*Бүрәнә башы,*
*Ябалаҡтан йөн ал,*
*Буҙәнәнән май ал!*
*Ҡарсығанан ҡан ал!*
*Һап-һап-һап!*
*Мунса башы, бүрәнә башы,*
*Әбейҙе "әбей" тип әйт,*
*Бабайҙы "бабай" тип әйт!*
*Айыу балаһы,*
*Бүре балаһы,*
*Татлы таба бул,*
*Алабуға бул,*
*Һыуҙан таҙа бул,*
*Һөлөктәй бала бул!*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатима ҡулы*
*Һап-һап-һап!*

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

## ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Башҡорт халҡының, ырыуҙарының һәм уларҙың үсешенең тарихын төплө һәм фактик рәүештә өйрәнеүсе, уларҙы халыҡҡа еткереүсе, баҫмалар ижад итеүсе ғалимдарыбыҙ, тарихсыларыбыҙ күп түгел. Улар алтын бәрәбәренә булып, киләсәктә милләт хәтерен һынландырыр китаптары ла ҡәҙерләп һаҡлана. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе Йәдкәр Әхәт улы Бәшировтың "Урал һәм Волга буйы халыҡтары тарихына яңы ҡараш" тигән тикшеренеү хеҙмәте тарихтың ҡайһы бер биттәренә яңы ҡараш, яңы фекер тыуҙырҙы. Баҫманы өйрәнгәндән һуң, ҡайһы бер ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы уның үҙенә лә бирҙек.**

# ХАЛЫҠ УЛЫ БУЛЫУЫН...

## һүҙ менән түгел, эш менән дәлилләнә



**➔ Тарихи мәғлүмәттәр, боронғо яҙмалар башҡорт менталитетын нисек анализлай? Улар бөгөнгө ҡылыҡһырлауҙарға тура киләме?**

- Доктор Н.П. Никольский башҡорттарҙың тормошон күп йылдар өйрәнгәндән һуң, шундай һығымтаға килгән: "Башҡорт халҡының тормошо ауыр шарттарҙа булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең физик үсеше буйынса юғала барыусы булып иҫәпләнмәй. Был халыҡтың үсешеү өсөн ҙур көсө бар, аң үсеше буйынса ла улар Рәсәйҙә башҡа халыҡтарҙан бик юғары тора". Ҡайһы бер ғалимдар башҡорт кешеһенең характер асылына, уның үсеш тәбиғәтенә, фекерләү образы диалектикаһына, башҡалар менән мөнәсәбәткә инеү, азатлыҡҡа ынтылыу үҙенсәлегенә төшөнмәйенсә иҫрат хаталана. Ысын башҡорт үҙенең позицияһында ныҡ тора, уны үҙ инаныуынан дүндереүе, икенсегә ышандырыуы бик ауыр. Был - башҡорттоң тарихи үсеше һуҙымында тормош тәбиғәте менән барлыҡҡа килгән холоҡ-фиғеле. Башҡорт кешеһе башҡалар менән мөнәсәбәтендә лә тоторҡоло, һәр ваҡыт кешегә ярҙамға килергә әҙер тора, һәр ваҡыт азатлыҡҡа, яңғыҙ ҡалырға ынтыла.

Башҡорттар һәр ваҡыт этник яҡтан толерантлы булған, улар башҡаларҙы нисек бар, шулай ҡабул итеп, улар менән килешеп йәшәгән. Башҡорттарҙың быуаттар буйына формалашҡан ҡануындарын ситтән килеүсе ҡәбиләләр тейешле кимәлдә, ихтирам менән ҡабул иткән, уларҙы үтәгән. Бөгөн дә күҙәтелә ул ҡағиҙә. Мәҫәлән, Башҡортостандың Тәтешле районында йәшәүсе удмурттарҙың, сыуаштарҙың күбеһе башҡортса иркен һөйләшә, мәктәптә өйрәнә, ҡайһы берҙәре хатта башҡорт фамилияһын алған.

Башҡорт дәүләттәре менәр йылдар һуҙымында Днепрҙан алып Енисейға тиклем ҙур территорияны тәшкил иткән. Бахши Имандың "Йәғәфәр тарихы" ошо хаҡта. Башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәт үсешен анализлағанда уларҙың урыҫтар менән аралышыуында күп нәмәне юғалтыуын, шул уҡ ваҡытта күпте табыуын күҙалларға була. Шулай ҙа дала балалары булған башҡорттар был халыҡ менән аралашҡанда ла үҙҙәренә хас сифаттарын һаҡлап ҡала алған. Был сифаттарға уларҙың киң күңеллелеген, ҡунаҡсыллығын, алсаҡлығын, характер йомшаҡлығын килтерергә мөмкин булыр ине. Башҡорттар араһында оҙаҡ йәшәгән доктор Михайлов уларҙың яҡшы сифаттары хаҡында яҙа. "Башҡорт үҙ ҡатынына йомшаҡ мөғәмәлә итә, уға ҡул күтәрмәй, ыҙалатмай тиерлек, киреһенсә, яйы сыҡҡанда уға нимәләр, хатта ваҡ-төйәк әйбер бүләк итергә тырыша. Ҡатындарына ҡарата әхлаҡи яҡтан таҙа халыҡ. Шулай уҡ башҡорттар балаларын ныҡ ярата. Бигерәк тә малайҙарҙы аталары нык иркәләй, әммә улары нимәне эшләргә ярамағанлығын яҡшы белә. Башҡорттар яҡын туғандары үлеп, балалары етем ҡалһа, бер ваҡытта ла уларҙы сит ғаиләгә бирмәй. Башҡорттар араһында оло ғауғалар, үсмаҡлашыуҙар, йөҙ йыртыуҙар булмай. Әгәр ҙә була ҡалһа, уларҙың низағын мулла хәл итә, мулланың һүҙен ике яҡ та тайпылышһыҙ үтәй".

**➔ Боронғо башҡорттарҙа мәғдәнселектең булыу-булмауы хаҡындағы фекерҙәр араһында ла бәхәс тыуып ҡына тора...**

- Р. Кузеев үҙенең "Башҡорт халҡының тарихы" хеҙмәтендә башҡорттарҙы күсмә халыҡ тип атап, уларҙың мәғдәнселек шөғөлө, руд-

## ЯҢЫ РУБРИКА: "ҠЫҘЫҠ МӘЛДӘР"

# ЭХ, МУЙЫЛ...



**Мин һөйләргә йыйынған хәл муйыл емерелеп уңған йылда булды. Муйыл йыям, тип, алыҫ йөрөргә лә түгел, өйөбөҙҙөң кәртә артында ғына. Өҫтөнә йыйылып, ҡойолоп торған емеште лә йыймаһаң, гонаһ булыр. Шулай тип уйлап, беҙ муйыл йыйырға барырға булдыҡ. Хәләл ефетем, һәр ваҡыттағыса, эштә, мин, ялға килгән һеңлем, 1 йәшлек ҡыҙым менән өсәүләп муйыллыҡҡа менеп киттек.**

Кеше ҡыҙыҡ бит ул: уға күп булған һайын күберәк, ҙур булған һайын ҙурыраҡ кәрәк. Ҡайһы ағасты алып йыйһаң да муйылы эре, үҙе шул тиклем суҡ, тот та кинәнеп йый бит инде. Ә беҙ тағы ла суҡлыраҡ емешле ағас эҙләп, тауҙың яртыһына менеп еткәнбеҙ. Ниһайәт, үҙебеҙгә оҡшаған ағасты һайлап алғас, муйыл тирергә тотондоҡ. Буйыбыҙ еткән тиклем тиргәс, ағасты әүештереп тирәбеҙ. Муйыл ағасына балта сабып, ботаҡтарын һындырып, йығып һалып тиреү беҙҙең өсөн хилаф эш. Йыл менән йыл бөтмәй бит, киләсәктә муйыл ағастары мул уныш бирһен өсөн, уларҙы һаҡларға кәрәк икәнен бала саҡтан үҙләштергәнбеҙ. Әүештереп тиреп бөткәс, ағасты уратып ҡарап сыҡтыҡ. Иң эре, иң матур емештәре ағастың осонда ғына ҡалған. Эй, шуларҙы тиреп алғы килә бит инде. Мин һеңлемә: "Һылыу, мин ағас башына менеп әүештерәйем, шунан тирербеҙ", - тинем дә, ағасҡа үрмәләп менеп киттем. Ҡола ялан Матрай ауылында ҡылғандан, утынға әҙерләнгән ҡайындан, өй тирәһендә үҫкән тирәк, сағандан башҡа ағас күрмәгән мин, муйылдың ни тиклем бөгөлмәле, һығылмалы ағас булһа ла, нык көслө, әллә ниндәй ауыр йөктән дә бөгөлөп бармағанын ҡайҙан ғына беләйем инде! Ағастың уртаһына тиклем менеп етһәм дә, муйыл бөгөлөргә уйламай ҙа. Тырыша торғас, ағастың осона яҡынлаштым, ул яйлап ҡына әүешә башланы. Мин ҡыуанысымдан һөрән һалып ҡысҡырам. Ләкин ҡыуанысым иртәрәк булған икән. Муйыл ағасы яртылаш әүеште лә, туҡтап ҡалды. Мин ергә төшә алмай, 3-4 метр бейеклектә һауала аҫылынып тороп ҡалдым.

Аҫта һеңлем, аптыранып, нимә эшләргә белмәй, ул яҡҡа, был яҡҡа йүгергеләй. Мин аяҡтарым, бөтә кәүҙәм менән сәнгелдәк өйгәндәге һымаҡ бәүелдереп, ағасты нығыраҡ әүештермәк булып маташам. "Һылыу, мин саҡ ҡына ергә яҡынлаһам, аяғыма йәбеш тә, тотоп аҫҡа тарт", - тип тә ҡысҡырам. Һеңлем, һикерәнләп, мине тотоп алырға итә, ләкин буйы етмәй, мин күк менән ер араһында аҫылынып тороуымды да-

***✓ IX-X (XII) быуаттарҙа йәшәүсе ғәрәп ғалимдарына билдәле булғанса, көньяҡ Уралды башҡорттарҙың 400-ләгән ҡалалары һәм ҡәлғәләре ҡаплап алған. Башҡорттарҙа мәғдәнселектең үҫешкән булыуы тураһында мәғлүмәттәр бик күп.***



никтары һәм сеймал эшкәртеү заводтары булыуы, "Урал батыр" эпосында телгә алынған булат ҡоросто уйлап табыуы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе яҙмай ҡалдыра. Башҡорт этносы VII - VIII быуаттарҙағы көньяҡ Уралда Бахмут, Турбаслы мәҙәниәттәре һәм Ҡараяҡуп ҡәбиләләренең туранан-тура вариҫтары. IX-X (XII) быуаттарҙа йәшәүсе ғәрәп ғалимдарына билдәле булғанса, көньяҡ Уралды башҡорттарҙың 400-ләгән ҡалалары һәм ҡәлғәләре ҡаплап алған. Башҡорттарҙа мәғдәнселектең үҫешкән булыуы тураһында мәғлүмәттәр бик күп.

1867 йылда Санкт-Петербургта "Боронғо Башҡорт иленең үҙәге тураһында" тигән тарихи яҙма донъя күреп, унда башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙәге заводтар хаҡында яҙыла. Мәҫәлән, 1734 йылда ике завод һалына, 1741 йылда Демидовтар һатып алған Суҡсын заводтары һәм башҡорт мәғдәнселәренең башҡа заводтары эшләгән.

**➔ Тарихи яҙмаларҙы башҡорттарҙы "ҡырғыҙ" атамаһы менән дә бирәләр. Был нимәнән килә? Ҡырғыҙҙарға ниндәй бәйләнеше бар беҙҙең халыҡтың?**

- Тарихсылар, шул иҫәптән Бахши Иман башҡорттарҙы ҡырғыҙ тип атай. Сығатай ҡыпсаҡтарын да ҡырғыҙ тип атағандар. Болғарҙар ҡыпсаҡтарҙың барыһын да ҡырғыҙ тип йөрөткән. Беҙҙең көнгә тиклем килеп еткән шәжәрәгә ярашлы, ҡырғыҙ ырыуы башлығы Ҡороҡот ата булған... Уның улы Әхмәт бей, шунан - Мөхәммәт бей, шунан - Янба бей, шунан - ҡушыҡ бей. Ҡушыҡ бей Ағиҙел йылғаһы буйындағы Татыш күле янында Иҫке Ҡырғыҙ ауылында көн итеп, Аҡ батшаға баш эйгән...

Башҡортостан Республикаһында "ҡырғыҙ" атамаһы менән йөрөгән урындар бик күп. Мәҫәлән, ҡырғыҙ йылғаһы, Ҡырғыҙ ауылы, Ҡырғыҙ-Миәкә район үҙәге, шулай уҡ меңләләр, әйләләр, табын һәм кесе табын ырыуҙарында "ҡырғыҙ" атамаһы бар. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары Сөн йылғаһы буйында ғына элек ҡырғыҙ улысына - хәҙер Илеш районына ҡараған Иҫке Ҡырғыҙ, Яңы Ҡырғыҙ һ.б. ауылдарға нигеҙ һалған.

Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары төрки ҡәбиләләргә ҡараған. Уларҙың ата-бабалары - Енисей ҡырғыҙҙары Енисейҙан Һырдаръяға күсеп, уғыҙҙарҙың конфедерацияһына ингән. XII-XIII быуаттарҙа улар ҡыпсаҡтар менән бергә көньяҡ Уралға килеп, башҡорт халҡын формалаштырыуҙа ҡатнаша.

Күп кенә башҡорт ҡәбиләләрендә - нуғай бөрйәндәрендә, тамъяндарҙа, әйлеләрҙең төрөкмән ырыуында, шайтан-көҙөй ырыуында, кесе табындарҙа, ҡыуаҡандарҙың түбәләс ырыуында, меңлеләрҙең ҡонҡас, ҡыбау, ҡырҡ өйлөләр һ.б. "ҡырғыҙ" араһы бар.

**➔ Башҡорт ҡәбиләләренән иң аҙ өйрәнелгәндәре ҡайһылар? Беҙгә билдәле булмағандары бармы?**

- Сабан ҡәбиләһе хаҡында мәғлүмәт бик аҙ. Бахши Иман яҙыуынса, Иҙел һәләк булғандан һуң, уның улдары араһында һуғыш башлана. Һаҡмарҙан Ғазан тауҙарына тиклем 80 көнлөк юл. Бында сабандарҙың тыуған иле, шуға күрә был түбә Сабандар түбәһе тип атала. Уның үҙәге - Ҡыуаҡбаш.

Сабандар - малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбилә булараҡ, малдары көтөүгә сыҡҡан мәлдә тәбиғәттең уяныу хөрмәтенә ат сабыштары, сабандарҙың бил көрәшен, ир-аттарҙың аяҡ тышап ярышыуын ойошторған. Сабандарҙың туйҙары, хәҙерге заман кешеләре әйткәнсә, бер нисек тә һабан менән бәйле түгел. Шулай итеп, Һабантуй байрамына сабандар нигеҙ һалған.

**➔ Һеҙ бына шундай ҡыҙыҡлы, хатта ҡайһы бер урындарҙа ышанып та етеп булмағандай асыштар яһайһығыҙ. Был һеҙҙең ошо хеҙмәт эсендә йәшәүегеҙҙе күрһәтә. Ә инде тарих менән бөгөнгөнө бәйләп ҡарағанда, нисек уйлайһығыҙ: тарихты өйрәнеү бөгөнгө милли проблемаларға йоғонто яһай аламы?**

- Халҡымдың тарихи үткәне уның боронғо тамырҙарын ентекләберәк өйрәнеүгә килтерҙе. Тарих факттар менән үрелеп яҙылһа, оҙаҡ йәшәйәсәк. Һәр халыҡ үҙенең үткәнен ата-бабалары ҡалдырған мираҫҡа, документтарға таянып яҙа. Туған тел, мәҙәниәт, ғөрөф-ғәҙәттәр балаға әсә һөтө менән бирелә - был күренеш тарихлы халыҡтарҙа күҙәтелә. Беҙҙең илебеҙ күп милләтле булыуы менән үҙенсәлекле. Ошо халыҡтар гөлләмәһен һаҡлар өсөн уйланылған милли сәйәсәт һәм Рәсәйҙең милли идеяһы булырға тейеш. Тыуған илгә ҡарата һөйөү, патриотлыҡ тойғоларын тәрбиәләү өсөн, минеңсә, күп милләтле рәсәйҙәрҙең быуаттар дауамында әүәләнгән сәнғәтен, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен яңынан тергеҙеп, тәрбиәләп, программаларға индереп, эҙмә-эҙлекле эш башларға кәрәк.

**➔ Тағы ла китабығыҙға әйләнеп ҡайтып, шуны белге килә: эҙләнеүҙәрегеҙ оҙаҡ барҙымы, ниндәй ауырлыҡтар булды?**

- Башта әйтеүемсә, ауылым тураһында китап әҙерләгәндә бик күп материалдар ҡулланылмай ҡалғайны. Улар миңә башҡорт халҡының ни тиклем күп яҡлы мәҙәниәтле, тәрән тамырлы, ҙур ырыуҙарҙы берләштергән халыҡ икәнлеген асты. Республика тарихсыларының эштәре урта быуаттарҙан алда уҡ тарихта ханлыҡтарға ойошҡан башҡорт ырыуҙарының ролен сағылдыра. Сығанаҡтарҙа иҫкә алынған Сардын ханлығы айырым өйрәнеүҙе талап итә. Бахши Иман яҙып ҡалдырған мәғлүмәттәрҙән, Ҡол Ғәлиҙең "Хон китабы" яҙмаһынан Болғар дәүләтенә ингән башҡорттарҙың Аҡ Болғар Иле булыуы, Бөйөк Болғар илендә бөрйәндәрҙең роле асыҡланды. Төрлө дәүерҙәрҙә төҙөлгән карталарҙы өйрәнеп, Ҡол Ғәли яҙыуҙарын барлап, Бөйөк Башҡортостандың картаһын төҙөнөм. Был китап - ете-һигеҙ йыллыҡ хеҙмәтем емеше.

**Халҡыбыҙҙың "Йән тартмаһа ла, ҡан тарта" тигән фәлсәфәүи бер әйтеме бар. Йәдкәр Бәшировтың халҡы өсөн һалған хеҙмәте лә ошо әйтем хәҡиҡәтелер. Ул милләтенең ысын улы булыуын һүҙ менән түгел, эше менән дәлилләнә.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әңгәмәләште.**
**(Аҙағы. Башы 27-се һанда).**

(Аҙағы. Башы 27-се һанда).

уам итәм. Тамам арып, хәлдән тайҙыҡ. Етмәһә, ҡыҙым: "Әсәй тайтай, әсәй тайтай, әсәй тайтай", - тип илаулай башланы. Был уның: "Әсәй, төш, ҡайтайыҡ", - тиеүе. Арыны инде бәләкәс кенәм! Өйҙә ҡалдырыр кеше булмағас, эйәртеп алып йөрөй инек шул.

Бына бер саҡ ҡулдарҙың көсө бөтә башланы, бына-бына аҫҡа осоп төшөрлөк хәлдә икәнемде, бер ниндәй ҙә ҡотолоу юлы юҡ икәнен аңлайым, ләкин ышанғым килмәй. "Һылыу! Мин осоп төшөп имгәнһәм, иҫтән яҙһам, һеңлеңде эйәртеп, ауылға ҡайт та, күршеләргә инеп әйт. Улар миңә ярҙамға килер",- тип ҡысҡырам көс-хәл менән. Үҙем ҡысҡырып-ҡысҡырып илаған һеңлемде йәлләп, күҙҙәремде сытырҙатып йомам. Ни булһа ла булыр, тип яҙмышыма ихтыяр ҡуям. Эстән генә Хоҙайға ялбарам, осоп төшһәм дә, имгәнмәй имен ҡалһам ярар ине, тип теләйем...

Ҡапыл ғына кемдер аяҡтарымдан тартып, билемдән ҡыҫып ҡосаҡлап ала, мин ҡотом осоп, яр һалып ҡысҡырып ебәрәм. Күҙҙәрҙе асыу юҡ, тағы ла нығыраҡ йомам. Ҡурҡышымдан нимә уйларға ла белмәйем, был бейеклектә минең билемдән кеше ҡосаҡлай алмай бит инде. Тағы ла яманыраҡ уйҙар килә башыма:"Һылыу, бәпәйҙе ал да, йүгер ауылға, тиҙерәк, тиҙерәк! Исмаһам, һеҙ ҡотолоғоҙ! "- тип ҡысҡырам. Үҙем ағас ботағына тағы ла нығыраҡ йәбешеп, тулай башлайым. Нисек булһа ла ҡотолоу инде уйым. Әммә мине ҡармап ҡосаҡлаған нәмә ысҡындырырға уйламай ҙа, ниндәйҙер ат бышҡырған тауыш ишетелгәндәй булды. "Эһей! Ҡотҡарығыҙ! Мин бында! Кем булһаң да үтеп китмә, ҡотҡар!"- тип һөрән һалып, ярҙамға саҡыра башлайым. Бер аҙға тын алырға туҡтайым, һеңлемдең ҡысҡырып көлгәненә һиҫкәнеп, күҙҙәремде асам. Мине билемдән ҡосаҡлаған, бер ниндәй ҙә нәмә түгел, ә минең һөйөклөм икән! Уның аты бышҡыра-бышҡыра тапанып тора.

Ирем йәйләүҙән ҡайтып килә ятҡан, илаған, ҡысҡырған тауыштарҙы ишетеп, беҙҙең яҡҡа боролған. Ат өҫтөндә, һыбай булғанға, минең аяҡтарымдан тартып, билемдән ҡосаҡларға буйы еткән. Рәхмәт урынына: "Ҡотто осорҙоң бит! Өндәшһәң булмаймы?" - тип әрләйем. "Өндәшһәм, ҡыуанысыңдан ҡулдарыңды ысҡындырыр инең дә, осоп төшөр инең. Мин һине тотоп өлгөрә алмаҫ инем", - ти ирем. "Ә хәҙер ебәр инде ағасты, нимәгә йәбешеп алғанһың? Мин тотам бит һине..." "Юҡ инде! Муйылын тиреп бөтмәйенсә, ысҡындырыу юҡ! Саҡ осоп төшмәнем!" - тип ҡаршылашам. "Һин төш, мин ағасты ебәрмәй тотоп торам..."

Мине ергә төшөрөп, муйылды әүештереп биреп, ҡыҙыбыҙҙы алып ҡайтып китте ирем. Ә беҙ, үсләшеп, дәртләнеп, муйыл тиреп ҡалдыҡ...

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Автор ишараһынан аңлағанһығыҙҙыр, бәлә ысынлап та аяҡ аҫтында. Ләкин унан ҡотолор саралар һәр ваҡыт бар. Хәйер, был турала ғына түгел, тормошоғоҙҙа булған башҡа төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында ла яҙып ебәрегеҙ ошо яңы рубрикаға, тип мөрәжәғәт итәбеҙ һәм хаттар көтәбеҙ.**

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

...Ул саҡта үҙҙәренең ҡышлауҙарына ҡайтыусы башҡорттар, башланған сабынлыҡтарын теләр-теләмәҫ кенә ҡалдырып, һәр ҡайҙа ла беҙҙе оҙаҡ ҡына туҡталдырып тора ине. Был ерҙә башҡорттар нисек аҙ булһа, шул саҡлы Себер губернаһынан килеүселәр күп ине. Тауҙарҙа һәм йылға буйҙарында үҙенән-үҙе үҫеүсе ҡомалаҡтың бик күп булыуы Себер кешеләрен Уралға тартып тора, сөнки Себерҙең Уралға яҡын өлөшөндә лә, далалы Исәт провинцияһында ла был үҫемлек юҡ. Урал тирәһендә йәшәүсе кешеләр артелдәргә йыйылып, бер хәүефһеҙ ҡомалаҡ йыйып булһын өсөн башҡорттарҙан билдәле бер тау-урманлы ерҙе һатып ала. Башҡа промыслаларҙағы кеүек, улар үҙҙәре араһынан береһен становщик итеп һайлап ҡуя, ул һатып алынған ерҙең уртаһында ҡыуыш ҡора, кәрәкле аш-һыу хәстәрләй; башҡалары урман буйлап йөрөп, ҡомалаҡ йыя. Ҡомалаҡ йыйырға уңайлы булһын өсөн пайва һәм пестерҙар ҡулланыла: улар туҙҙан (пайва) йәиһә йүкәнән (пайва) үрелеп, бер-береһе менән шундай уҡ үрем менән тоташтырылған ике тырыҙдан ғибәрәт; уның, аҫып йөрөтөлә торған сумкаларҙағы кеүек, эйәрҙең артҡы ҡашағаһына эләктереп ҡуйыу өсөн уртаһында тишеге була. Был атта һыбай ултырыусыға өҙөп алынған ҡомалаҡты һалыр өсөн ипле урын булып, уның менән бер урындан икенсеһенә йөрөп була.

Муйыл, йыраҡ ерҙәрҙән булмаһа ла, уның емешен йыйыуҙы ниәт итеп килеүселәр булған үҫемлектәр иҫәбенә инә. Ҙур булмаған Урал йылғалары буйында ул шул тиклем күп үҫә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уны йөкләп йыйырға була. Был йәлләүгә генә лайыҡ, сөнки емештәре өсөн уны тыуҙырыусы әсә бөтөнләйгә һәләк ителә; емешен йыйыу өсөн ағасҡа менеү крәҫтиәндәргә мәшәҡәтле эш булып тойола: артыҡ уйлап тормайынса, муйылды тамырынан киҫеп алалар. Ошо меҫкен хәлендә ағас емешенең ауыҙҙы бөрөштөрә алыуы менән бәхетле: улай булмағанда, бигерәк тә башҡорттар уны йыйыуға әүәҫлек күрһәтһә, ул Урал менән күптән хушлашҡан булыр ине...

...Ҡупшылыҡ хаҡында һүҙ сыҡҡас, ошо уңай менән башҡорт көйәҙҙәре тураһында ла әйтеп үтәм. Йөнлө ауыҙ менән йөрөргә күнекмәгән йәш башҡорт егеттәре, һаҡалһыҙҙар йәмғиәтенән алыҫ булғанлыҡтан, һаҡал ҡырыу өсөн көлкөлө ысул ҡуллана. Улар һаҡалдарын ҡыҙҙырылған көл менән ыуа һәм, епте ныҡ итеп ҡатлап, уның менән йөндәрен икешәрләп урап алып, айырыуса етеҙ һәм оҫталарса йолҡоп сығара. Улар әйткәнсә, көл тирене йомшарта һәм йөн йолҡоноп сыҡҡанда була торған ауыртыуҙы баҫа; шулай итеп, кем еп менән ҡырыныу тигәнде ишеткәне бар икән, хәҙер уның ҡайҙан килеп сыҡҡанын беләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иван Иванович Лепехин (1740-1802) - Рәсәй Император фәндәр академияһы академигы һәм уның даими секретары, медицина докторы, Санкт-Петербург Ирекле иҡтисад йәмғиәте ағзаһы, Дәүләт медицина коллегияһының, Тәбиғәтте тикшереүселәрҙең Берлин һәм Гессен-Гамбург патриотик йәмғиәттәренең почетлы ағзаһы. 1768-1772 йылдарҙа И.И. Лепехин Ырымбур губернаһын өйрәнеү буйынса ойошторолған өс Академик экспедицияның береһенә етәкселек итә. 1770 йылда И.И. Лепехин Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап килеп, Урал һырты аша уҙа, Яйыҡ, Мейәс, Әй һәм Ҡариҙел йылғаларының башына барып етә, ул ваҡыттағы Ырымбур губернаһының үҙәк райондарында тикшеренеүҙәр алып бара. Уның экспедицияһы утыҙҙан артыҡ завод һәм рудниктарҙа була, байтаҡ ҡына башҡорт ауылдарында һәм йәйләүҙәрендә туҡтап, уларҙың көндәлек тормошона ҡараған мәғлүмәттәр йыя. Академик Лепехин яҙмалары башҡорт этнографияһы өсөн бөгөн дә ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе булып тора. Бынан 240 йыл элек билдәле урыҫ зыялыларының береһе булған ғалим И.И. Лепехиндың башҡорт тормошо күренештәрен, ижтимағи мөнәсәбәттәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен ентекләп яҙып алып, ғилми баҫмала сығарыуы үҙе үк оло баһаға һәм ихтирамға лайыҡ.**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Аҙағы).**

**✓ *Эпоста Уралға - ун, ағаһы Шүлгәнгә ун ике йәш тулғас, улар аталары Йәнбирҙенең ҡушыуы буйынса күҙгә күренмәҫ Үлемде табып юҡ итергә, тип юлға сығалар. Ни өсөн мотлаҡ ун һәм ун ике йәштә юлға сығалар?***

# "УРАЛ БАТЫР"

**Бынан ике йыл элек ғалим, этнограф Закирйән Әминев миңә үҙенең урыҫ телендә сыҡҡан "Урал батыр" эпосы һәм башҡорттарҙың мифологияһы" тигән китабын бүләк итте. Уға тиклем авторҙың "Боронғо башҡорттарҙың космогоник ҡараштары" тигән хеҙмәтен уҡырға насип булғайны. Икенсе китабын бүләк иткәндә ағай аҙаҡ китап тураһында фекер әйтеүемде үтенде. Һуңынан осраған һайын: "Уҡыныңмы, фекерең нисек?"- тип һораны. Әммә китапты ниндәй генә күҙлектән сығып уҡыһам да, унда яҙылғандарҙы бигүк аңлай алманым. Аңлауҙар һуңлап булһа ла килә икән. Былтыр Башҡортостан "Юлдаш" телевидениеһында Азамат Юлдашбаевтың Закирйән Әминев менән "Урал батыр" эпосы һәм башҡорттарҙа йондоҙҙарҙы танып белеү" тигән темаға ҡорған әңгәмәһен ҡарарға насип булды. Закирйән Әминев был тапшырыуҙа Урал батыр эпосы тураһында элегерәк миңә бүләк иткән китабында яҙған уй-фекерҙәрен ниндәйҙер ҡатмарлы фәнни терминдар менән түгел, ә үҙ туған телебеҙҙә ябай ғына итеп, хатта ҡул ишаралары менән теләһә кем дә аңларлыҡ итеп һөйләп, аңлатып бирҙе. Быға саҡлы ағай үҙенең китабы тураһында минән көткән фекерҙәрҙе, яуаптарҙы уның үҙенән ишетеп, эпосыбыҙҙың эске семантик мәғәнәләренә үтеп инеп, уларҙы аңлауҙан күңелем тулып тетрәнеүҙән аң байрамы кисерҙем. Шундуҡ Закирйән Әминевҡа, Азамат Юлдашбаевҡа шылтыратырға тотондом. Ошо интервьюны 2015 йылда үҙебеҙҙең телевидение күрһәткән иң яҡшы тапшырыу, тип атаным. Сенсацияға торошло был аңлауымды күберәк кешеләргә еткерергә теләүем китап авторы Закирйән Әминев менән ошо әңгәмәне ҡороуға алып килде лә инде.**

**Ҡөрьәнде тулыһынса тәфсирләр өсөн донъялағы барлыҡ ағастарҙы йығып, уларҙан ҡәләм эшләп, океандарҙағы, диңгеҙҙәрҙәге, йылғаларҙағы, шишмәләрҙәге, туңлыҡтарҙағы һыуҙарҙы ҡара итеп яҙһаң да, был изге китапҡа һалынған йөкмәткене асып бөтөп булмай, тиҙәр. Юҡҡа ғына килтерелмәй шунсама ағас һәм һыу нисбәте: әлбиттә, бында һүҙ был китапҡа һалынған сикһеҙ йөкмәткене, сикһеҙ мәғәнәне барлыҡҡа килтереүсе Хоҙай Тәғәләнең сикһеҙ ҡөҙрәте хаҡында бара. Шуға күрә Ҡөрьәнгә яҙылған һүҙҙәрҙе бермә-бер килеш ҡабул итеп фекер йөрөтөү айсбергтың миллиардтан бер өлөшөн генә күреүгә тиң булыр ине. Тап шуның кеүек, беҙҙең халыҡтың да Ҡөрьәне булырлыҡ "Урал батыр" эпосының дөйөм күҙгә күренмәгән өлөшө хаҡында фекер йөрөткөм килә. Эпос:**

**Борон-борон борондан**
**Кеше-маҙар булмаған,**
**Килеп аяҡ баҫмаған,**
**У тирәлә ҡоро ер**
**Барлығын һис кем белмәгән... -**

**тигән юлдар менән башлана.**

**Беҙ бала саҡтан башлап "Урал батыр"ҙы әкиәт итеп ҡабул итәбеҙ ҙә, үҫеп еткәс тә һаман да шул әкиәт иллюзияһында тороп ҡалабыҙ. Бик күп ғалимдар уның тексына һалынған йөкмәткене туранан-тура, бермә-бер, һүҙмә-һүҙ аңлап, әкиәт кеүек тәфсирләп һөйләп, ундағы сюжетҡа, геройҙар мөнәсәбәтенә ҡарап ниндәйҙер фекер әйтергә тырыша. Ә бына һин, Закирйән ағай, "Урал батыр" тексында күренмәгән йөкмәткене нисек уҡырға өлгәштең, методологик яҡтан ул асыштарҙы яһауға нисек килдең? Ғөмүмән, был фекерҙәргә килеүеңдең механизмы нисек булды?**

- "Урал батыр" эпосын тәүге тапҡыр 1972-1974 йылдарҙа армияла хеҙмәт иткәндә уҡығайным. Ул саҡта әсәйем миңә "Ағиҙел" журналы һандарын ебәреп, улар араһында эпос баҫылған 1968 йылғы һаны ла килеп эләккәйне. Тик ул заман мин эпосты боронғо бер әкиәт кеүек ҡабул иттем, эстәлеге, мәғәнәһе тураһында уйланманым, тиергә була. Эпостың тел байлығы хайран иткәне генә иҫемдә. 1977 йылда Мәскәүҙә "СССР халыҡтары эпостары" серияһында баҫылып сыҡҡан "Урал батыр" китабы ҡулыма килеп эләккәндә әҙерәк булһа ла уйлана алырлыҡ кимәлгә күтәрелгән булғанмындыр, тип уйлайым. Сөнки уғаса Билал Юлдашбаевтың "Башҡорт милләтенең формалашыу тарихы", Рәил Кузеевтың "Башҡорт халҡының килеп сығышы" һәм башҡорт тарихы буйынса башҡа күп кенә хеҙмәттәрҙе уҡып өлгөргәйнем инде. Ә шулай ҙа башҡорттоң сығышы тураһындағы һорауыма тулы яуаптар таба алмағас, был мәсьәләне үҙем сисеп ҡарарға булдым. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында совет ғалимы Кнорозов ҡасандыр Көньяҡ Америкала йәшәгән майяларҙан ҡалған быға тиклем берәүҙең тешә үтмәгән боронғо яҙмаларҙы егерме йылдан ашыу тырышып тикшереп, уҡыуға өлгәште. Ул үҙенең кабинетында "Ҡасандыр, кемдер уйлап сығарғанды, ул нисек кенә серле, ҡатмарлы булмаһын, тырышһа, икенсе кеше лә аңлай аласаҡ", - тигән яҙыу элеп ҡуйған булған. Ата-бабалар ни өсөндөр, ниндәй ихтыяждарҙандыр уйлап сығарған был эпосты, тимәк, мин дә берәй нисек аңлармын әле, тигәнерәк уйҙар менән тотондом "Урал батыр" эпосын өйрәнергә.

Эпоста Уралға - ун, ағаһы Шүлгәнгә ун ике йәш тулғас, улар аталары Йәнбирҙенең ҡушыуы буйынса күҙгә күренмәҫ Үлемде табып юҡ итергә, тип юлға сығалар. Ни өсөн мотлаҡ ун һәм ун ике йәштә юлға сығалар? Ниндәйҙер бер мәғәнә булырға тейеш бит был һандарҙа, тигән һорау тыуҙы. Эпосты уҡыған һайын һорауҙар ҙа күбәйгәндән-күбәйә генә барҙы.

Күпмелер юлдар үтеп, тауҙар артылып, һыуҙар кисеп алға бара торғас, Урал Һомайҙы осратып, танышып, һөйләшеп китәләр. Һомай унан ҡайҙан килеүе, ҡайҙа юл тотоуы хаҡында һорашҡас, Урал батыр уға донъяла "биш ил"дең барлығын белеүе, береһендә тыуыуы, икеһен үҙе барып күреүе, ҡалған икеһен күрергә китеп барыуы хаҡында әйтә. Ошо "биш ил" тигән юлдар тынғы бирмәй үҙҙәрен гел иҫкә төшөрөп торҙо. Кузеев һәм башҡаларҙың, башҡорттар Уралға Алтайҙан килгәндәр, тигәненән сығып, Уралдың тыуып үҫкән ерен, юл башын Алтай, ә туҡтаған ерен Урал, тип алып, ҡалған өс илде Алтай менән Урал араһында эҙләй башланым. Нисек кенә тырышһам да, таба алманым. Был "биш ил" тураһындағы юлдарҙы аңларға тырышып, башҡа төрки халыҡтарының эпостарын сағыштырып өйрәнергә тотондом. Төрки халыҡтарында эпостар күп булһа ла, "Урал батыр"ҙағы кеүек архаик дәүерҙәге ҡараштарҙы сағылдырған эпос уларҙа юҡ. Күпселек төрки халыҡтарының эпостары сағыштырмаса "йәш", беҙҙең көндәргә яҡын дәүерҙәрҙе сағылдырған эпостар. Уларҙа дәүләтселек (ҡағанаттар, ханлыҡтар) барлыҡҡа килеп, йәмғиәттең төрлө ҡатламдарға (ҡағандар, байҙар, ярлылар һ.б.) бүленеүен күрәбеҙ. Был эпостарҙа ҡағандар, хандар, батырҙар төп геройҙар булып, улар үҙ-ара һуғыштар алып баралар. Был эпостарҙы ижад итеүсе халыҡтарҙың донъяуи ҡараштары дәүләтселек заманын сағылдыра. Уларҙа, "Урал батыр" эпосындағы кеүек, Донъя, Ғаләм һәм ундағы бар нәмәләрҙең барлыҡҡа килеүе кеүек глобаль күренештәр юҡ. "Урал батыр" иһә, Библия, Ҡөрьән кеүек үк, донъяның барлыҡҡа килеүен аңлатырға теләү ихтыяжынан килеп тыуған эпос. Ғөмүмән, донъяла "Урал батыр" кеүек космогоник эстәлекле оло эпостар бик һирәк. Мин тәүҙәрәк быны аңлап етмәйенсә, Урал батырҙың сәйәхәтен башҡорттоң ҡайҙандыр Уралға килеүен тасуирлаған әҫәр, тип уйлап, яуаптарҙы ерҙән эҙләнем.



Төрки халыҡтарҙың эпостарын, риүәйәттәрен, легендаларын һәм башҡа фольклор әҫәрҙәрен өйрәнеүгә 6-7 йыл ваҡытым киткәндер. Төрки донъяһында "Урал батыр"ға оҡшаған бер нәмә лә тапманым. Кузеевтың, Көньяҡ Уралда башҡорттар килгәнгә тиклем фин-уғыр телле ҡәүемдәр йәшәгән, тигәненән сығып, фин-уғыр телле (мари, мордва, удмурт, коми, финн, эстон һ.б.) халыҡтарҙың фольклорын, этнографияһын өйрәнергә тотондом. Карел, финдарҙың данлыҡлы "Калевала"лаһын ныҡлап өйрәндем, әммә унда "Урал батыр"ҙы аңлатырлыҡ фактар таба алманым. Был эпос бөтөнләйе менән икенсе, башҡортҡа ят донъяны сағылдыра. Уралдан күсенгәндәр, тип иҫәпләнгән мадъярҙарҙа эпос бөтөнләй юҡ. Уларҙа халыҡтың боланға эйәреп барып, яңы ер табыуы хаҡында бер генә мифологик эстәлекле легенда һаҡланған. Уныһы ла венгрҙарҙың араһына инеп йотолған бәшәнәктәрҙән, башҡорттарҙан тороп ҡалған легенданың бер ярсығы ғына.

Ошондай эҙләнеүҙәр менән 9 йыл ғүмер үтеп китте. 1986 йыл ине. "Фән яңылыҡтары" тигән бер йыйынтыҡта күренекле ғалимә, археолог Елена Кузьминаның мәҡәләһен күреп ҡалдым. Мәҡәләһендә ул скиф ҡомартҡылары араһында табылған төрлө металл әйберҙәрҙәге (башҡорт фольклорында аждаһа-дейеү кеүек заттарҙан һаналған) грифондарҙың боланды йотоуын сағылдырған сюжеттарға анализ яһағайны. Грифон ул - башында кикереге булған ҙур йылан, аждаһалыр. Нәҡ миңә кәрәк мәҡәлә ине был. Сөнки быға тиклем археологтарҙың хеҙмәттәренән скифтар менән бәйле төрлө әйберҙәрҙә грифондарҙың болан кеүек малды йоторға маташыуын ҡарап, беҙҙең "Урал батыр" эпосындағы Зәрҡүмдең боланды йотоуын тасуирлаған мотивҡа оҡшашлыҡ күрә инем, әммә сюжеттарҙың нимәне аңлатҡанын белмәгәс, оҡшашлыҡ күреүҙән ары киткән юҡ ине.

Е.Е. Кузьмина грифондың боланды йотоу мотивының ҡасан, ҡайҙа барлыҡҡа килеүен анализлап, уны календарға бәйләп, ышандырырлыҡ дәлилдәр менән аңлатҡайны үҙенең баяғы мәҡәләһендә. Баҡтиһәң, грифондың, арыҫландың һәм башҡа йыртҡыс заттың болан кеүек үлән емшәр йәнде ботарлауын тасуирлаған миф бынан 5 мең йыл элек шумерҙарҙа формалашып, ул календарь менән бәйле булып сыҡты. Шумер астрономдары күк есемдәренең күсеп йөрөүен күҙәтеп, Ай ҡасан батыуын, Ҡояш ҡасан ҡалҡыуын, йондоҙҙарҙың, планеталарҙың хәрәкәтен, уларҙың бер-береһенә

***Төрки халыҡтарында эпостар күп булһа ла, "Урал батыр"ҙағы кеүек архаик дәүерҙәге ҡараштарҙы сағылдырған эпос уларҙа юҡ. Күпселек төрки халыҡтарының эпостары сағыштырмаса "йәш", беҙҙең көндәргә яҡын дәүерҙәрҙе сағылдырған эпостар. Уларҙа дәүләтселек (ҡағанаттар, ханлыҡтар) барлыҡҡа килеп, йәмғиәттең төрлө ҡатламдарға (ҡағандар, байҙар, ярлылар һ.б.) бүленеүен күрәбеҙ. Был эпостарҙа ҡағандар, хандар, батырҙар төп геройҙар булып, улар үҙ-ара һуғыштар алып баралар. Был эпостарҙы ижад итеүсе халыҡтарҙың донъяуи ҡараштары дәүләтселек заманын сағылдыра. Уларҙа, "Урал батыр" эпосындағы кеүек, Донъя, Ғаләм һәм ундағы бар нәмәләрҙең барлыҡҡа килеүе кеүек глобаль күренештәр юҡ. "Урал батыр" иһә, Библия, Ҡөрьән кеүек үк, донъяның барлыҡҡа килеүен аңлатырға теләү ихтыяжынан килеп тыуған эпос.***

***✓ Урал - ул Ҡояш, унан бөтә тереклек йәшәү нуры, йылы, ыңғай энергетика ала, ә Шүлгән - ул Ай стихияһында, төндә кеше күрмәгәндә хаслыҡтар ҡылына, барлыҡ яуызлыҡ уның артында йәшерелгән.***

ҡарата мөнәсәбәттәрен өйрәнеп, үҙҙәренең хужалыҡтарын алып барыу өсөн календарь төҙөүгә өлгәшкән булған. Шул дәүерҙә шумерҙар йәшәгән ерҙәрҙә февралдең егермеләрендә төнгө күктә Арыҫлан йондоҙлоғо ҡалҡҡан саҡта Болан йондоҙлоғо юҡ була. Ошо күренеште шумерҙар арыҫлан боланды ботарлап ырғытҡан, тигән миф аша сағылдырған. Шумерҙарҙан календарь менән бәйле был мотивты аҙағыраҡ хәҙерге Иран ерҙәрендә йәшәгән халыҡтар үҙләштерә, унан инде беҙҙең дәүерҙәргә тиклем етенсе быуаттарҙа Алғы Азияға яу менән килгән скифтар был мотивты үҙҙәре менән тыуған илдәренә алып ҡайта һәм ул Евразия ҡитғаһында киң таралып китә. Ваҡыт үтеү менән был эпизод әкренләп кенә февралдән мартҡа күсә. Хәҙер уны көнсығыш халыҡтары Науруҙ байрамы тип 22 мартта билдәләй. Шулай итеп, көтмәгәндә Урал батыр эпосының бер эпизодының мәғәнәһе табылды. Факттарҙы әкренләп, бөртөкләп сүпләй торғас, эпостағы икенсе эпизодтарҙың мәғәнәләре лә асыла, аңлашыла башланы.

**▸ Бынан сығып шунай һығымта яһарға мөмкиндер: "Урал батыр"ҙың асҡыстарын ерҙән түгел, ә күктән эҙләргә кәрәк. Шулаймы?**

- Эйе. Мин ул ваҡытта Күгәрсен районында прокурор булып эшләп йөрөй инем. Эш менән Өфөгә килгән һайын, китапханаларға барып, Елена Кузьминаның барлыҡ китаптарын уҡып сыҡтым, уның кемдәрҙең хеҙмәттәренә таянып яҙғанын тикшереп, ҙур бер исемлек төҙөп, ул авторҙарҙың хеҙмәттәрен эҙләй башланым да, боронғо скиф, сак, сармат һәм башҡа иранлылар донъяһына инеп киттем. Ғөмүмән, иң боронғо башҡорт материалдарының Иран донъяһына барып бәйләнгәнен аңлай башланым. Минең өсөн был ҙур асыш булды, сөнки беҙ, башҡорттар, төрки телле халыҡтар төркөмөнә ҡарайбыҙ. Йәғни, беҙ тел йәһәтенән - төрки, ә донъяуи ҡараштар, мифология менән - Иран донъяһына яҡынбыҙ булып сыҡты. Аптырарлыҡ хәл. Иранлылар донъяһын өйрәнә торғас, башҡорт донъяһы менән әллә күпме уртаҡлыҡтар таптым. Ҡыш ваҡытының ерҙәге...

уҙы аңлата. Башҡорт фольклорында был хәл шулай аңлатыла:

*Бейек тауҙың үлгәне -*
*Башын монар алғаны.*
*Ҡара ерҙең үлгәне -*
*Өҫтөнә ҡар ятҡаны...*

Ошонан сығып, Ҡатил илен төньяҡ менән бәйләргә мөмкин булды. Календарҙа ул 22 декабргә, йәки беҙҙә Нардуған байрамына, йыл башланған саҡҡа тура килә. Шулай итеп, яҙ менән ҡышты таптым, артабан йәйҙе һәм көҙҙө табырға ҡалды. Ҡатил иле ҡара төҫтә тасуирлана. Эпоста Ҡатил батшаның "ҡара ҡоҙғон ҡошо" хаҡында әйтелә. Логика буйынса ҡараға ҡаршы аҡ төҫ булырға тейеш. Эҙләнә торғас, таптым: ул аҡ йылан иле, бында Урал батыр Ҡәһҡәһәнең тылсымлы таяғын ҡулына төшөрә. Уралдың был илгә эләгеүе календарь буйынса 22 июнгә тура килә. Ҡулынан таяғы киткәс, Ҡәһҡәһә: "Таяғым киткәс ҡулымдан, көсөм китте, хәҙер көс һиндә..." - ти. Шул уҡ эпизодта Ҡәһҡәһә илендә алты башлы дүрт йыландың асҡыс һөйрәп килеүе хаҡында әйтелә. Йыландың алты башлы булыуы 6-сы

Алтайҙан Уралға күсенеүенә уның ҡыҫылышы юҡ булып сыҡты.

**▸ Ошоларҙан сығып, ваҡиғалар башланған урындың Алтайҙа булмауын, Уралтауҙа икәнлеген нисек итеп билдәләргә мөмкин һуң?**

- Һәр боронғо халыҡтың инаныуы буйынса, уның тыуған ере - донъяның кендеге. Фәндә был күренеш "этноэгоизм" йәки "этноцентризм" тип атала. Эпостың иң башында уҡ "Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан булған, ти бер урын..." тигән юлдар бар. Үҙ тыуған ере һәр кемгә ғәзиз. Эпоста "башҡорт" тигән һүҙ булмаһа ла, Урал үҙ артынан эйәрткән халыҡта беҙ башҡортто күрәбеҙ. Сөнки беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙҙың уйлауынса, бөтә донъяны ҡаплаған һыу ҡайтып, Донъя яралғас та, ошо ерҙә иң тәүҙә улар барлыҡҡа килгән, һәм был урын улар өсөн ерҙең кендеге булған. Уралдың Һомайға "Береһендә мин үҙем тыуҙым..." тигәнендә беҙ уның исеме менән аталған Уралтауҙы һәм уның төп халҡы башҡорттарҙы күрәбеҙ.

Әҙәм балаһы һәр ваҡыт тотороҡло, тыныс тормошҡа ынтыла. Ә ерҙә ундай тотороҡлоҡ юҡ, һәр ваҡыт нимәлер килеп сығып тора. Күктә иһә мәңге тотороҡлоҡ: Ай үҙ мәлендә ҡалҡа, Ҡояш үҙ мәлендә сыға, йондоҙҙар ҙа һәр ваҡыт үҙ мәлендә төнгө күктә пәйҙә булып, көндөҙ күренмәй тора. Әҙәм балаһының ғүмере ҡыҫҡа: шуға ла ул күктә лә әкренләп кенә барған үҙгәрештәрҙе бигүк шәйләп бармай. Күк есемдәренең меңәр йыллыҡтар дауамында күреп күнеккән урындарынан шылыуын тоймай тиергә була. Тик махсус, даими күҙәтеп барыусылар ғына быуындан-быуынға үҙ белемдәрен тапшыра килгәндәр һәм шул арҡала ғына кешеләр календарь төҙөүгә өлгәшкәндәр. Ябай кешеләргә үҙгәрештәр күренмәгән һәм уларға күк есемдәре үҙгәрмәгән кеүек тойолған. Шуға күрә лә шундай даими тотороҡлоҡтоң ерҙә лә күҙәтелеүен теләгән.

**▸ Тимәк, ул ғаләмдең йәшәү механизмын, ундағы есемдәрҙең хәрәкәтендәге тотороҡлоғон ергә, кешелек тормошона ла күсерергә итә булып сыға инде.**

# ЭПОСЫН АҢЛАП УҠЫ!

Юл ыңғайында шуныһын да әйтеп китергә кәрәктер: боронғолар бөтә был мәғлүмәттәрен шиғри юлдарға һалған булған, сөнки был ысул мәғлүмәтте халыҡ хәтерендә теүәл һаҡлау өсөн бик яйлы. Проза текстың үҙгәреүенә килтереүе ихтимал, ә шиғри юлдар, рифмалар структураһын ныҡ һаҡлап, теүәллекте тәьмин итә. Сөнки шиғыр ятлап алыуға еңелерәк булған өсөн хәтергә ныҡыраҡ уйыла.

**▸ Икенсенән, шиғырҙың образ, кинәйә мөмкинлеге хаҡында ла әйтеп китергә кәрәктер бында. Ғөмүмән, шиғриәттең барлыҡҡа килеүенең бер мөһим маҡсаты ла мәғлүмәтте хәтерҙә ҡалдырыуға бәйле икәнлеге бер кемгә лә сер түгел. Әле яҙыу булмаған саҡта әҙәм балаһы шиғырҙы уйлап сығарған һәм ул кеше аңы һәм күңеле үҫешенең баһалап бөткөһөҙ эволюцион ҡаҙанышы тип аталырға хаҡлылыр...**

- Тап шулай. Арыҫлан йондоҙлоғо ҡалҡҡанда Болан йондоҙлоғоноң юҡҡа сығыуы шумерҙар ижад иткән шиғырҙа "Арыҫландың боланды йотоуы" тип бәйән ителгән. Быуаттар, меңйыллыҡтар һуҙымында күп кенә күк есемдәре торған урындарынан әкрен генә шыла һәм шуның һөҙөмтәһендә февралдең егермеләрендә булған баяғы "боланды йотоу" тигән ваҡиға марттың 22-нә барып сыҡҡан да инде. Тағы ла нисәмелер йыл үткәс, ул апрелгә күсәсәк. Әгәр кешелек ул заманда йәшәһә, был үҙгәреште лә күрер. Быны аңлауҙан түбәм күккә тейҙе. Бына һиңә кәрәк булһа! Тимәк, "Урал батыр" эпосында Зәрҡүмдең боланды йотоуы ла шул уҡ календарь ваҡиға булып сыға бит.

Миңә дуҫым, хәҙер күптән мәрхүм шағир Вил Ғүмәров "Фарсы-урыҫ, урыҫ-фарсы һүҙлеге" бүләк иткәйне, унан мин фарсы теле менән үҙебеҙҙең тел араһында бик күп лексик уртаҡлыҡтар таптым. "Урал батыр" эпосында Зәрҡүм тигән персонаж бар. Баҡтиһәң, "Зәрҡүм" һүҙе күп кенә иранлыларҙың телендә "арыҫлан"ды аңлата икән. Беҙҙең эпоста Зәрҡүм - йылан улы, тиелгән. Быуаттар һуҙымында арыҫлан образын яйлап аждаһа-йылан алмаштырған, әммә арыҫлан мәғәнәһе эпоста йыландың исеме (Зәрҡүм) рәүешендә барыбер һаҡланып ҡалған. Төрки телдәрендә был һүҙ юҡ, һәм ул беҙгә хәҙер аңлашылмай, ата-бабаларыбыҙ аңлаған мәғәнәһе онотолоп, беҙгә тик ябай бер исем булараҡ ҡына күренә. Был үҙе уҡ эпостың тамырының ниндәй боронғо дәүерҙәргә китеүен күрһәтә.

**▸ Тимәк, Урал батыр барған биш илдең береһе Зәрҡүм йәшәгән ил булып сығамы?**

- Эйе, береһе үҙәк, йәғни Урал тауҙары, ә ҡалған өсөһө ҡайҙа булырға тейеш? 22 март - ул яҙ мәле, йәки тәүлек масштабында алһаҡ, көнсығышта иртәнге ҡояш ҡалҡҡан мәл. Тимәк, араүыҡҡа һалһаҡ, ул көнсығыш менән бәйле була. Әгәр беҙҙең фараз дөрөҫ тип уйлаһаҡ, ҡайһы ваҡиғаны көнбайыш тарафына, ә ҡайһыларын донъяның көньяғына һәм төньяғына бәйләргә? Эҙләнә торғас, Уралдың Ҡатил батша иленә барып сығыуының ҡыш ваҡыты менән бәйле икәнен асыҡланым. Ҡыш мәлендә барлыҡ тереклек йоҡо хәлендә була, йәғни үлә, шуның менән был ваҡыт теге донъя менән бәйле. Үлеү һәм ҡар ҡаплау онотолоайҙы - июнде аңлата. Ә "көсөн бирҙе" тигәне - ул ваҡытта иң оҙон төндә ҡояш байып та өлгөрмәҫтән кире ҡалҡа, йәғни был көндәрҙә Ҡош юлы төнгө күктә һүрән генә булып күренә. Сөнки ул саҡта алыҫҡа ныҡлап китергә өлгөрмәгән ҡояштың нурҙары уға сағыу булып балҡырға мөмкинлек бирмәй. Ошо күренеште күк йөҙөн күҙәтеүселәр "таяҡтың ҡулдан китеүе" тип атаған. Был тылсымлы таяҡты теге донъяны был донъя һәм күк менән тоташтырыусы бер бағана (Донъя ҡолғаһы) тип аңлаған боронғолар. Таяҡ Урал батырҙың ҡулына күскәс, Ҡәһҡәһәнең көсө бөтә. Был илгә яҡынлағанда Урал менеп йөрөгән арыҫланын маңлайынан үбеп, уның менән хушлаша, Арыҫлан был саҡта юғалып тора.

**▸ 22 сентябрь көн менән төндөң тиңләшкән көнө...**

- Ваҡыттың был мәлендә Урал батыр Аҡбуҙатлы була. Эпосыбыҙҙы тыңлаған һәм һөйләгән боронғо кешеләр Аҡбуҙат тигәндә һүҙҙең Сириус йондоҙлоғо тураһында барғанын аңлаған һәм ваҡиғаларҙы ваҡыттың көҙ мәле менән бәйләгән. Август аҙағынан алып сентябрь урталарына тиклем төнгө күктә Сириус йондоҙлоғо балҡып тора. Тап шул мәлдә ямғырҙар башлана һәм донъяны һыу баҫа. Был ваҡыттың һыу менән бәйле булыуына бөтә донъяны һыу баҫып, Аҡбуҙаттың даръяға сумып, Зәрҡүмдән Һомайҙы ҡотҡарып алып ҡалыуы ишаралай.

Шулай итеп, эҙләнә торғас, эпостағы "биш ил" төшөнсәһенең мәғәнәһен аңлауға ирештем. Баҡтиһәң, боронғо ата-бабаларыбыҙ "биш ил" тигәндә күк есемдәренең хәрәкәтен күҙ уңында тотҡан һәм башҡорттоң Урал батыр "бер урын"дан, йәғни ер кендегеге һаналған уртанан (тыуған еренән) сығып китеп, ҡояштың маршруты буйынса сәйәхәт ҡылып, донъяның дүрт тарафы буйынса йөрөп сыға. Кешеләр бик боронғо замандарҙа уҡ Ҡояштың бер йыл эсендә дүрт нөктә аша үтеүен билдәләй алғандар. Был нөктәләр - 22 март, 22 июнь, 22 сентябрь һәм 22 декабрь көндәренә тап килә. Ҡайһы бер халыҡтарҙа был дүрт нөктәне "дүрт тәҙрә" тиҙәр. Бәғзе халыҡтар "дүрт өй" тип әйтә, йәғни ҡояш үҙенең бер йыллыҡ сәйәхәтендә дүрт өйгә инеп, туҡталып китә. Беҙҙең башҡортта "дүрт ил" төшөнсәһе йәшәй. Урал батыр дүрт илгә һуғылып китһә, Шүлгән ҡайһы юлдан йөрөй һуң?

Тикшерenә торғас, Шүлгәндең сәйәхәтенең Айҙың маршруты менән бәйле булыуын асыҡланым. Мәҫәлән, эпоста Һомайҙың һеңлеһе Айһылыуҙы Шүлгәнгә ике тапҡыр кейәүгә бирәләр. Тәүгеһендә Шүлгән Зәрҡүм менән осрашҡандан һуң бирәләр. Был ваҡиға эңер менән бәйле. Нәҡ эңерҙә беҙ хәҙер Зөһрә йондоҙо (йәки Венера планетаһы), тип белгән күк есеме Ай янында сағыу балҡып тора. Башҡортта әле лә "Ай янында Зөһрә йондоҙ ..." тип йырлайҙар. Был йондоҙҙо халҡыбыҙ шулай уҡ Сулпан йондоҙо тип тә атай. Тәүҙә был йондоҙ Ай янында эңерҙә күренһә, аҙаҡтан таңға ҡарай тағын да Ай янында ҡалҡып сыға. Был юлы уны Таң Сулпаны тиҙәр. Ошо йондоҙҙо (дөрөҫөндә - планетаны) боронғо башҡорттар эпоста Айһылыу тип атағандар һәм уның эңерҙә һәм таң алдынан Ай янында күренеүен Айһылыуҙы ике тапҡыр Шүлгәнгә кейәүгә биреү, тип тасуирлағандар.

**Тимәк, ошо күсерелеш "Урал батыр" эпосы рәүешен алған да инде. Тағы ла төпкәрәк төшһәк, шулай тип тә әйтергә булалыр: халҡыбыҙ ошо эпосты ижад иткән саҡта мәңгелек тотороҡлоҡто үҙенең тормошона күсереп, бының менән үҙенең мәңгелеген тәьмин иткән. Шулай фекер йөрөтөргә буламы?**

- Эйе, йәғни халҡыбыҙ ерҙәге тормошонда ла күктәге тотороҡлоҡто күргеһе килгән. Ул үҙенең тормошонда ла шундай уҡ тотороҡлоҡ булһын тип, ошоно халыҡтың асылына, фәлсәфәһенә, йәшәйешенә, йолаһына һеңдерер өсөн эпосты ижад иткәндер, тип уйларға булалыр. Урал - ул Ҡояш, унан бөтә тереклек йәшәү нуры, йылы, ыңғай энергетика ала, ә Шүлгән - ул Ай стихияһында, төндә кеше күрмәгәндә хаслыҡтар ҡылына, барлыҡ яуызлыҡ уның артында йәшерелгән.

**▸ "Дүрт яғың ҡибла" тигән әйтемде дүрт илгә, дүрт тарафҡа бәйләп аңлатып буламы?**

- Дүрт тараф башҡорттоң социаль донъяһында һәр ваҡыт ҡабатланып килгән. Мәҫәлән, тарихтан башҡорт иленең дүрт юлға (даруғаға) бүленеүен беләбеҙ. Был бүленеште ҡайһы бер ғалимдар Алтын Урҙа осоро менән бәйләргә тырыша, йәнәһе, Сыңғыҙхан башҡорттарҙы дүрт юлға бүлгән. Бында монгол-татарҙарҙың һис ҡыҫылышы юҡ, был башҡорттоң борон-борондан килгән бүленеше. Йондоҙло күктә үҙҙәре көн дә күргән тотороҡло моделде башҡорттоң ата-бабалары ерҙә лә күрергә теләгән, һәм шуға күрә шул моделдә үҙҙәренең йәмғиәтендә ҡабатларға ынтылған.

**(Дауамы 10-11-се биттәрҙә).**

*✓ Шуға һин Барагтың һүҙҙәренә артыҡ иғтибар итмә, беҙҙең халыҡтың шундай әҫәрҙәре булғанына, уны хатта ҡабул итергә теләмәгән көндә лә, йәндәре көйөп уға иғтибар иткәндәренә ҡыуанырға кәрәк.*



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫН АҢЛАП УҠЫ!

Ҡояш күктә дүрт нөктә аша үтә, тигәйнем бит бая өҫтәрәк. Ана шул дүрт нөктә донъяның дүрт тарафы менән бәйләп ҡарала. Дүрт ҡырлы донъя менән башҡорттоң йәмғиәт ҡоролошо ла яраҡлаштырыла. Беҙҙең ерҙәрҙә табылған боронғо ҡурғандар донъяның дүрт тарафы менән бәйләп ҡоролған. Башҡорт ырыуҙары ла дүрт өлөшкә бүленгән. Башҡорт шәжәрәләрен алып ҡарайыҡ. Уларҙың күбеһендә шул уҡ дүрткә бүленеүҙе күрербеҙ. Мәҫәлән, юрматы шәжәрәһен алайыҡ. Унда юрматыларҙың ере Тәтегәс, Аҙнай, Илсек-Тимер, Ҡармыш араларына бүленә, тиелгән. Күҫәк бей эпосында ла башҡорт йәмғиәтенең (түңгәүер, тамьян, ҡыпсаҡ, бөрйән) дүрткә бүленеүен күрәбеҙ.

Дүрт ҡырлы донъя, йылдың дүрт миҙгеле, дүрт ул - башҡортта теүәллек билдәһе. "Урал батыр" эпосынан Уралдың өс - Яйыҡ, Нөгөш, Иҙел исемле улдары һәм Шүлгәндең Һаҡмар исемле улы барлығын беләбеҙ. Уландарҙың дөйөм һаны дүртәү килеп сыға. Әгәр донъяны горизонталь яҫылыҡта ҡараһаҡ, ошо дүрт улан донъяның дүрт тарафының хужалары (эйәләре) тип тә әйтә алабыҙ. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар донъяны вертикаль (аҫтан өҫкә) өс өлөшкә - теге (ер аҫты) донъя, уртансы (был, яҡты) донъя, юғарғы (күк) донъяға бүлгәндәр. Горизонталь буйынса дүртәүгә вертикаль буйынса өсәүҙе ҡушһаң, 7 һаны килеп сыға. Был 7 һаны һинд-иран халыҡтарында теүәллек билдәһе булған. Башҡортта ла 7 һаны менән бәйле ышаныуҙар күп һаҡланған. Мәҫәлән, беҙҙең йәмғиәт ҡоролошонда ла 7 ырыу тигән тотороҡло төшөнсә йәшәп килә. Әммә ентекләп тикшерә башлаһаң, башҡорттар 7 ырыуҙың эстәлеген төрлө яҡта төрлөсә иҫәпләй, йәғни һәр ырыу унда үҙен индереп, ҡайһыһындыр төшөрөп ҡалдыра. Шуға күрә, 7 һаны ул тотороҡлоҡто аңлатыусы мифологиянан ингән төшөнсә. Был 7 ырыу принцибы бик боронғо дәүерҙәрҙә скифтарҙа ла булғанлығы билдәле.

**▶ Эпоста Урал тауҙарында ысынында барған ваҡиғалар теҙеп яҙылмаған, күк йөҙөндәге, ғәләмдәге есемдәрҙең хәрәкәтенән сығып, уларҙың образдарын символик мәғәнәгә әйләндереп ижад ителгән. Шулаймы?**

- Эйе, ул символик әҫәр. Ә беҙҙә уны әҫәрҙәге геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте юҫығында фольклор әҫәре итеп кенә күрәләр. Һәр персонаждың ғаләмдәге күк есемдәренә бәйле ниндәйҙер мәғәнә аңлатыуы бөтөнләй онотолған. Һәр нәмә ихтыяждан тыуа, заман үтеү менән ул ихтыяж онотола. Әммә ошоларҙы сағылдырған эпос ижад емеше булараҡ оҙайлы быуаттар буйына һаҡлана, сөнки традиция, йола, тигән төшөнсәләр бар. Шул уҡ һабантуй үткәреү йолаһы ла башҡорттарҙың мифологик ҡараштарын сағылдырған байрам булып һанала. Был осраҡта "Урал батыр" эпосы сценарий булһа, һабантуй - уның спектакле. Һабантуй ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарында йыйын тип тә аталған. Уға оҡшаш байрамдың боронғо сак, скифтарҙа, гунндарҙа ла булғанлығы билдәле. Хәҙерге һабантуйҙар күңел асыу сараһы ғына булып һанала, уны үткәреүҙе талап иткән боронғо ихтыяждар күптән онотолған инде. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосында Урал Ҡатилдың үгеҙе менән көрәшә, һабантуйҙа ул ике батырҙың көрәшенә әйләнгән. Әммә элегерәк үгеҙ тиреһе кейеп көрәшеү тураһында ла (мәҫәлән, яҡуттарҙа) мәғлүмәттәр бар. Әгәр ҙә яңылыш ҡара үгеҙ тиреһе кейгән көрәшсе еңеп ҡуйһа, уны шундуҡ үлтергәндәр. Сөнки ҡара көс еңергә тейеш түгел. Халыҡ киләсәккә өмөт менән ҡараған һәм донъяһына тик аҡлыҡ, паҡлыҡ, яҡшылыҡ юраған.

**▶ "Урал батыр" эпосын боронғолар үҙҙәре өсөн бик тә мөһим астрономик белем, календарь булараҡ, юғалтмау өсөн шиғри юлдарға һалған булғандарҙыр. Сөнки шиғри формала яҙылған эпос телдән-телгә, быуындан быуынға күскәндә тотороҡло һаҡлана ала.**

- Эйе, бая әйткәнемсә, боронғолар һаҡланырға тейешле бөтә мәғлүмәттәрен шиғри юлдарға һалыр булған, сөнки был ысул мәғлүмәтте халыҡ хәтерендә теүәл һаҡлау өсөн бик яйлы. Өҫтәүенә, был эпос изге, серле эстәлекле белем булараҡ, уны сәсәндәрҙең бик тар даирәһе генә белгән. Уны теләһә ҡайҙа, теләһә кемгә һөйләмәгәндәр. Дөйөм халыҡ уның барлығын да белмәгән, тик айырым өлөштәре генә йыйындарҙа, һабантуйҙарҙа ишетелеп ҡалған. Әйтәйек, Ислам дине ҡанундары буйынса төрлө сараларҙа бөтөн Ҡөрьәнде түгел, ә айырым сүрәләрен, айырым аяттарын ятлаған һымаҡ инде. Унан һуң, боронғолар бит боҙом ебәреүгә ныҡ ышанғандар. Әгәр ҙә башҡорт донъяһының нисек барлыҡҡа килеүе ниндәй өлөштәрҙән тороуын белеп ҡалһалар, дошмандарҙың хаслыҡ уйлап боҙом ебәреү һәләтен иҫәпкә алып, ошо ихтималлыҡтан сығып, серҙе һәр тап булғанға асылып һөйләп бармағандар. Был серле белемде аңлаусылар бик һынсыл булғандар. Улар үҫеп килгән йәштәрҙе һынсыл күҙәтеп, сәсәнлеккә һәләте булғандарын һәм улар араһынан сер тоторҙайҙарын һайлап, һынау үткәреп, ышанырға мөмкинме - юҡмы икәнлеген тикшергәндәр. Тик шунан ғына Урал батыр кеүек космогоник эстәлекле эпос яңы быуын сәсәненә тапшырылған. Беҙҙең бәхетебеҙгә, Ғәбит менән Хәмит сәсәндәргә Мөхәмәтша Буранғолов тап булып, тик шул арҡала ғына мәшһүр эпосыбыҙ һаҡланып ҡалып, беҙҙең көнгә килеп етә. Ышанып тапшырырлыҡ кеше килеп сыҡмауы арҡаһында беҙҙең тағы ла әллә күпме эпостарыбыҙ, легенда-риүәйәттәребеҙ, йырҙарыбыҙ, ҡобайырҙарыбыҙ юғалғандыр. Мөхәмәтша иһә үҙенең һыйырын һатып, Ғәбит, Хәмит сәсәндәр менән бергә йәшәп, уларҙың ышанысын яулап, эпосты ятлап алған. Сөнки ундай ҡомартҡыларҙы бер ваҡытта ла яҙмайҙар. Ул үҙе Ғәбит менән Хәмит сәсәндәр кимәленә күтәрелгәс кенә эпосты ҡағыҙға күсерә.

Ундай космогоник эстәлекле эпосты тик ирҙәргә генә ышанып тапшырғандар. Сөнки ҡатынҡыҙ кейәүгә сығып, икенсе ырыуға киткән, әгәр уға ырыу сере билдәле булһа, ул бит уны үҙе менән икенсе ырыуға алып китә алған. Донъяла төрлө хәл килеп тыуа. Бөгөн татыу ғына күрше йәшәгән ырыуҙың дошманға әйләнеүе лә ихтимал. Ул ырыуға кейәүгә сыҡҡан ҡатындың серҙе сисеүен дә көҙ уңында тотҡандар боронғолар. Шуға ла уларҙы ундай изге эстәлекле эпостар менән таныштырмағандар. Тап ошо сәбәптән дә, Хәйбулла районындағы Әсмә апай Усмановаға "Урал батыр" эпосының бер вариантын өләсәһе һөйләп ҡалдырған, тигәнен уйҙырма итеп ҡабул итәм. Мин бит Хәйбулла районында йәшәп, эшләп киткән кешемен. Районды, уның кешеләрен яҡшы ғына беләм. Бик тә асыҡ, ихлас һәм ижади һәләтле халыҡ йәшәй унда. Аҡъярҙа тарихсы Рәшит Ғимат улы Насиров йәшәй. Ул үҙ тыуған яғын биш бармағы кеүек белгән, уның тарихы тураһында әллә нисә китап сығарған кеше. Әгәр ҙә Әсмә апайҙың "Урал батыр" эпосының вариантын белеүе дөрөҫ булһа, был турала бит иң тәүҙә Рәшит ағай белер ине, сөнки ул Әсмә апайға яҡын ғына туған кеше. Рәшит ағай үҙе әйтмәксе, улар илле йылдан ашыу бер-береһе менән ҡатнашып йәшәгән кешеләр. Унан һуң, бала саҡта ишетеп, ҡартайған көндә "Урал батыр" кеүек күләмле әҫәрҙе ҡапыл ғына иҫкә төшөрөү мөмкин түгел нәмә. Уны иҫтә тотор өсөн көн дә тигәндәй ҡабатлап, хәтергә төшөрөп йөрөргә кәрәк. Шулай булғас, Әсмә апайҙың "Урал батыр"ҙың яңы версияһынмы, вариантынмы иҫенә төшөрөүе ышандырмай.

**▶ Мөхәмәтша Буранғолов 1910 йылда Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙән ошо эпосты яҙып алғандан һуң уның "Ағиҙел" журналында баҫылып сығыуы шул серҙе асыу, халыҡтың серен һатыу түгелме?**

- Юҡтыр. Беҙ бит бөтөнләй башҡа дәүерҙә - рационализм хөкөм һөргән, фән өҫтөнлөк иткән заманда йәшәйбеҙ. Әммә шуны әйтеп китергә кәрәк. Халыҡта серле белемде һаҡлау тигән төшөнсә әле лә йәшәп килә. Боронғоно белгән кешеләр һәр һорашҡан кешегә асылып, үҙҙәре белгән боронғоно бигүк һөйләп бармайҙар. Мәҫәлән, экспедицияларҙа материал йыйып йөрөгәндә: "Әлләсе, белмәйем, кем белә инде уны ..." - тигәнерәк һүҙҙәрҙе мин йыш ҡына ишетәм. Ниндәйҙер боронғо мәғлүмәткә эйә кешене һөйләтеү өсөн ҡайһы ваҡыт бик ҙур түҙемлек талап ителә. Күпселек осраҡта материал йыйырға йәй йөрөгәс, кемеһенә бесән, ҡайһы берәйһенә утын әҙерләшергә, хатта бер тапҡыр урам эсен һеперергә тура килгәне булды. Унан бит әле телдең, урындағы диалект, һөйләш үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Әгәр мәғлүмәтле кешенең ышанысын, ихтирамын яулай алһаң, ул белгәнен асып бирер.

*Беҙҙең бәхетебеҙгә, Ғәбит менән Хәмит сәсәндәргә Мөхәмәтша Буранғолов тап булып, тик шул арҡала ғына мәшһүр эпосыбыҙ һаҡланып ҡалып, беҙҙең көнгә килеп етә. Ышанып тапшырырлыҡ кеше килеп сыҡмауы арҡаһында беҙҙең тағы ла әллә күпме эпостарыбыҙ, легенда-риүәйәттәребеҙ, йырҙарыбыҙ, ҡобайырҙарыбыҙ юғалғандыр. Мөхәмәтша иһә үҙенең һыйырын һатып, Ғәбит, Хәмит сәсәндәр менән бергә йәшәп, уларҙың ышанысын яулап, эпосты ятлап алған. Сөнки ундай ҡомартҡыларҙы бер ваҡытта ла яҙмайҙар. Ул үҙе Ғәбит менән Хәмит сәсәндәр кимәленә күтәрелгәс кенә эпосты ҡағыҙға күсерә.*

**▶ Игорь Кучумов тигән тарихсының "Аргументы и факты" гәзитенә биргән интервьюһында: "Урал батыр"ҙы Мөхәмәтшә Буранғолов үҙе уйлап сығарған", - тигәнерәк фекере йәмәғәтселектә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы. Был турала нимә тиерһең? Бер мәл кемдер Ғайса Хөсәйеновҡа ошо хаҡта әйткәс, Ғайса ағай уға: "Мөхәмәтша Буранғолов ундай эпосты тыуҙыра алғас, бәйғәмбәр булған бит..." - тигән...**

- Был хаҡта тәү тапҡыр 1983 йылда БДУ профессоры Л.Г. Барагтан ишеттем. Университет ул ваҡытта профессор Л.Г. Бараг етәкселегендә "РСФСР халыҡтары фольклоры" тип аталған бик тә шәп йыйынтыҡтар серияһын сығара ине. Ошо йылда мин хәҙер инде күптән мәрхүм рухташ дуҫым профессор Дамир Вәлиевтың һорауы буйынса "Урал батыр" тураһында бер мәҡәлә яҙҙым да, баҫтырырға, тип уға алып килдем. Мәҡәләмде тотоп, икәүләп профессор Барагҡа килдек. Ул мәҡәләне уҡып сыҡты, хатта әҙерәк маҡтап та алды, тик аҙаҡтан ваҡыт әрәм итеп "Урал батыр" менән бутән булышмаҫҡа, икенсе берәй тема алырға кәңәш итте. Йәнәһе, ундай эпос юҡ, уны "Мөхәммәтша бабай" үҙе уйлап сығарған, был уның фантазияһы. Профессорҙың был һүҙҙәре башҡа күҫәк менән тондорғандан да былайыраҡ тәьҫир итте. Аҙаҡ Дамир ағайҙың бүлмәһенә ҡайтҡас, мин үҙемдең аптырауымды, шаңҡыуымды, бөтә уйлағандарымды ағайға әйттем. Ул артыҡ иҫе китмәй генә: "Әгәр, Бараг әйтмәксе, "Мөхәмәтша бабай" ундай эпосты уйлап сығара алған икән, ул бит беҙҙең замандың Гомеры, уға алтындан һәйкәл ҡуйырға кәрәк, ҡустым. Хатта "Мөхәммәтша бабай" үҙе уйлап сығарған, тип ризалашҡан ваҡытта ла эпос тикшереүгә лайыҡ әҫәр, сөнки был бит башҡорттоң шундай әҫәр тыуҙырырлыҡ һәләтле кешеләренең булыуын, халыҡтың ижади ҡомарының ниндәй юғарылыҡта булыуының күрһәткесе. Шуға һин Барагтың һүҙҙәренә артыҡ иғтибар итмә, беҙҙең халыҡтың шундай әҫәрҙәре булғанына, уны хатта ҡабул итергә теләмәгән көндә лә, йәндәре көйөп уға иғтибар иткәндәренә ҡыуанырға кәрәк", - тип бик тә аҡыллы кәңәштәрен бирҙе.

М. Буранғолов, әлбиттә, бик тә һәләтле кеше булған, әммә ниндәй генә һәләтле булмаһын, ул бындай эпосты тыуҙыра алмаҫ ине. "Яҙа алыр инеме, юҡмы?" тип Буранғолов йәшәгән замандың фән кимәлен өйрәнеп сыҡтым. Әммә "Урал батыр"ҙа үҙ сағылышын тапҡан күп кенә йәмғиәт күренештәре ул ваҡытта фәнгә әле билдәһеҙ була. Унан һуң, Мөхәмәтша Буранғоловтың үҙенең белем кимәлен дә иҫтә тоторға кәрәк. Ул бит Европа университеттарында белем алмаған, ә мәҙрәсәлә уҡыған кеше. Ул заманда йәшәгән кешеләрҙең белем кимәле, мәғлүмәткә эйә булыу даирәһе бындай әҫәрҙе яҙыу ғына түгел, ундай эпосҡа һалынған төп фекерҙе аңларлыҡ кимәлдә лә булмаған. Быны хатта Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәр ҙә аңлата алмағандыр, сөнки Урал батырҙы формалаштырыуға килтергән заман күптән үткән, уны тыуҙырған ихтыяждар ҙа, күп һүҙҙәрҙең мәғәнәләре лә онотолған була. Урал батыр кеүек эпосты ижад итер өсөн беҙҙең эраға тиклем йәшәгән боронғо һинд-иран, скиф мифтарын белеү, боронғо кешеләрҙең үҙаңын иҫәптә тотоу, шул заман тормош-көнкүрешенең төрлө-төрлө ваҡ-төйәген белеү, уларҙы эпоста оҫта сағылдырыу талап ителә. Былар иһә мөмкин булмаған нәмәләр.

**✓ Тәбиғәт боронғо кешеләр өсөн үҙе бер серле китап булған. Улар үҙҙәре йәшәгән ерҙең серле биттәрен йәшәй-йәшәй асҡандар, уны аңлай барғандар һәм шул асыштарын үҙ рухи донъяһында сағылдырғандар.**



**Йондоҙло күктә үҙҙәре күн дә күргән тоторокло моделдә башҡорттоң ата-бабалары ерҙә лә күрергә теләгән, һәм шуға күрә шул моделдә үҙҙәренең йәмғиәтендә ҡабатларға ынтылған. Шулай килеп сыға...**

- Тәбиғәт боронғо кешеләр өсөн үҙе бер серле китап булған. Улар үҙҙәре йәшәгән ерҙең серле биттәрен йәшәй-йәшәй асҡандар, уны аңлай барғандар һәм шул асыштарын үҙ рухи донъяһында сағылдырғандар. Үҙҙәре шул серле донъяға яраҡлашҡандар, яраҡлашыу ғына түгел, тирә-йүндә үҙҙәре йәшәү өсөн уңайлы итеп яраҡлаштырғандар. Ошо яраҡлашыу-яраҡлаштырыу процесы "Урал батыр" эпосында үҙенең тулы сағылышын тапҡан.

Эпосты тикшергәндә ваҡиғаның ҡайҙа - ерҙәме, күктәме барғанын ҡапыл ғына аңламай ҙа башлайһың. Быға аптырарға кәрәкмәй. Сөнки боронғо кешеләр ерҙе, күкте, үҙе йәшәгән урынды, хайуандар донъяһын, кешенең үҙен дә бер бөтөн Донъя итеп күҙаллаған. Кешене уратып алған Донъяның бер генә элементы ла осраҡлы йәки артыҡ һаналмаған, уларҙың һәр береһенең үҙ тәғәйен урыны булған.

Башҡорттоң "Урал батыр" эпосында сағылған Донъя моделенең нигеҙе төрлө күк есемдәренең Күк ҡабағындағы торошонан сығып ҡоролғандыр, тип әйтергә була. Был эпоста ваҡыт һәм арауыҡтың барлыҡҡа килеүен, унда кешенең һәм уны уратып алған мөхиттең урынын билдәләргә ынтылыу, аңлатырға теләүҙе күрергә була. Башҡорттоң ата-бабаларының үҙҙәре йәшәгән Урал мөхитен аңлау, үҙләштереү мәле сағыла был эпоста. Тере ҡалып, ошо мөхиттә донъя көтөр өсөн үҙҙәре йәшәгән ерҙең үҙенсәлектәрен белергә, ошо үҙенәлектәрҙе сағылдырған календарь төҙөргә тейеш булғандар. Шуныһы, улар был ерҙә тере ҡала алмаҫтар ине. Быуаттар дауамында күк йөҙөн, ундағы үҙгәрештәрҙе ата-бабаларыбыҙ ентекле күҙәтеп, хәтерҙәрендә һаҡлап, быуындан-быуынға тапшыра килгәндәр. Ошо күҙәтеүҙәр, тәжрибә нигеҙендә формалашҡан ҡараштарын башҡорттар төрлө символдар аша эпостарҙа, йола байрамдарында сағылдырып, уларҙың тәғәйен урынын билдәләгәндәр. Һәм Урал батыр эпосы ана шул белемде туплаусы иң боронғо әҫәрҙер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғалимдар уйлауынса, һәр боронғо эпос, шул иҫәптән архаик эпостар ҙа үҙендә тарихи ваҡиғаларҙы сағылдыра. Был уларҙың төп функцияһы. Әммә архаик эпостар тарихи ваҡиғаларҙы үҙе формалашҡан боронғо дәүерҙең ҡалыбы, йәғни шул дәүерҙең Донъя моделе һәм ритуалдары буйынса сағылдыра. Бындай эпостарҙа донъя ярал-ған ваҡыттағы ваҡиғалар тарихи ваҡиғаларға фон булып тора, тип әйтергә була. Тап шуның өсөн дә боронғо эпосыбыҙ "Урал батыр"ҙы аңлап уҡырға кәрәк, тарихи тамырҙарыбыҙҙы, боронғо ата-бабаларыбыҙ фәлсәфәһен, аҡылын, тағы әллә күпме йәшәйеш серҙәрен белер өсөн.**

*Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.*

ИЖАДХАНА

**Былтыр ҙур экрандарға Айнур Аҫҡаровтың "Әсә" фильмы сыҡҡас, унда төп роль башҡарыусы актриса күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятҡандыр, моғайын. Уның ҡырыҫ, күберәк үҙен ҡайғыртҡан геройы тамашасыларға төрлөсә тәьҫир итте - кемдер уны аҡларға тырышты, кемдер яуапһыҙлыкта ғәйепләне. Быға тиклем дә республикабыҙҙың төп театрында сағыу ролдәре менән танылып өлгөргән актриса был яҙмыш бүләген нисек ҡабул иткән? Фильмдағы әсә образы уның өсөн кире ролдәр рәтенәнме? Ошолар һәм башҡорт театры һәм кино сәнғәте тураһында М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Юлиә ҒӘЛӘҮЕТДИНОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ӘСӘ РОЛЕ...

## яҙмыш бүләгеме?



### Таланттар төйәгенән

Тыуған төйәгем - Белорет районы Йәйәк ауылы илебеҙгә күп кенә һәләтле ижадсылар бүләк итһә лә, ауылыбыҙҙа Фаяз Солтановтан башҡа актер һөнәрен үҙ итеүселәр юҡ ине. Урта мәктәпте тамамлағанымда алдымда ике юл булды: БДУ-ның журналистика факультеты һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты. Сәнғәт юлын һайлауымды инәйем (әсәй) хупламаны, шулай ҙа уның һүҙен йығып булһа ла, актриса булырға ҡарар иттем. Ул йылда конкурс ҙур, бер урынға 14-15 кеше ине. Арабыҙҙа һылыу-һылыу ҡыҙҙар бар, уларға ҡарап, минә бында урын юҡтыр инде ул, тип уйлайым. Шуға ла минең уҡырға инеп китә алыуым бер мөғжизә кеүек тойолдо. 17 егет һәм 5 ҡыҙ уҡыныҡ һәм Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры өсөн йыйылған махсус курс булараҡ, был ҡалаға эшкә киттек.

Стәрлетамаҡҡа барғас, минә төп ролдәр ҙә эләгә башланы. Тәүге ролем - Мостай Кәримдең "Ҡыҙ урлау"ында Йәмилә булды.

### Осош өсөн майҙан кәрәк

Бына шулай Стәрлетамаҡ театрында бер-бер артлы төп ролдәр уйнап йөрөгәнемдә күңелемдә ниндәйҙер тәшөнкөлөк башланды. Мин театрҙан китергә булдым. Театрҙан китәм, тиһәм дә, актерлыҡтан китеү уйымда юҡ ине, әлбиттә. Бәлки, кино сәнғәтендә үҙемде һынармын, тип тә уйланым. Стәрлетамаҡ театры менән актриса яһаны, күңелемде китмәй генә үҫтереп ебәрҙе. Тик минең өсөн был майҙан тар кеүек ине. Джульеттаны, Офелияны уйнаһаң да, берәү ҙә баһа ла бирмәҫ ине, хатта күрмәҫ тә ине кеүек бында.

Был мәлдә Өфөлә "Туғанлыҡ" фестивале бара ине, осраҡлы рәүештә генә Олег Закир улы Ханов менән осраштыҡ шунда. Уның менән беҙ Вампиловтың "Өлкән ул"ында бергә эшләп өлгөргәйнек, ул унда минә Нина ролен биргәйне. "Был нескә актрисаны һаҡлағыҙ", тип әйткәне лә бар ине. Бөгөнгә театр һаман да элекке ысулдар, артыҡ әртисләнеү, күпертеп уйнау, артыҡ гримм менән алдыра алмай, бөгөн тәбиғилек, тойғолар кисерә белеү юғары баһалана. Ошо йәһәттән режиссер Олег Ханов миндә ниндәйҙер ныҡ һыҙаттар күргән һәм хәтерендә ҡалдырған, күрәһең. Яңы йыл алдынан Олег Закир улы минә шылтыратып, үҙенә һынап ҡарағың килһә, академия театрына кил, тип саҡырҙы. Шулай итеп, был минең өсөн иң тылсымлы Яңы йыл байрамы булды, сөнки был театрҙа уйнарға хыялланырға ла ҡыймай инем. Хәйер, артыҡ бирелеп Аллаға ышанмаһам да, ул һәр ваҡыт ҡайҙалыр күңелемдә, ҡайҙалыр баш менән йөрәк араһындамы, йәшәй ул. Ҡасандыр нимә тураһындалыр хыялланам да, онотам. Ә ул күпмелер ваҡыттан һуң алдыма килә.

### "Әсә" фильмы

Тормошомдоң аҫтын өҫкә килтергән тағы бер ваҡиға - режиссер Айнур Аҫҡаровтың үҙенең фильмына саҡырыуы булды. Быға тиклем театрҙарҙағы ролдәрем менән бер аяғымда баҫып торһам, был ролдән һуң мин актриса булараҡ ныҡлап ике аяҡҡа баҫтым, мин үҙемде тиң тотоп һөйләшә, үҙемдең фекеремде белдерә алам. Бер көндө урамдан китеп барһам, юлымды машина быуа. Айнур тураһында ишетеп белә инем, был машинаһынан төшә лә: "Һеҙ башҡорт театры актрисаһымы? Фильмға кастинг бара, килегеҙ", - тине. Күлдәк, бейек үксәле туфлиҙар кейеп, сәсемде үреп төшөрҙөм, йәнәһе, башҡорт ҡыҙын һүрәтләндерәм инде, киттем кастинг тигәндәренә. Текст бирәләр, камераға төшөрәләр, шундай көсөргәнешле сәхнә, ә минең күҙҙән йәш сыҡмай ҙа ҡуя. Тамаҡҡа килеп тығылды, әммә илай алмайым, үҙем эстән генә, их, бөттө, тип уйлайым. Баҡтиһәң, тап ошо эске кисерештәремдең йөҙөмә сығыуын өҫкәтҡан режиссер.

Фильмды төшөрә башлағас, быға тиклем һине нимәгә өйрәттеләр, уларҙың барыһын да онот, тине Айнур Аҫҡаров. Әйткәндәй, һинең менән яңы эшләй башлаған бөтөн режиссерҙар ҙа шулай ти. 9-сы миҙгелде тамамланым, тәжрибәм дә бар, режиссерҙар нимә теләй, мин шул сәхнәне уйнай алам хәҙер. Тик кинола башҡасараҡ булып сыҡты. Унда театрҙағы кеүек ролгә оҙаҡ инеп йөрөп булмай, бөтөн нәмә секундында, минутында хәл ителә. "Әсә"не премьера көнөндә генә күрҙем. Ике тойғо көс һынашты эстә: береһе, яҡшы ла инде, Голливуд кимәлендәге фильм, һин бәхетле булырға тейеш, ти. Икенсе яҡтан, үҙ-үҙемә шул тиклем оҡшамайым. Хәҙер тамашасы фильмды нисек ҡабул итер, тип борсолам.

### Үҙемде йәлләтергә яратмайым

"Әсә"ләге әсәне башта ҡабул итә алмай йонсоном. Нисек итеп балаларына шундай мөнәсәбәттә булырға мөмкин, тип бәхәсләшеп бөттөм, тормошта төрлө хәлдәр, төрлө яҙмыштар булыуын аңлаһам да. Артыҡ сөсөләнеүҙе үҙем дә яратмайым. Тормошта - үҙемде, сәхнәлә геройымды йәлләтергә яратмайым. "Уй, шундай ҡырыҫһың", - тип әйткәндәре лә бар. Матур ғаиләлә үҫтем, бәлки, баш бала булғанға шулай етдиҙер мин. Атайым минә 15 йәш саҡта ғына мәрхүм булды, инәйемдең мине, һеңлем менән ҡустымды иркәләтеп ултырырға ваҡыты ла булмағандыр. Инәйем урамдан илап ингәндә лә йәлләмәне беҙҙе, үҙең ғәйепле, ти ҙә ҡуя торғайны. Әле уға шул тиклем рәхмәтлемен, холҡом минә юғалып ҡалмаҫҡа булышлыҡ итә. Инәйем менән эшлекле партнерҙар булһаҡ, әллә ниндәй уңыштарға өлгәшер инек ул, тип уйлап ҡуям.

Академия театрына эшкә килгәс: "Премьера була, инәй, киләһеңме?"- тием. "Һин төп ролдәме?" - тип һорай. "Нисек әйтергә, төп роль инде", - тигән булам. "Бына ҡасан төп ролдә булаһың, шунда киләм", - ти. Премьера булған көндө килмәһә лә, аҙаҡтан яйлап килеп ҡарай спектаклдәрҙе. "Әсә" фильмы сыҡҡас, фотоһүрәтем менән постерҙарҙы күп итеп тараттылар. Бер ваҡыт ауылға ҡайтһам, инәйем шул постерға "Минең ҡыҙым" тип яҙып, стенаға йәбештереп ҡуйған. Ошо һүҙҙәргә бөтөн нәмә һалынған - яратыу ҙа, минең өсөн борсолоу ҙа, һоҡланыу ҙа.

Театрҙа Сыңғыҙ Айытматовтың "Аҡ пароход" драмаһында Әсә инә боланды эшләгәндә режиссер Линас Зайкаускас та тойғоларҙы күрһәтергә рөхсәт итмәй ине. Һинең өсөн тамашасы көйһөн, тамашасы илаһын, ә һин һалҡын ҡан менән уйнарға тейешһең, тигәнде аңғартты ул. Айнур Аҫҡаровтың эше лә ошоға ауаздаш, мин балаларға ҡарата битарафлыҡ күрһәтәм, тамашасы әсәне әрләп, балаларҙы йәлләргә тейеш. Стәрлетамаҡта эшләгәндә характерлы ролдәрем булманы, сөнки улар барыһы ла ыңғай геройҙар ине. Бында килгәс, үҙенсәлекле ролдәр эшләргә насип булды, һөнәрем минә хәҙер күпкә ҡыҙыҡлыраҡ тойола.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әгәр ҙә һәр артист холоҡ-ҡылығы менән һыу тамсыһы кеүек үҙенә оҡшаған геройҙарҙы ғына уйнаһа, театр һәм кино сәнғәте күпкә төҫһөҙ булыр ине. Юлиә тормошта иҫ киткес алсаҡ, ихлас булыуы менән арбай һине, үҙенә ҡапма-ҡаршы ролдәре менән тағы ла берҙе һоҡландыра. Һәйбәт актер өсөн насар ролдәр булмай, тиҙәр. Шуға ла геройыбыҙға төрлө ролдәр теләйек.**

*Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.*

✔ *Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үҫешенә артыҡ ашау, саманан тыш эмоциональ көсөргәнеш, спиртлы эсемлектәр менән мауығыу, тәмәке тартыу, саманан тыш аш тоҙо ҡулланыу, аҙ хәрәкәтләнеү һ.б. йоғонто яһай.*



ИНТЕРНЕТТАН



## АҘНАНЫҢ... ҡайһы көнө бәхетле

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үҫмерҙәргә D витамины ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто ла яһамай, диабет хәүефен дә түбәнәйтмәй. Етмәһә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үҫмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины дефициты һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үҫмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", ти ғалимдар.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Гүзәл затҡа бәйле бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00 - 16.00 сәғәттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын АҠШ-та тикшереп ҡарағандар. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЙӨРӘК МЕНӘН ШАЯРМАЙҘАР...



**Был мәҡәләгә Ибраһим Абдуллиндың пьесаһының бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ, тиергә булыр ине, әгәр ул атамаһында уҡ бер һөйләм менән генә анығыҡ киҫәтеү яһамаһа. Бер олоно, бер кесене тыңла, тигәндәй, был һүҙҙәргә ҡолаҡ һалырға кәрәк, сөнки белгестәр әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренән яҡты донъя менән хушлашыусылар һаны хатта яман шеш статистикаһынан да артып китә икән. Бының ысынлап та шулаймы икәнлеген асыҡлау һәм башҡа көнүҙәк һорауҙар менән Республика кардиология үҙәгенең баш табибы Ирина НИКОЛАЕВАға мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Һеҙ етәкләгән Үҙәк - республика халҡына кардиология һәм юғары технологияларға нигеҙләнгән кардиохирургия ярҙамы күрһәтеү өсөн заманса дауалау-диагностика ҡорамалдары менән йыһазландырылған махсус медицина учреждениеһы. Ошолар һәм яңы инновациялар менән танышып үтегеҙсе әле.**

- Кардиоүҙәктең үҙенсәлеге - кардиология һәм кардиохирургия хеҙмәттәренең уңышлы берләгендә. Тәүге йылдарҙа консультация биреү, диагностикалау ярҙамы күрһәтеү 360 койка-урынға иҫәпләнгән учреждение белгестәренең төп бурысы булып торһа, бынан 15 йыл элек хирургия бүлеге ойошторолдо. Бөгөн ул - берҙәм организм, кардиологтар кардиохирургтар менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләп кенә ҡалмайҙар, ошо бер-берененә тығыҙ бәйләнгән ике өлкәләге белем һәм тәжрибәгә лә эйәләр. Был, тәү сиратта, пациент өсөн бик уңайлы һәм иң ҡатмарлы диагноз менән килгән ауырыуҙарға һөҙөмтәле ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге бирә.

Былтыр үҙәктә гибрид операциялары яһала башланы. Улар илдең ни бары биш клиникаһында ғына үҙләштерелгән. Был ике төрҙә үҙ эсенә алған ҡатмарлы операция. Ул асыҡ йөрәккә һәм бер үк ваҡытта эндоваскуляр ысул (ҡанды ағыҙмайынса) менән тамырҙарға эшләнә. Бындай дауалау, мәҫәлән, йөрәктең иң ҙур артерияһы - аорта өҙөлгәндә, кеше ғүмере хәүеф аҫтында булғанда һәм ашығыс ярҙам талап ителгәндә ҡулланыла. Аортаны шунда уҡ бөтөн оҙонлоғонда протезлау мөмкин түгел, шуға күрә айырым участкаларҙы алмаштырыу буйынса ике операция алмашлап яһала. Хирургтарыбыҙ йөкө артерияларына ла эндоваскуляр операциялар эшләй. Һуңғы өс йылда үҙәктә йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарын хирургик коррекциялауҙың 50 яңы ысулы ҡулланыла. 2013 йылда йөрәкте күсереп ултыртыу буйынса беренсе операция яһалды. Бөгөн, хирургтарыбыҙ иҫәбендә уларҙың һаны 9-ға еткәндә, бындай операциялар яңылыҡ түгел.

**➔ Ирина Евгеньевна, Башҡортостанда йөрәк сирлеләр статистикаһы нисек һәм төбәктә ниндәй ауырыуҙар йышыраҡ осрай?**

- Һуңғы өс йылда республикала артериаль гипертония сирҙәренең - 9,2, цереброваскуляр сирҙәрҙең 10,8 процентҡа артыуы һөҙөмтәһендә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙарының 1,4 процентҡа артыуы билдәләнә, шул уҡ ваҡытта йөрәктең ишемия ауырыуы 8 процентҡа кәмегән. Артериаль гипертония менән ауырыусыларҙың артыуы кире күренеш түгел, ул йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәрен иртә стадияларҙа асыҡлауҙың һөҙөмтәһе. Улар ни тиклем иртәрәк асыҡлана, шул тиклем йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан вафат булыусылар һаны кәмей

Йөрәк проблемаларына тарымаҫ өсөн ғәҙәти, сәләмәт кешегә нимәләр эшләргә кәрәк? Йөрәк ауырыуҙарына ниндәй тышҡы факторҙар йоғонто яһай? Йөрәк ауыртҡанда ябай кеше нимәләр белергә тейеш? Кардиологияла йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үҫешенә йоғонто яһаусы сәбәптәрҙе өйрәнеү айырым дисциплинаға ҡарай. Ул был проблеманы һөҙөмтәле хәл итергә һәм сирҙәрҙе алдан иҫкәртеп, дауалауҙың йоғонтоло системаһын булдырырға ярҙам итә. Шартлы рәүештә хәүеф факторҙары үҙгәрмәүсән (йәш, нәҫел, енес) һәм үҙгәреүсәнгә (гиподинамия, гиперхолестеринимия, артериаль ҡан баҫымының күтәрелеүе, стресс, һимереү) бүленә.

Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үҫешенә артыҡ ашау, саманан тыш эмоциональ көсөргәнеш, спиртлы эсемлектәр менән мауығыу, тәмәке тартыу, саманан тыш аш тоҙо ҡулланыу, аҙ хәрәкәтләнеү һ.б. йоғонто яһай. Был шарттарҙың береһе генә ауырыу барлыҡҡа килеүгә сәбәп була алмай, әммә бер нисә фактор бергә күҙәтелгәндә, сирләү хәүефе күп тапҡырҙарға арта. Был сәбәптәрҙе кәртә ҡуйыу, һис шикһеҙ, сәләмәтлекте һаҡлауға ярҙам итәсәк. Тәү сиратта, насар ғәҙәттәрҙән баш тартып, йышыраҡ саф һауала булырға, рациональ туҡланырға, билдәләнгән диетаны һаҡларға, сәләмәт тормош алып барырға кәрәк.

Йөрәк ауыртҡанда тәүге ярҙамды ябай кеше лә күрһәтә белергә тейеш. Өйәнәктең беренсе билдәләре: күкрәктә көслө баҫымлы, яндырыусы, ҡыҫымлы ауыртыу барлыҡҡа килә һәм һул ҡулбашҡа, беләккә, муйынға, аҫҡы яңаҡҡа, эстең өҫкө өлөшөнә бирә, 5 минут самаһы дауам итә. Йышыраҡ ауыр эш башҡарғанда, йылы бүлмәнән һыуыҡҡа сыҡҡанда барлыҡҡа килә. Әгәр ауыртыу 5 минуттан артығыраҡ булып, һалҡын тир бәреп сыға икән, миокард инфаркты күҙәтелә.

Ошондай симптомдар булғанда, таянсығы булған креслоға ултырырға йәки баш ағы күтәренке түшәккә ятырға, тынысланырға, яғаны бушатырға, ҡайыш йәки билбау булһа, уларҙы сисергә, 0,25 г аспириндың сәйнәп йоторға, 0,5 мг нитроглицеринды тел аҫтына һалырға кәрәк. Күкрәкте йөн шарф, бейәләй йәки ус менән ҡыҙарғансы ышҡыу зарур, был йөрәккә ҡан ағымын көсәйтәсәк. Тәрән итеп тын алып, 1-2 минут дауамында көслө итеп йүткерегеҙ, йүтәл йөрәккә баҫымды көсәйтеп, ул яҡшыраҡ эшләй башлаясаҡ. Әгәр ауыртыу үтмәһә, 5 минуттан һуң икенсе нитроглицерин ҡабул итеп, тиҙ ярҙам саҡыртығыҙ.

Нимә эшләргә ярамай? Йөрәккә һалҡын әйбер һалырға - тамырҙар тарайып, инфаркт кинәйәсәк. Йөрөргә, торорға, тәмәке тартырға, ашарға ярамай. Аспиринға аллергия, ашҡаҙаныгыҙ ауырта икән, уны ҡулланыу тыйыла. Әгәр ҡан баҫымығыҙ түбән булһа йәки башығыҙ әйләнһә, телмәрегеҙ насарайып, хәрәкәттәрегеҙ буталһа, нитроглицерин ярамай. Нитроглицерин һәм аспирин ҡабул иткәндән һуң ауыртыуы тулыһынса юҡҡа сыҡып, хәлегеҙ еңеләйһә, табипты өйөгөҙгә саҡыртып, дауаланырға кәрәк. Табип килгәнсе ҡабул иткән дарыуҙарҙың тышлыҡтарын ташламағыҙ.

**➔ "Бөтөн ауырыуҙар ҙа нервынан", тиҙәр. Инфаркттарҙың һәм инсульттарҙың күп булыуы стрестарға бәйлеме, сөнки бөгөн бер генә кеше лә уларҙан азат түгел. Хатта мәктәп уҡыусылары өсөн дә тестар, имтихандар ҙур стресс...**

- Ысынлап та, стрестар йәки саманан тыш хис-тойғоло көсөргәнеш йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары үҫешенең сәбәбе булып тора. Кеше стресс кисергәндә ҡанға гормондар сыға һәм улар артериаль ҡан баҫымын күтәрә. Йөрәк ҡыҫылыуы йышлығы һәм уның көсө арта, йөрәк мускулдарында матдәләр алмашыныуы шәбәйә, кислородҡа ихтыяж тыуа. Шуға күрә, стресс артериаль ҡан баҫымы күтәрелеүгә, инфарктҡа йәки инсультҡа килтереүе бар.

**➔ Рәсми сайтығыҙҙа: "Бөгөн сәләмәт булыу модала, абруйлы һәм йәшәү өсөн мотлаҡ!" - тигән яҙыу девиз кеүек тора. Республикала йөрәк ауырыуҙарын иртә стадияла диагностикалауҙа алға китеш бармы?**

- Республикала профилактика эштәре киң алып барыла. Ошо эшмәкәрлек өсөн беҙҙең үҙәк "Йөрәк докторы" йәмәғәт таныуы премияһына лайыҡ булды. Халыҡ менән эшләгәндә төрлө формалар ҡулланабыҙ - "БР-ҙа халыҡ сәләмәтлеге көнө", "Ҡан баҫымыңды үлсә", "Кардиолог менән прогулка", "Кардиолог кәрзине", "Башҡортостан балаларына - сәләмәт йөрәктәр", "Кардиолог беренсе синыф уҡыусыһына" һ.б. акциялар уҙғарабыҙ, балаларҙан алып пенсионерҙарға тиклем барлыҡ йәш категориялары менән дә эшләйбеҙ. Әйткәндәй, был - үҙәктә эшләнгән Башҡортостанда ғүмер дауамында сәләмәтлекте һаҡлау буйынса Республика модуль программаһы принциптарының береһе. Ул үҙенә дүрт модулде: мәктәпкәсә, мәктәп йәшендәге, эшкә яраҡлы халыҡты һәм оло быуынды - пенсионерҙарҙы һәм инвалидтарҙы ала. Һәр төркөм менән адреслы эш алып барабыҙ.

Хәүеф һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иртә стадияла асыҡлау маҡсатында республиканың район-ҡалаларында былтыр оло йәштәгеләрҙе скрининг тикшереүе системаһы индерелде һәм 19018 кеше тикшерелде. Шуларҙың 30,9 проценты түбән хәүефкә ҡарай, 35,5 процентының ауырыу хәүефе юғары һәм бик юғары, ә 33,6 процентында сир булыуы асыҡланды.

Профилактика - Республика кардиоүҙәгенә эшенең мөһим бер тармағы булып тора, әммә күптәр, үкенескә күрә, тормош ҡәҙере тураһында бик һуң уйлана башлай. Беҙҙең бурыс - уларға ошоно йәшерәк ваҡытта уҡ, иртәрәк аңлатыу.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ ***Йөрәктең мөхәббәткә әҙерләнеүе - тәриҡәт юлы, ҡабул итеүе - хәҡиҡәт юлы. Мөхәббәте булмаған йөрәк - йөрәк түгел, шул уҡ ваҡытта мөхәббәт һәр бер йөрәккә килмәй.***



МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йола-ҡағиҙәләр араһында тыйыу, әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туктатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға, тотанаҡһыҙлыкҡа, тәртипһеҙлеккә ирек ҡуймау кеүек ғәҙәттәр ҙә бар.**



# ТЫЙЫЛҒАНДАН - ТЫЙЫЛ, ТИГӘН...

### Боролоп ҡарауҙы тыйыу

Хикәйәт-риүәйәттәрҙә ҡарауҙы тыйыу хәл-күренештәре лә һүрәтләнә. Иң йыш тыйылғаны - боролоп ҡарамау. Был мотив йоланы мотлаҡ тотоу мөһимлегенә ишаралай. Грек мифологияһында музыканың әүрәткес ҡөҙрәте менән һуғарылған Орфейҙың уйнауынан хайран Аид үлеләр донъяһынан остаздың ҡатыны Эвридиканы ҡабат ергә ҡайтарырға вәғәҙә бирә. Мәгәр Орфей өйгә инмәйенсә ҡатынына ҡарамаҫҡа тейеш була. Бәхетле ир һөйгәне менән ергә ҡайта, ләкин, тыйыуҙы онотоп, әйләнеп ҡарай һәм Эвридика шунда уҡ ер аҫтына инеп юғала.

Йәһүд риүәйәтендә Хоҙай Тәғәлә тарафынан юҡ ителергә тейешле Содом ҡалаһынан Лотты ғаиләһе менән алып сыҡҡанда фәрештәләр артҡа боролоп ҡарауҙы тыя. Ләкин Лоттың ҡатыны әйләнеп ҡарай һәм тоҙ бағанаһына әүерелә.

Арт - күҙгә, йөҙгә кире тараф, йәғни алдың ҡаршыһы. "Артҡа табан" тигәндең насарға китеү мәғәнәһе лә бар. Килтерелгән һәм башҡа миҫалдарҙан аңлашылыуынса, әйләнеп ҡарау - уңышһыҙлыҡ, кире һөҙөмтәле хәл билдәһе, имгәнлекте боҙған күренеш һымаҡ ҡүҙаллана. Был башҡорт халыҡ ижадында ла тәсмөрләнә. "Йылҡысыҡҡан күл" риүәйәтендә һөйләнеүенсә, серле егет, аусы башҡортто бейәгә атландырып, былай тигән: "Һин алға ҡарай кит, бейә артынан күлдән йылҡы малы сығыр, тик артыңа әйләнеп ҡарама". Бер аҙ барғас, аусы артында аттар кешнәүен, тояҡтар тупылдауын, бейәләр сеңрәүен ишеткән. Күпмелер барғас, ул түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, күлдән көтөү булып сығып килгән йылҡының яртыһы күлгә кире сумған, ярға аяҡ баҫҡандары ғына тороп ҡалған.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосында, егеттең Балҡантауға барып етмәй тороп артҡа боролоуы арҡаһында, гел бер төҫлө сыҡҡан һыртлы ҡола мал тулыһынса ер йөҙөнә сыҡмай. Был күренеш эпоста ошолай һүрәтләнә. Һыу батшаһы Заятүләкте саҡырып ала ла:

- Бына һиңә бер арғымаҡ, шуның ялына тотон. Иллә мәгәр һыуҙан сыҡҡанда артыңа әйләнеп ҡарама, - ти.

Заятүләк арғымаҡты менеп, Һыуһылыуҙы алдына ултырта ла һыу төбөнән сығып китә. Уның артынан сыҡҡан һыртлы йылҡы малы ла эйәрә. Кешнәшкән тауышҡа түҙә алмай, Заятүләк артына әйләнеп ҡарай. Ҡарауы була, йылҡы малының яртыһы кире һыуға инеп китә. Ярға сығып өлгөргәне генә Заятүләктең малы була. Ләкин кире күлгә сумған мал эпоста бәхетһеҙлек һымаҡ һүрәтләнмәй. Заятүләк менән Һыуһылыу Балҡантауҙа донъя көтә. Һыу төбөнән сыҡҡан мал үрсеп, байығып китәләр. Көн килгәнгә һөт биреп, төн ҡунғанға ут биреп, килгән-киткәнгә төйәк булып, оҙон, рәхәт ғүмер кисерәләр.

### Ярамағанға ҡарауҙы тыйыу

Һаҡларға ҡушылған, йәшерелгән нәмәне, кәрәкмәгәндә ҡарау ҙа тыйылған. Грек мифологияһында һуғыш һәм еңеү, шулай уҡ аҡыл, белем, сәнғәт, төрлө кәсептәр алиһәһе Афина Гефестың орлоғонан Ер Гея тыуҙырған бәпесте, ул яткан ҡумтаны Аглавра һәм уның ҡыҙ туғандарына һаҡларға бирә. Афинаның тыйыуына ҡарамай, ҡыҙҙар ҡумтаны аса һәм йылан кәүҙәле баланы күрә. Афина тәьсиренән һантыйланған ҡыҙҙар акрополдән ташланып һәләк була.

Монгол риүәйәтендә һүрәтләнеүенсә, дүрт егет олоғайған Хохәдәй мәргәнгә торлаҡты һаҡларға ҡалдыра, мәгәр билдәле һауытты асыуҙы тыя. Һауытҡа йәшен уктары һәм ҡанатлы кейем һалынған була. Хохәдәй ике тапҡыр тыйыуҙы боҙа. Шулай ҙа егеттәр уны йәшен уктарын һаҡлаусы итеп ҡалдыра, ләкин уларҙы фәҡәт аллалар ҡушыуы буйынса ғына ҡулланырға бойора.

Йөҙгә ҡарамау тыйыуы ла булған. Грек мифологияһында сағылыуынса, Психея бер ҡасан да иренең йөҙөн күрмәҫкә тейеш була. Әммә ул ҡыҙыҡһыныуына сыҙай алмай, төнөн шәм яндыра һәм йәш аллаға шул тиклем һоҡланып ҡарай - Амурҙың һаҙлы тәненә ҡайнар май тамсыһы тамғанын да тоймай. Амур юҡ була. Психея бик күп һынауҙар үтеп, ыҙа күреп, тере һыу алырға ер аҫтына төшөп йәрен ҡайтарырға мәжбүр була. Тыйыуҙы боҙоу ҡатынды утҡа, һыуға төшөрә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 24-27-се һандарҙа).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

### РУХ

5. Рух һәм мөхәббәт бер бөтөн булып олғашҡанда мөхәббәт рухты алмаштыра. Рух үҙен ҡайҙа ғына эҙләһә лә, тик мөхәббәт таба.

6. Мөхәббәт - ул Берҙәмлек рухы ғәскәре башлығы. Әгәр ҙә ул йөрәктә үҙ ҡыуышын ҡорһа, теләк хужаларын, нәфсе эгоизмын юҡ итә.

Мөхәббәт - ул илаһи тартылыу көсө. Әгәр ҙә ул йөрәккә юл тапһа, йөрәкте Аллаһы Тәғәлә менән тоташтыра.

Мөхәббәт - Берҙәмлек еренән осоп килеүсе ҡойон, ул йөрәктең күп төрлөлөк көлөн һәм ҡоромон осороп алып китә.

Мөхәббәт тик үҙен ҡабул итергә әҙер булғандың ғына йөрәгендә ярала.

Мөхәббәтте ҡабул итергә әҙерләнеүсе кеше был тойғо уның саҡырыуын ҡабул итһен өсөн йөрәгенән тоғролоҡ һеперткеһе менән теләктәр көлөн һәм ҡоромон һепереп түгергә тейеш.

Йөрәктең мөхәббәткә әҙерләнеүе - тәриҡәт юлы, ҡабул итеүе - хәҡиҡәт юлы.

Мөхәббәте булмаған йөрәк - йөрәк түгел, шул уҡ ваҡытта мөхәббәт һәр бер йөрәккә килмәй.

Мөхәббәт йөрәккә үҙе килә, уға өйрәнеп булмай. Әгәр ҙә йөрәк нәфсенән таҙарған булһа, мөхәббәт килеүен шундуҡ тоя. Мөхәббәт нәфсе һәм теләк ҡоло булған йөрәккә түгел, янып көлгә әйләнгән йөрәккә килә. Мөхәббәт өсөн ғашиҡ кешенең һәр төрлө бәйҙәрҙән азат булған ихлас йөрәге һәм рухы талап ителә.

7. Теләк ҡоло булған кеше суфый була алмай, сөнки мөхәббәт менән нәфсенең бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Мөхәббәт - йәшәйештең алхимияһы.

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Ижади көс

Ижади интеллект Ижади көстө теләк аша ебәрә. Теләк - ҡаҙаныштар двигателе. Ижади интеллект һеҙҙең менән интуиция аша һөйләшә. Интуиция ниндәйҙер ижади акт башҡарырға теләк булараҡ барлыҡҡа килә. Теләк мөғжизәләр тыуҙыра. Нимәнелер бик ныҡ теләһәгеҙ, был теләк төпкө аңда теркәлә. Артабан хис-тойғолар тән нервыларына һәм мускулдарға таралып, уны тормошҡа ашырыуға стимул алаһығыҙ.

Бер мөһим мәлде иҫегеҙҙән сығармағыҙ: әгәр нимәнелер тормошҡа ашырырға теләһәгеҙ, булмышығыҙҙа уны эшләү өсөн саралар бар. Әгәр уны тормошҡа ашырыу хәлегеҙҙән килмәһә, Ижади интеллект һеҙгә теләк бүләк итмәҫ ине. Икенсе төрлө әйткәндә, ниндәй генә теләк йәшәмәһен, хатта иң тормошҡа ашмаҫтайы булғанда ла, ул үҙендә тормошҡа ашыу һәләтен йөрөтә. Юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән һәр кеше теләктән башлаған. Күпселегенә уларҙы тормошҡа ашырыу алыҫтағы хыял кеүек кенә булған, әммә үҙ-үҙенә һәм Ижади көскә ышаныс маҡсатҡа өлгәшеү өсөн кәрәкле һәләттәрҙе, оҫталыҡты үҫтерергә мөмкинлек биргән.Мин быяның менән һеҙгә барлыҡ теләктәрегеҙ ҙә ысынбарлыҡҡа әүерелергә мөмкин, тип аңлатырға тырышам. Әгәр етеш тормош тураһында хыялланаһығыҙ икән - аҡса эшләй алаһығыҙ. Әгәр дуҫтар тураһында хыялланһағыҙ - кәрәкле кешеләр менән танышырһығыҙ. Яңы эш урыны тураһында хыялланһағыҙ - мотлаҡ кәрәкле вазифа биләрһегеҙ. Әммә былар барыһы ла Ижади хыял ярҙамында эшләнергә тейеш.

### Ижади хыялдың алтын асҡысы

Театрҙа актерҙар иллюзия тыуҙыра, әгәр Аристотелдең концепцияһын файҙаланһаҡ, тамашасы уны ысынбарлыҡ кеүек ҡабул итә. Беҙ үҙебеҙгә-үҙебеҙ ҡуйған сикләүҙәр сәхнәләге ғәмәлдәр кеүек үк, ысын түгел, әммә уйлап сығарылған ялғаны ысын тип ҡабул итергә ҡарар иткәнбеҙ. Ләкин әлеге мәлдең ысынбарлығын ҡабул итергә мәжбүр булһаҡ та, унда мәңге була алмайбыҙ. Киләсәгебеҙҙе бары тик хыял көсө ярҙамында ғына үҙгәртә алабыҙ. Беҙ ғәҙәтләнгән шәхси сикләүҙәрҙе теләгән ваҡытта емерергә, бөтөн йөрәктән ныҡышмал теләгән нәмәне һүрәтләп, иҫке сценарийҙан ҡотолоп, өр-яңы тарих геройы булырға мөмкин.

### Хыял донъя менән идара итә

"Хыял белемгә ҡарағанда күпкә мөһимерәк". Был - донъяның бөйөк ғалимдарының береһе, математика генийы Альберт Эйнштейн һүҙҙәре.

Хыял Ғаләмдә булған көстәрҙең иң ҡеүәтлеһе. Кешелек прогресы туранан-тура коллектив хыялға бәйле. Донъя буйлап сәйәхәт итеп, мин авиалинияларҙың гигант селтәренә һоҡланам. Уларҙы ниндәй ҙур хыял тыуҙырған! Һәр аҙым - кешенең йыһанға осоуынан башлап, донъя буйлап йыһан буйынса сәйәхәт итеүгә тиклем - тормошҡа ашҡанға тиклем кемдеңдер хыялында ғына йәшәгән. Ғаләм буйлап осоу тураһында хыялланырға йөрьәт итеүселәргә был идеяларҙы абсурд тип иҫәпләүселәрҙең сикле хыялын еңергә тура килгән.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 11 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.10, 03.50 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". Сериал (12+).
23.35 "Винил". Драматический сериал. 1-я и 2-я серии (18+).
01.45, 03.05 "Прощай, любовь!" Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сестра моя, Любовь". 1-4-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Обреченные. Наша Гражданская война. Марков - Раскольников". Док. фильм (12+).
02.50 "Неотложка-2". Драматический сериал (12+).
03.40 "Дуэль разведок. Россия - Германия". Фильм 3-й (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30 "Борсаҡ" (0+).**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели.**
**10.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Личность" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00 "Интервью".**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Путешествие на край Земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Ученик Дюкобю". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 12 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 04.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Винил". Сериал (18+).
01.45, 03.05 "С девяти до пяти". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сестра моя, Любовь". 5-8 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Белая гвардия". 1-я и 2-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
02.50 "Неотложка-2". Драматический сериал (12+).
03.40 "Бунт Ихтиандра. Александр Беляев". Док. фильм (12+).
04.30 "Комната смеха". Юмористическая программа.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Физра" (6+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Путешествие на край Земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Однажды в Ирландии". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 13 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.40 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 5-я и 6-я серии (12+).
23.35 "Винил". Сериал (18+).
01.35 "Кейптаунская афера". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Кейптаунская афера". Продолжение фильма (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сестра моя, Любовь". 9-12 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Белая гвардия". 3-я и 4-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
02.50 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.40 "Гитлер, Сталин и Гурджиев" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00 "Интервью".**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Путешествие на край Земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Опасное погружение". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 14 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Это Я" (16+).
13.55 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 7-8-я серии (16+).
23.35 "Винил" (18+).
01.45 "3 женщины". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "3 женщины". Продолжение фильма (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сестра моя, любовь". 13-16-я, заключительная, серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Белая гвардия". 5-6-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
02.50 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.40 "Два залпа по конструктору. Драма "Катюши". Док. фильм (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.15 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Преград.net" (6+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 18.00 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.30 "Путешествие на край земли". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Сын Рэмбо". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 15 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.20 "Это Я" (16+).
13.55 "Давай поженимся!" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.45 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда" (16+).
23.35 "Игра на выживание". Триллер (16+).
01.15 "Артур Ньюман". Драма (16+).
03.00 "Расчет". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-ПФО".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.00 Торжественная церемония открытия XXV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
0100 "Зойкина любовь". Худ. фильм (12+).
03.10 "Операция "Большой вальс" (12+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.45 "Джинкс" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Млечный путь" (12+).**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (0+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.30 "Каникулы Нестрогого режима" (0+).**
**15.45 Док. фильм "Вьетнам" (6+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00, 01.30 "Интервью".**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.30 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Обитель проклятых". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 16 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.40 "Синдром дракона". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Валентина Толкунова. Голос русской души". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.15 "На 10 лет моложе" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.25 "Двое и одна". Худ. фильм (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Жара". Фестиваль.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.35 "Самба". Драма (12+).
02.50 "Мальчишник". Худ. фильм (16+).
04.45 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.55 "Трое в лодке, не считая собаки". Комедия.
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Николай Цискаридзе" (12+).
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Продается кошка". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Песня года".
16.25 "Лабиринты судьбы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.35 "Замок на песке". 4 серии. Мелодраматический сериал (12=).
00.30 "Жена Штирлица". Мелодрама (12+).
02.35 "Марш Турецкого-2". Детективный сериал (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Семицветик" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "Девушка с монистами" (12+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**21.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (6+).**
**22.30, 01.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**00.45 "Родительский контроль" (12+).**
**01.30 "Весело живем" (12+).**

## 17 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Синдром дракона". Сериал (16+).
08.10 "Армейский магазин"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье".
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Маршрут построен".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Дачные феи".
12.50 "Фазенда".
13.25 "Ледниковый период. Погоня за яйцами".
13.45 "Ледниковый период". Полнометражный анимационный фильм.
15.15 "Что? Где? Когда?"
1620 "Достояние республики".
18.30 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВин" (16+).
21.00 "Время".
21.20 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВин". Продолжение (16+).
22.15 "Ганмен". Боевик (16+).
00.20 "Великое ограбление поезда: История двух воров". Худ. фильм (16+).
01.45 "Автора! Автора!" Худ. фильм (12+).
03.45 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.20 "Лев Гурыч Синичкин". Комедия.
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Вести".
14.10 "Дорогая моя доченька". Худ. фильм (12+).
16.15 "Только ты". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести".
21.00 "Только ты". Продолжение сериала (12+).
00.50 "Охраняемые лица". Детективный сериал (12+).
02.50 "Тайна дипломата № 1. Андрей Громыко" (12+).
03.40 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Алиса знает, что делать" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Будьте как дома" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ".**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "На пути к истине" (12+).**
**15.30 "7 чудес Башкортостана" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**
**18.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "Корона российской империи, или Снова неуловимые". Худ. фильм (6+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Лимб". Худ. фильм (16+).**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ҺАРЫ МӘТРҮШКӘ - БӘХЕТ ҮЛӘНЕ



**Кеше бәхет тойғоһон кисергәндә уның организмында серотонин - бәхет гормоны арта. Һары мәтрүшкә тап ошо гормондың эшләнеүен әүҙемләштерә лә инде.**

Һары мәтрүшкә - тәбиғи антидепрессант булараҡ, нервылар системаһын нығытыусы, эс бошоуҙан, депрессив фекерләүҙән һәм насар кәйефтән иң яҡшы ысул. Көрсөклө тормош хәлдәрендә көнөнә 3-6 сынаяҡ һары мәтрүшкәле сәй менән бергә 20 тамсы төнәтмәһен көнөнә өс тапҡыр эсергә кәрәк. Төнәтмәне түбәндәгесә эшләйҙәр: 50 грамм кипкән, ваҡланған һары мәтрүшкәгә 0,5 литр араҡы ҡойоп, ҡараңғы урында 10 көнгә ҡалдыралар, даими рәүештә һелкетеп торалар һәм 10 көн үткәс, һарҡытып алалар.

Һары мәтрүшкә - тылсымлы үлән, уның нигеҙендә эшләнгән дауалау саралары меңләгән ауырыуҙы дауаларға булышлыҡ итә. Юҡҡа ғына халыҡ мәҡәле, онһоҙ икмәк бешереп булмаған кеүек, һары мәтрүшкәһеҙ ауырыуҙарҙы дауалап булмай, тимәгән.

● Һауа торошо үҙгәреүенә һиҙгерлек булғанда һары мәтрүшкә сәйе вегетатив тирбәлеште көйләргә ярҙам итә. Ырыуҙан ҡалыу ваҡытында ла һары мәтрүшкә сәйе йәки һары мәтрүшкә һәм ҡомалаҡты тигеҙ күләмдә алып эшләнгән сәй ярҙам итә.

● Иғтибарын туплай алмаған балаларға йәки ололарға һары мәтрүшкә менән мелисса сәйе ярҙам итә. Был тәмле ҡатнашма дәрес йәки имтихан алдынан бик шәп буласаҡ.

● Һары мәтрүшкә балалар өсөн, бигерәк тә йәшелсә-емеш өлгөргән ваҡытта, файҙалы. Әгәр һары мәтрүшкәне ҡайнатып, көн һайын йәйгеһен сәй урынына эсһәгеҙ, организмдың еләктәргә, йәшелсә-емешкә өйрәнеүенән гарантиялы рәүештә яҡланасаҡһығыҙ.

● Ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген тергеҙеү һәм организмдың һаҡланыу функцияларын күтәреү өсөн ғәҙәти сәйҙе һары мәтрүшкә төнәтмәһе менән алмаштырып, ике аҙналыҡ дауаланыу үткәрергә кәрәк. Бер стакан ҡайнаған һыуға бер балғалаҡ сеймал етә. Көнөнә бындай сәйҙе өс-дүрт сынаяҡ эсергә кәрәк.

● Ревматизм һәм люмбаго менән яфаланыусыларға һары мәтрүшкә майы менән ыуынырға кәрәк. Уны әҙерләү өсөн 25 грамм яңы ғына йыйылған сәскәләргә 500 грамм зәйтүн майын ҡушып болғайҙар. Килеп сыҡҡан массаны быяла һауытта ауыҙы асыҡ килеш йылы урында 3-5 көн ултыртып ҡуялар. Артабан инде уны ҡояшлы урынға күсереп, төҫө асыҡ-ҡыҙылға әйләнгәнсе тоторға кәрәк. Бер аҙнанан һыулы ҡатламды алып ташлап, майҙы икенсе ябыҡ һауытҡа бушатырға. Ошо уҡ майҙы яраларҙы уңалтыу өсөн һөртөргә, уратма тимрәү, ҡан һауыу ваҡытында, шулай уҡ һеңер тартылғанда, быуындар тайғанда ауыртыуҙы кәметеү өсөн ҡулланалар.

● Стоматиттар һәм гингивиттарҙы профилактикалау-дауалауҙы ла һары мәтрүшкә төнәтмәһе менән еңел хәл итеп була. Һары мәтрүшкә антисептик һәм ҡурыштырыу һәләтенә эйә булғанлыҡтан, төнәтмәне теш ҡаҙналарына һөртәләр. Бының өсөн 10 грамм киптерелгән үләнде 50 грамм 70 процентлы спиртта 10 көн төнәтергә кәрәк.

● Геморройҙы дауалау өсөн һары мәтрүшкә ваннаһын файҙаланырға мөмкин йәки ҡоро табала ҡыҙҙырылған үлән орлоғон зәйтүн майы менән болғап ҡулланырға кәрәк. Әбүғәлисинаның кәңәше буйынса, һары мәтрүшкә нигеҙендә эшләнгән йылы ванналарҙы ҡоймоста һәм анусҭа ауыртыу булғанда ла эшләү зарур. Бының өсөн 1 ҡалаҡ орлоҡто 500 мл һыуҙа 5 минут ҡайнатырға кәрәк.

● Бөйөрҙәр, бәүел ҡыуығы ауырыуҙарында, төнөн бәүел тотмағанда һары мәтрүшкә төнәтмәһе ярҙам итә. Уны аш алдынан ярты стакан эсергә. Бындай төнәтмә, ҡағиҙә булараҡ, 1 ҡалаҡ үләнде 200 мл ҡайнар һыу менән бешекләп, артабан һыу ваннаһында йылытып әҙерләнә.

● Герпес һәм киҙеүгә ҡаршы, шулай уҡ ҡан тамырҙарын таҙартыу, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн һары мәтрүшкә менән байытылған етен майын эсеү файҙалы. Уларҙың ҡатнашмаһы бергә гиперицин бүлеп сығара, ә был матдә ошо проблемаларҙы еңеү мөмкинлеген бирә лә инде. Шулай уҡ был ҡатнашма йоҡо баҫҡанда, ҡурҡыу тойғоһо булғанда, күңел төшкәндә ярҙам итә, сөнки һары мәтрүшкә ярҙамында мейелә серотонин күләме арта.

● Һары мәтрүшкә төнәтмәһе үпкә туберкулезы, шештәр, шулай уҡ йоморо бабасырҙар булғанда ярҙам итә.

● Диатез, сабыртма, эренле шештәре булған балаларҙы өй шарттарында аҙнаһына өс тапҡыр, әгәр был сирҙәр инфекция һөҙөмтәһе булмаһа, һары мәтрүшкә төнәтмәһе менән йыуындырырға кәрәк. Витилиго сирен дауалағанда ла ошо төнәтмәнең файҙаһы ҙур, әммә был осраҡта уны эсәләр.

● Һары мәтрүшкә төнәтмәһе микробтан елһенеүгә ҡаршы сара булараҡ, уны косметологияла ла файҙаланалар, йәғни тирене таҙартырға мөмкин. Шулай уҡ һары мәтрүшкә төнәтмәһен биткә иртән һәм кисен һөртөп, һытҡынан ҡотолорға мөмкин.

● Һары мәтрүшкә ҡайнатмаһын эсеү пеләшлектән ярҙам итә, ә уның һутын һөйәлде бөтөрөү өсөн ҡулланалар.

● Шулай уҡ, бик күп тире ауырыуҙарын дауалағандағы кеүек, һары мәтрүшкә беренсе һәм икенсе дәрәжәләге бешеүҙәр ваҡытында ла бик файҙалы. Тире яман шеше һәм ашҡаҙан сей яраһы ваҡытында һары мәтрүш майын мамыҡ менән яра урындарына һалырға кәрәк.

● Ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшендә шеш барлыҡҡа килгәндә, һары мәтрүшкәнең араҡыға һалып эшләнгән төнәтмәһен мамыҡҡа һеңдереп, көнөнә өс тапҡыр шешкә ҡуйырға.

● Һары мәтрүшкә алкоголизмға һәм тәмәке тартыуға ҡаршы һөҙөмтәле көрәш сараһы ла. Алкоголизм ваҡытында аш алдынан ике ҡалаҡ ҡайнар һыу менән бешекләнеп, ярты сәғәт һыу ваннаһында быҡтырылған һары мәтрүшкә үләнен ашарға кәрәк. Бер стакан ҡайнар һыуға ике ҡалаҡ үлән алына. Ә тәмәке тартыусылар өсөн һигеҙ ҡалаҡ үләнгә 500 мл спирт һалып, уны 10 көн дауамында төнәтергә лә, тәмәкесегә ашағандан һуң, сәйенә 40-50 тамсы тамыҙып бирергә кәрәк.

● Һары мәтрүшкә ҡушылған препараттар менән дауаланыу ваҡытлыса яҡтылыҡҡа һиҙгерлекте көсәйтә, шуға был ваҡытта ҡояш нурҙарынан һаҡланыу зарур. Шулай уҡ һары мәтрүшкәне ауырлы ҡатындарға һәм температура булғанда ҡулланырға ярамай. Һары мәтрүшкәле препараттарҙы спиртлы эсемлектәр, шоколад һәм кофе, ыҫланған һәм маринадланған ризыҡтар менән бергә ҡулланыу тыйыла. Тын ҡыҫылыу менән яфаланыусыларға, һары мәтрүшкә ҡулланғанда, ингаляторҙар файҙаланыу тәҡдим ителмәй, ул ғына ла түгел, танауға һала торған һәм биҙгәк өсөн тәғәйенләнгән дарыуҙарҙы ҡулланыу хәүефле. Шуға күрә, кәңәштәрҙе тормошҡа ашырыр алдынан, табип менән кәңәшләшергә онотмағыҙ.

## НАМАҞ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (7) дүшәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (8) шишәмбе | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |
| 13 (9) шаршамбы | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (10) кесе йома | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (11) йома | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (12) шәмбе | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 17 (13) йәкшәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ДАУА АЯҠ АҪТЫНДА



# СӨГӨЛДӨР ЯПРАҒЫН ТАШЛАМА

**Халыҡ борон-борондан йәшелсәләрҙең һабағы файҙалы булыуын белгән һәм ҡулланған. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта кишер һәм ҡыҙыл сөгөлдәр һәр кемдең баҡсаһында үҫә. Ә уларҙың һабаҡтары борщ нигеҙен тәшкил итә. Шулай уҡ улар күңел төшөнкөлөгө менән көрәшеүҙә ярҙам итеүсе, ҡан тамырҙарын нығытыусы аскорбин кислотаһына, мейе һәм нервы системаһы өсөн файҙалы фолий кислотаһына, тимергә, калийға, магнийға, кальцийға, йодҡа бай.**

**Ҡыҙыл сөгөлдәр һабағы һәм япраҡтары** салаттар өсөн бик ҡулай. Ул күҙәнәклеккә бай. Әҙерләр алдынан яҡшы итеп йыуып, ваҡ ҡына итеп турарға һәм ҡайнар һыу менән бешекләргә кәрәк. Япраҡтар йомшаҡ ҡына булып китер. Сөгөлдөр япрағына редис, сельдерей, ҡыяр, салат япраҡтары, шпинат, йәшел тәмләткестәр йәки сәтләүек ҡушып, үҫемлек майы, лимон йәки алма һуты, ҡаймаҡ ҡушып болғаһаң, бик тәмле ризыҡ килеп сыға. Сөгөлдөр һабағын икенсе блюдолар әҙерләгәндә - йәшелсә рагуһына, котлеттарға, запеканкаларға, омлеттарға ҡушып ебәрергә мөмкин. Шулай уҡ унан бәлеш эслектәре эшләргә лә була. Сөгөлдөр һабағын киптерергә, тоҙларға, йәшелсәләр ҡушып консерваларға мөмкин. Сөгөлдөр япраҡтарының файҙаһы:

- Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары ваҡытында, диабетта, анемия булғанда, ҡалҡан биҙе ауырыуҙары ваҡытында файҙалы.
- Баш ауыртҡанда борон сөгөлдөр япрағын иҙеп, барлыҡҡа килгән бутҡаны маңлайға 15 минутҡа һалғандар.
- Төйөлгән сөгөлдөр япрағын конъюнктивит ваҡытында күҙ ҡабағына һалалар.
- Сөгөлдөр япрағы төнәтмәһе эс ҡатҡанда ярҙам итә: бер ҡалаҡ япраҡты бер стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, һыуынғансы төнәтергә һәм көнөнә бер стаканды тигеҙ өлөштәргә бүлеп, дүрт тапҡыр эсергә.
- Яра оҙаҡ уңалмағанда, тире ярылғанда - яраны йыуыу һәм компресс ҡуйыу өсөн япрағының һутын, уның иҙелгән бутҡаһын һәм төнәтмәһен ҡулланалар.
- Үксә ярылғанда һабағының төнәтмәһенә аяҡтарҙы тығып ултыралар.
- Матдәләр алмашыныуын әүҙемләштерә, ҡанды барлыҡҡа килтерә, сей яраны, гаститты, бауыр ауырыуҙарын дауалағанда ярҙам итә.

**Редис һабағы һәм япрағы** С, В1, В2, РР витаминдарына, калий, кальций, фосфор, тимер, магнийға бай. Уны йәшел тәмләткес итеп салаттарға, щи, борщҡа өҫтәргә мөмкин. Шулай уҡ киптерергә, ваҡ ҡына итеп турап, ҡышҡылыҡҡа тоҙлап, һыуыҡҡысҡа ултыртып ҡуйырға була. Редис япраҡтарында С витамины тамырына ҡарағанда күберәк.

**Кишер һабағын һәм япрағын** ашҡа, салаттарға, запеканкаларға өҫтәйҙәр, йәшелсәләрҙе консервалау өсөн маринад эшләйҙәр, хатта сәй итеп эсәләр. Борон ҡатын-ҡыҙҙар яҡшы үҫһен һәм ныҡ булһын өсөн сәстәрен кишер һабағы төнәтмәһе менән сайҡаған. Яңы ғына йыйылған кишер һабағы әсерәк була. Әсе тәмен алыу өсөн уны ҡайнар һыу менән бешекләп алырға кәрәк. Кишер һабағын дауа итеп тә файҙаланалар:

- Геморройҙан шифалы сәй - 1 балғалаҡ ҡараңғы урында киптерелгән һабаҡты бер стакан ҡайнар һыу менән бешекләп төнәтергә һәм көн дауамында уны ййлап эсергә.
- Цистит ваҡытында кишер һабағы төнәтмәһен йәки уны тигеҙ миҡдарҙа петрушка төнәтмәһе менән ҡушып эсергә.
- Кишер һабағы төнәтмәһен миома һәм ҡан туҡтамаған ваҡытта эсәләр.
- Дерматит, псориаз, аллергия яфалағанда кишер һабағы төнәтмәһенән сылаҡкыс (примочка) эшләйҙәр.

✓ *Шайтандың мөхәббәтте емереү өсөн уйлап тапҡан иң һәҙемтәле һәм ышаныслы ысулы - ул мыжыҡлыҡ. Был сара әле үҙ эшен эшләмәй ҡалғаны юҡ. Ул йылан сағыуына тиң. (Дейл Карнеги).*



*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге йылап үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**
**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**Артабан киттек. "Башҡортостан" гәзите журналисы, йәш шағир Денис Ғилманов, Шәйехзада Бабичтың ижадын бөтәһе лә белергә тейеш, тигән фекерҙә.**

- Мин иғтибарығыҙҙы милли әҙәбиәтебеҙҙең йондоҙо - Шәйехзада Бабичҡа, замандың ҡырҡыулашҡан мәлендә лә үткер һүҙен халыҡҡа еткергән, азатлыҡ йырсыһы булған данлы шәхесебеҙгә йүнәлтмәксемен. Нисек кенә ҡарама, ул тарихыбыҙҙың ҡараңғы төнөндә халҡына "нур сәсеп", киләсәккә юл яҡтыртҡан, юл ярған шағир. Йәш егеттең "Халҡым өсөн", "Әйҙә, милләт", "Ҡотәм" кеүек бер нисә шиғырын уҡыһаң да, милләтенең киләсәге өсөн хафаланыуын аңлайһың. Шул уҡ ваҡытта шағир түңкәрелештең ҡанлы мәхшәре эсенән донъя менән дә һоҡланып өлгөрә:

*"Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә,*
*Йырҙар яҙам, елкәй, иҫмәй тор",* - тигән шиғри юлдар ошо хаҡта һөйләй.

Йәнә Шәйехзада Бабичтың лирик шиғырҙарын да билдәләп китергә кәрәк. Түбәндәге күплет иҫкә төшә:

*"Зәңгәр күҙкәйҙәрең зәңгәрләтеп,*
*Гүзәл ҡарай минең фәрештәм.*
*Аh! Шул күҙҙәр миңә йәндән артыҡ,*
*Бәхет табам ҡарап тороштан"...*

Өҫтәп шуны әйтергә мөмкин: "Ғазазил" поэмаһын яҙған кеше бер нисек тә ябай була алмай! Әле революция башланмаҫ элек уҡ "Марсельеза"ны йырлап, урам буйлап ҡыҙыл байраҡ күтәреп килгән колонналарҙы һүрәтләгән был әҫәрен, күрәҙәлек итеү, тип ҡабул итерлек. Ижады аша башҡорт әҙәбиәтенә жанр, строфа йәһәтенән һәм башҡа яңылыҡтар индергән, егерме дүрт йәшендә үҙ тыуған халҡы, намыҫ өсөн йәнен фиҙа ҡылған егеттән бөгөн дә йәштәр үрнәк, рухи тәрбиә ала.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! "**Башҡорт китабы топ-100+**" акцияһына һеҙ ҙә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң лайыҡлыларын һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "**Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы**" тип аталған фекер алышыу битендә "**#башкитап**" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

*ВИКТОРИНА*



## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың "Шунда ята батырҙар һөйәге" романы буйынса һорауҙар.**

**1. Алдар Исәкәевкә тархан титулы (тәүгеһе) уның ниндәй батырлығы өсөн бирелә?**
а) Аҡ барс тигән йыртҡысты үлтергәне өсөн;
б) ҡаҙаҡ батыры Торсонбайҙы көрәштә еңгәне өсөн;
в) Азов походында черкес батырын еңгәне өсөн;
г) Ҡаҙағстандың Кесе Йөҙөн Рус дәүләтенә ҡушыуҙағы уңыштары өсөн.

**2. Алдарбай Исәкәев ниндәй ырыу башҡорто?**
а) бөрйән;
б) ҡыпсаҡ;
в) үҫәргән;
г) түңгәүер.

**3. Ҡаҙан ханлығының Кесе Жузын Рус дәүләтенә ҡушыу сәфәрендә Алдарбай Исәкәев менән бергә юлланыу бурысы Рус дәүләтенең ҡайһы вәкиленә йөкмәтелә?**
а) прибыльщик Хажибәккә;
б) Өфө воеводаһына;
в) йөҙ башы Калашниковҡа;
г) Тәфтиләүгә - Тевкелевка.

**Дуҫтар! Кем дә кем ошо һорауҙарға дөрөҫ яуапты беҙгә беренселәрҙән булып хәбәр итә, шуға Ноғман Сөләймән улының автографы ҡуйылған "Алдар-батыр" китабын бүләк итәбеҙ!**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

*ҺҮҘЛЕК*



## БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Үрмә клевер** - клевер ползучий
**Үрмә кәрләс** - живучка ползучая
**Үрмә ҡаҙ үләне** - лапчатка ползучая
**Фаяғөл, тумыртҡа мышары** - синюха голубая
**Фуксия** - тамсы гөл, фуксия
**Хан ҡынаһы** - нежник, солнцецвет
**Хөрмә** - хурма
**Хуш еҫле миләүшә** - фиалка душистая
**Хуш еҫле кәрешкә** - душистый горошек
**Хуш еҫле тәмәке** - табак душистый
**Хәтфүлән, бесәй тарыһы, бесәй ҡойроғо** - амарант
**Һабын сәскә, сәпсек һабыны** - зорька, татарское мыло
**Һабын үләне** - мыльнянка лекарственная
**Һағыҙут** - горицвет кукушкин
**Һаҙанаҡ** - багульник
**Һаҙ бажаты** - мятлик болотный
**Һаҙ билсәне** - осот болотный
**Һаҙ боланыуты** - кипрей болотный
**Һаҙ еләге** - морошка
**Һаҙ емеше** - водяника, вороника
**Һаҙ йондоҙҡайы** - звездчатка болотная
**Һаҙ тарбағайы** - скерда болотная
**Һаҙ томбойоғо** - калужница болотная
**Һаҙ мүге** - мох торфяной
**Һаҙ сырмалсығы** - чина болотная
**Һаҙ һеркәһе** - лапчатка норвежская
**Һаҙ һөтләгәне** - молочай болотный
**Һаҙ ярансы** - герань болотная
**Һарсин** - сирения
**Һары акация** - акация желтая
**Һарыбаш** - крестовник весенний
**Һарыгүҙ** - золототысячник обыкновенный
**Һары ҡарағат** - смородина золотистая
**Һары мәтрүшкә** - зверобой продырявленный
**Һөтләгән** - молочай

**С. ЙӘНТҮРИН,**
**Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘЙГЕ КӨН...

## бер йылды туйҙыра

Тәмһеҙҙе балға һалһаң да тәмле булмаҫ, йәмһеҙҙе йәмгә манһаң да йәмле булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙың буй еткеһеҙ булып күренеүе - ул уның матурлығын арттырыусы тағы бер бер биҙәнгес әйбер кеүек.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Мөхәббәттә бик тиҙ уныш яулау уның баһаһын кәметә, ә мөхәббәт юлындағы кәртәләр уның баһаһын арттыра.

**(Стендаль).**

Шайтандың мөхәббәтте емереү өсөн уйлап тапҡан иң һәҙемтәле һәм ышаныслы ысулы - ул мыжыҡлыҡ. Был сара әле үҙ эшен эшләмәй ҡалғаны юҡ. Ул йылан сағыуына тиң.

**(Дейл Карнеги).**

Ожмахта нимә эшләгәндәрен беҙ белмәйбеҙ. Уның ҡарауы, ожмахта өйләнмәйҙәр һәм кейәүгә сыҡмайҙар икәнен беләбеҙ.

**(Джонатан Свифт).**

Батшалар һәм ҡатындары хыянат иткән ирҙәр бар халыҡтың уларҙың йөҙөнән көлгәнен иң һуңғы булып белә.

**(Наполеон Бонапарт).**

Кеше ғүмере шулай үтә: бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға ҡаршы көрәшергә ҡурҡаһың һәм бер туҡтауһыҙ йәнеңә тыныслыҡ эҙләйһең, ә ундай ҡаршылыҡтар булмай башлағас, өлгәшелгән йән тыныслығы түҙеп тормаҫлыҡҡа әйләнә.

**(Блез Паскаль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер әсә Аҡһаҡал янына килә һәм уға шундай һорау бирә:**
**- Хөрмәтле Аҡһаҡал, мин үҙемдең улым тураһында өҙләкһеҙ борсолоу кисерәм. Балам ниндәйҙер бәләгә осрап ҡуймаһын, тигән уй әҙәрлеклә мине. Миңә ни эшләргә икән?**
**- Яуап бик ябай: улыңа насарлыҡ теләүҙән туҡта! - ти Аҡһаҡал. - Эш шунда: һинең башыңда уралған уйҙарҙы Йыһан теләк рәүешендә ҡабул итә. Балалар үҙҙәре лә ата-әсәнең уға ҡарата булған теләктәрен, уйлағандарын йәшәү программаһына һала. Шуның өсөн улыңа мөнәсәбәтеңдә үҙгәрт. Уның тураһында тик яҡшыны ғына уйла. Уға юлыңда осраған бар кәртәләрҙе еңеп сығырға һәләтле иң көслө, аҡыллы, лайыҡлы кеше итеп ҡара...**
**Аҡһаҡалдың әйткәндәрен тәрән уйға ҡалып тыңлап торғандан һуң, әсә китә. Уның артынса Аҡһаҡал шулай ти:**
**- Кешенең төп дошмандары - яҡындары шул инде..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4417
Заказ - 1202/07